ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 май (һабанай) 2019
№ 18 (852)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Изгелек ҡылып йәшәйек



3

Фекерҙәр…



ауаҙдашлыҡ тапты 6

Яугир атайҙарыбыҙҙың…



һуғыш хәтирәләрен күңелдә һаҡлайбыҙ 8-9

Башланғыс - фольклорҙа



11

ТВ-программа 14

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!**

***Әлеге мәлдә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2019 йылдың икенсе яртыһына - 624 һумға, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тингә; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II группа инвалидтары - 563 һум 40 тингә, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур баҫмалар һәм Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы менән бүләкләнәр. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ…

## Һеҙҙең ғаилә һуғыш тураһында ниндәй хәтирәләр һаҡлай?

***Сажиҙә ИБРАҺИМОВА-ҠОҘАҠАЕВА, РСФСР халыҡ мәғарифы отличнигы, Өфө ҡалаһы:*** Бына май ҙа килеп етте һау кешегә, ә беҙҙең һуғыш йылдары балалары быуыны өсөн был ай иң тәүҙә Еңеү көнө булып күҙ алдына баҫа. Ошо иҫтәлекле датаға бәйле хис-тойғоларымды һөйләйем әле һеҙгә. Һуғыш башланып, атайым фронтҡа киткәндә, миңә ни бары 2 йәш кенә булған. Атайым 1942 йылда Ленинград янындағы һуғышта һәләк булып ҡала, шуға күрә мин "атай"ҙың кем һәм нисек булғанын да белмәйенсә үҫтем Ҡырмыҫҡалы районы Малай ауылында. Хәҙер Ҡамышлы менән Малай ауылдары араһында һуғыштан ҡайтмаған яугирҙар иҫтәлегенә асылған стела ғына атайым хаҡында хәтерләтеп тора. Тик бер нәмә күңелемде борсой: был стела һаҙлыҡ эсендә урынлаштырылған һәм уның янынараҡ барып, фамилияларҙы уҡыр өсөн дың-дың итеп тимер юл менән барырға кәрәк. Шунан, ҡайҙа икән минең атай, тип эҙләй башлайһың, сөнки исемлектә Ҡоҙаҡаевтар шул тиклем күп, ә исемдәре яҙылмаған. Сәскә һалырға ла урыны юҡ, күрәләтә һаҙлыҡҡа һалып булмай бит инде! Күрәһең, шуғалыр ҙа, был стела янына әллә ни килеүсе лә юҡ.

Ауылда һуғыштан иҫән-имен ҡайтҡан кешеләр ҙә булды, беҙ уларҙан һәм уларҙың балаларынан көнләшеп тә ҡуя инек. Сөнки улар ветеран атайҙарына тәғәйен төрлө ташламалар, өҫтөнлөктәр менән файҙаланды. Ә беҙ, етемдәр, атай тип әйтеүҙән бер мәхрүм булһаҡ, һәр төрлө дәүләт хәстәрлектәре, льготалар менән дә файҙалана алманыҡ. Әйтерһең дә, беҙҙең атайҙар ил азатлығы өсөн ғүмерен бирмәгән. Был турала беҙ тейешле урындарға ла, матбуғат баҫмаларына ла күп яҙҙыҡ, тик бер ниндәй үҙгәреш тә булманы, тип әйтер инем, юбилей миҙалдары таратып сыҡтылар. Уныһын да ниндәйҙер ойошмаларҙан барып, үҙеңә юллап алырға кәрәк, тинеләр. Киләһе йыл Еңеүҙең 75 йыллығына атайҙары фронтта һәләк булған һуғыш йылы балалары өсөн ниндәйҙер хәстәрлек һәм матди ярҙам саралары күрһәтелерме икән, тиган һорау бар күңелдә...

**(Дауамы 2-се биттә).**




ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

## БӨЙӨК ЕҢЕҮҘЕҢ…

### бәҫе китмәһен

**Йыл буйы әллә күпме байрам көндәрен билдәләйбеҙ. Ләкин бөтә Рәсәй һәм элекке СССР халҡы өсөн май айы бигерәк тә күңелгә яҡын. Сөнки нәҡ ошо айҙа Бөйөк Еңеү байрамын билдәләйбеҙ. Бигерәк тә беҙ, оло быуын вәкилдәре, уның ни тиклем әһәмиәтле булыуын хәтерҙән бер минутҡа ла сығармайбыҙ. Һуғыштан һуң 5 йыл ғына үткәс тыуған бала булараҡ, уның ни тиклем ҡыйралыштар килтереүен, күпме баланың етем ителеүен, аслыҡ-яланғаслығын күреп үҫтем.**

Бөгөнгө көндә был байрамдың бәҫе китә бара кеүек. Бер быуат та ваҡыт үтмәгән, ҡыҙғанысҡа күрә, Еңеүҙе билдәләүҙе лә ниндәйҙер шоуға әйләндереп баралар. Эйе, "Үлемһеҙ полк"тың әһәмиәте лә барҙыр, бәхәсләшмәйем, ләкин кире яҡтарын да күрмәйенсә булмай. Парадтан һуң һалдаттарҙың сүп-сар һауыттарында туҙышып ятҡан рәсемдәрен күреп ни тиклем йөрәк әрней. Беҙ бөгөн матур, тыныс тормошта йәшәһен өсөн үҙ ғүмерен биргән һалдаттың фотоһүрәтенең аяҡ аҫтында ятыуы ғәфү итерлек хәл түгел. Шуға күрә, бәлки, парадҡа һәр кем тик үҙенең олатаһы, ҡарт атаһы йәки башҡа туғанының фотоһүрәте менән генә сығыуын ҡаты тикшерергә кәрәктер ул.

Һуғыштың уртаһында бер ҡашыҡтан ашап, бер һалдат фляғаһынан һыу эсеп алышҡандарҙың тоҡомдары бөгөн килеп үҙ-ара ыҙғыша. Күптән түгел үҙебеҙҙең республикала ғына ошондай бәрелештәр булып, әллә нисә республиканы аяғөҫтө баҫтырҙы. Башҡортта: "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул", - тигән мәҡәл бар. Беҙгә эшкә килеүселәр шуны онотоп ташлай, күрәһең. Ләкин үҙебеҙҙең егеттәрҙе лә һалҡын ҡанлыраҡ булырға, күҙ йомоп, йоҙроҡ болғап утҡа ташланмаҫҡа саҡырам. Берәһенә бер нәмә булыр, яҙмышығыҙҙы боҙоп ҡуйырһығыҙ. Бындай ваҡытта бәхәсте кем башлауын күҙгә элеп тормайҙар бит. Ғөмүмән, тормошобоҙ тыныс ҡына булһын өсөн һәр кем ҡулынан килгән тиклем тырышырға тейештер, сөнки һуғыштың эҙемтәләрен әле булһа тоябыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# БӨЙӨК ЕҢЕҮҘЕҢ...

## бәҫе китмәһен

(Башы 1-се биттә).

Һуғыш ветерандарына кире ҡайтып, шуны тағы ла әйткем килә. Ярҙам ниәтенән бирелгән аҡса әллә күпме ғаиләнең араһын болғаны, бер туғандарҙы ҡан дошманға әйләндерҙе. Ә ветеран йә уның ҡатыны ул аҡсаның мәнфәғәтен күреп тә өлгөрмәй, ҡыҙғаныска ҡаршы. Шуға күрә ветерандарға бындай ярҙамдың маҡсатлы рәүештә күрһәтелгән ысулын табып булалыр, тигән һорау менән власть органдарына мөрәжәғәт итәм.

Апрель аҙағы етә башлаһа, ветерандарға бар иғтибар арта. Телевизорҙан һуғыш тураһындағы кинолар, документаль тапшырыуҙар, байрам концерттары һәм башҡалар. Ә нинә йыл буйына, мәсәлән, аҙнаның бер көнөн тулыһынса ошо темаһы яҡтыртыуға арнамаҫҡа? Йәштәргә күрһәтерлек тарихи әйберҙәр бихисап. Теленең нимә һөйләгәнен ҡолағы ишетмәгән комиктарҙың сығышын ҡарап ултырғансы, үҙҙәренең ҡанлы үткәне тураһында күберәк белһәләр, тыныслыҡтың ҡәҙере юғалмаҫ ине. Әгәр ҙә бөтә ил буйынса булмаһа ла, үҙебеҙҙең Башҡортостан юлдаш каналында ошо фекерҙе күтәреп алмаҫтар микән, тип ышанам.

Бер йылды 9 май көндө Өфөләге "Дан музейы"на бушлай инеү бәхете тейҙе. Ул музей йыл әйләнәһенә бушлай булһын өсөн дәүләт тарафынан ярҙам күрһәтелһә, унда барыусылар һаны ла артыр ине. Шулай уҡ бөтә мәктәп һәм, гөмүмән, бөтә төр уҡыу йорттарында ла йылына бер тапҡыр уҡыусылар һәм студенттарҙы ошо музейға алып барыу мотлаҡ булырға тейеш, тип уйлайым. Балаларҙы кәсләп тиерлек концерт һәм спектаклдәргә алып йөрөйҙәр, ә ни өсөн ошо һәм башҡа музейҙарҙы урап үтәләр?

Бына нисә йыл "Һуңғы ҡыңғырау" көнөндә магазинда спиртлы эсемлектәр һатылмай. Бик хуп күренеш. Еңеү көнөндә лә ошо тыйыу үҙ көсөндә булһа икән. Бөйөк Еңеүгә бер ҡыҫылышы булмаған кешеләрҙең матур байрамды йәмһеҙләп, эсеп, ауа-түнә урам буйлап йөрөүе бер ҙә яҡшы күренеш түгел. Республика етәкселеге минең ошо фекеремә күҙ уңына алһа, бер кем дә ҡаршы һүҙ әйтмәйәсәгенә ышанам. Кирећенсә, бөтә яҡлап хуплау ғына табасаҡ бындай ҡарар.

Оҙаҡ йылдар күнелемдә йөрөтөп тә, нисек йәмәғәтселек иғтибарына сығарырға белмәй инем. "Киске Өфө"гә әлеге мөмкинлек өсөн рәхмәтемде белдерәм. Күңелем бушап ҡалды. Донъялар тыныс торһон. Имен-аман булайыҡ.

**Мөҙәрис НИҒМӘТУЛЛИН.**
**Октябрьский ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙҙең ғаилә һуғыш тураһында ниндәй хәтирәләр һаҡлай?

(Башы 1-се биттә).

***Шәмсинур СӘЙЕТОВА, Йылайыр районы Юлдыбай ауылы:*** 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышының шанлы йылдары беҙҙән алыҫлаша барһа ла, бөгөнгөләй иҫемдә ҡалған бала саҡ хәтирәләремдең иң ҡыуаныслыһы - 1945 йылдың 9 майы - фашизмды еңгән көн күңелемдән мәңге юйылырлыҡ түгел. Ул саҡ миңә 10 йәш ине. Матур, ҡояшлы көн. Урамда хәтфә төҫлө йәм-йәшел үлән. Һуғыш бөткән, тигән хәбәрҙе ишетеү менән беҙ, бер төркөм балалар, кәнсәләргә йүгерҙек. Ә унда инде бик күп халыҡ йыйылып киткән; шатлығынан ныҡ тулҡынланған бер ағай (ул колхоз рәйесе ине) һуғыш бөтөүе хаҡында ҡыҫҡырып телмәр тота. Кешеләрҙең ҡайһылары ҡыуана, ҡайһылары илай. Беҙ ҙә, өс бала, әсәйебеҙҙе ҡосаҡлап илайбыҙ: атайыбыҙҙан "ҡара ҡағыҙ" килгәйне шул инде... Беҙҙең генә түгел, күптәребеҙҙең атайҙары ҡәһәрле яу ҡырында ятып ҡалды. Һуғышҡа ылау-ылау сығып китһәләр ҙә, ут эсенән ҡайтыусылар берәү-икәү генә булды. Беҙҙең ыуыҙҙай бала сағыбыҙ башланып ҡына торғанда, шулай итеп, уны ла тартып алды ҡәһәрле Гитлер. Беҙ, һуғыш осоро балалары, балалыҡ хистәрен шуға ла иртә онотоҡ, уның ҡарауы, үҙаллы һәм сыныҡып үҫтек. Аҫ-яланғас булһаҡ та бирешмәнек, әмәлен табып, нисек тә йәшәргә ынтылдыҡ, тик ауырлыҡтар арҡаһында күптәребеҙ ваҡытында уҡырға бара алманы: кейергә - кейем, ашарға икмәк юҡ ине бит... Ҡыш сығып, ҡара ергә аяҡ баҫыу менән ашарға яраҡлы ниндәй үлән бар - шуларҙы эҙләп, көн оҙоно урман-ҡырҙар ҡыҙырып булдыҡ. Балаға ғына көйө өлкәндәргә эйәреп, улар менән бер ҡатарҙан эшләнек. Утауға ла йөрөнөк, әсәйҙәр тракторға түмәр быса ине, шуларҙы тигеҙләп өйәбеҙ; киҫһә, тоҡтарға тултырабыҙ. Көҙ етһә, иген баҫыуындабыҙ: башаҡ йыябыҙ. Ауырлыҡ берләштергәндер, күрәһең, кеше ул ваҡыт бик татыу, бер-береһенә ярҙамсыл ине. Әсәйҙәр ҡара таңдан ҡара кискә тиклем колхоз эшендә, кис етһә, арыныҡ, тип тормай, бер өйгә йыйылалар ҙа, һуҡыр шәм яҡтыһында фронт өсөн өс бармаҡлы бирсәткә, ойоҡбаш бәйләйҙәр ине. Ололарҙың фиҙаҡәр хеҙмәтендә беҙҙең дә лайыҡлы өлөш булды, тип әйтә алам бөгөн.

Шулай ҙа ана шул һуғыш осоро балалары быуыны ла күҙгә күренеп һирәгәйә хәҙер. Иҫәндәре лә бик оло йәштә, уҙа барһа, 80 - 85-те ҡыуа. Ил етәкселәренә рәхмәт, аҙ булһа ла пенсияны өҫтәп тора. Әле бына ошо йылдың 1 ғинуарынан 30 йыл ауыл хужалығында эшләгән кешеләргә 25 процент күләмендә пенсияларын арттырырға ҡарар ителде, тик ул ауыл ерендә йәшәгән бөтән ҡарттарға ла түгел икән шул. 80-де үткән өлкән быуын пенсионерҙарының бөтөнөһөнә лә тигеҙ ҡараш булһын ине шулай ҙа, тигән теләгем дә бар. Әлеге әйткәнемсә, бала саҡтан алып Еңеү өсөн беҙ ҙә хәлебеҙҙән килгәнсә көс түктек; эшләткәндә бер ҙә бала-сағa тип торманылар, өй беренсә йөрөп, хәлһеҙ балаларҙы ла эшкә ҡыуып йөрөнөләр заманында. Бының менән мин, һуғыш йылдары балалары ла оло хөрмәткә һәм хәстәрлеккә лайыҡ, тип кенә әйтмәксе инем...

***Мәстүрә МӨХӘМӘТЙӘНОВА-ДӘҮЛӘТБАЕВА, Баймаҡ ҡалаһы:*** Атайым Мөхәмәтйәнов Рәсүл Фәруҡ улына ни бары бер йәш кенә булғанда уның атаһы - Ҡолсора ауылы мәзине булып торған 42 йәшлек ҡартатайым ялған ошаҡ буйынса золом ҡорбаны була. Ул ҡулға алына һәм иң юғары язаға хөкөм ителә. Шулай итеп, атайыма был донъяға тыуыу менән атайһыҙ тороп ҡалырға, репрессияланған ғаиләләр иненә төшкән әсе яҙмыш нужаларын буйтым күтәрергә тура килә.

Байым мәктәбендә дүрт класты тамамлаған, уҡырға һәләте һәм дә теләге ҙур булһа ла, атайым артабан уҡый алмай: Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Ике ағаһы ла фронтҡа китә, ун ике йәшлек атайым ауыл эштәренә егелә. "Ҡайҙа ҡушһалар, шунда эшләнек, эшләмәгән эш ҡалманы", - тип һөйләй торғайны ул. Йылҡы көтөүе көтә, үгеҙ егеп, ер һөрә, урманда ағас ҡырҡып, бүрәнә әҙерләй, әллә ҡайҙа ятҡан Магнитогорск ҡалаһынан үгеҙ егеп кәрәсин, солярка ташый... "Бөтәһе лә - фронт өсөн, бөтәһе лә - Еңеү өсөн!" - бына шул була ул саҡ кешеләрҙең күңелендә. Миллион ҡорбандар ғүмере менән яуланған Еңеү көнө лә килеп етә. Атайымдың өлкән ағаһы яу ҡырында һәләк була, икенсеһе яраланып ҡайта. Тормош бер аҙ яйланғандай була. Атайым Һамар ҡалаһында механизаторҙар курсын тамамлап ҡайта ла, 45 йыл буйы ошо һөнәренә тоғро булып, туған колхозына хеҙмәт итә. Ул Башҡортостандың атҡаҙанған механизаторы, хеҙмәт ветераны тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булды. Абруйлы, әүҙем йәмәғәтсе булараҡ та уны ихтирам иттеләр ауылдаштар. Хаҡлы ялға сыҡҡас иһә ең һыҙғанып ветерандар советы рәйесе булып эшләне. Кешеләргә - кеселекле, һорау-үтенестәренә иғтибарлы булды. Колхоздар бөтөрөлгәс, атайымдың янып-көйөүҙәре... "Беҙ ни тиклем көс түгеп, көнө-төнө эшләп күтәргән колхозды "һә" тигәнсә юҡ иттеләр",- тип үртәлде. Беҙҙең өсөн иң яҡшы атай булды ул. Бер ваҡытта ла ҡаты һүҙ әйтмәне, беҙҙе ҡаҡманы-һуҡманы. Әсәйем менән икәүләп үҙҙәре өлгәһендә беҙҙе эш һөйөүсән итеп тәрбиәләй алдылар. Үкенескә, бөгөн атайым беҙҙең арала юҡ... Бик һағынып иҫкә алам ҡәҙерле атайымды, ул иҫән саҡтағы бәхетле саҡтарыбыҙҙы... Ошо бәләкәй генә хәтирәләрем ваҡытында атайыма әйтә алмай ҡалған рәхмәт һүҙем булһын, уның рухын шатландырһын ине...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**



## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Оператив кәңәшмәлә республика етәксеһе Радий Хәбиров Хөкүмәткә көслө дауылдан зыян күргән муниципалитеттарға ремонт-тергеҙеү эштәрен башҡарыуҙа ярҙам күрһәтергә ҡушты. Хәбәр ителеүенсә, Ауырғазы районының 11 ауылында төрлө объекттарҙың ҡыйыҡтары емерелгән. Ишембай районының Петровск ауылында участка дауаханаһы амбулаторияһы, Ғафури районының Антоновка ауылында Красноусол үҙәк район дауаханаһының фельдшер-акушерлыҡ пункты, Стәрлетамаҡта тимер юл вокзалы бинаһы зыян күргән.

✓ 8 сентябрҙә Башҡортостан Башлығын һайлауҙа участкалар 2 сәғәткә оҙағыраҡ эшләйәсәк. Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары пленар ултырышта Һайлау тураһындағы кодексҡа үҙгәрештәр индерҙе. Ҡабул ителгән законға ярашлы, Берҙәм һайлау көнөндә - 8 сентябрҙә һайлау участкалары иртәнге сәғәт 7-нән киске 9-ға тиклем эшләйәсәк.

✓ Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округы тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы Советтың беренсе ултырышында округтағы дәүләт власы органдарының ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса эшмәкәрлеге тикшерелде. Унда Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров та сығыш яһаны. Төп мәсьәләне ике блокка бүлергә хәл ителде. Башҡортостан етәксеһенә экологик мәҙәниәт формалаштырыу, экологик белем һәм тәрбиә биреүҙе үҫтереү өсөн яуаплылыҡ йөкмәтелде.

✓ Башҡортостан Башлығы ҡарамағында Мәҙәниәт буйынса совет булдырыла. Республика Башлығының мәҙәниәт һәм сәнғәт мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе Аҫҡар Абдразаҡов ошо турала белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, танылған башҡарыусыларҙан, драма театры актерҙарынан, рәссамдарҙан, музыканттарҙан, китапханасыларҙан, музей һәм сәнғәттең башҡа өлкәләре вәкилдәренән торған Мәҙәниәт буйынса совет ойоштороға кәрәк.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән республикала Йәштәр хөкүмәте ойоштороlа. Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына Йәштәр хөкүмәтенең рәйесе, уның урынбаҫарҙары, ағзалырына 18-ҙән алып 30 йәшкә тиклемге кандидаттар һайлау конкурсын үткәреү бурысы йөкмәтелгән. Йәштәр хөкүмәте инициативалы йәштәргә ярҙам итеү, уларҙы сәйәси һәм иҡтисади проблемаларҙы хәл итеүгә ылыҡтырыу, власть структуралары өсөн кадрҙар әҙерләү өсөн ойошторола, тиелә ҡарарҙа.

БЫЛ АЙҘА...

# ИЗГЕЛЕК ҠЫЛЫП ЙӘШӘЙЕК

**Май - һабанай - күңелле ай: яҙ ахыры, йәй башы; бөрөләр шартлап япраҡ ярған, ер йөҙө йәшел ебәккә төрөнә генә башлаған саф, нурлы мәлдәр ҙә килеп етте. Әйтерһең дә, тәбиғәттең сабый ғына, ыуыҙ мәле инде. Ҡоштар - һайрап, бала-саға уйнап туймай торған саҡ.**

Йылы яҡтарҙан ҡайтыр ҡоштарҙың иң һуңғылары тап ошо айҙа ҡайтып оя ҡора башлай. Ана, әҙер ояһына һоҡланып, сыйырсыҡ һыҙғыра, кәкүк тә оҙаҡ инәлтеп тормаҫ. Ә һандуғас һуң, һандуғас! Йылы яҡтарҙан меңәр саҡрымдар осоп үтеп, тыуған еренә ҡайтып етә был кескәй генә, оло йөрәкле батыр ҡошсоҡтар. Ай урталарына ни бары 25 грамлыҡ күҙгә күренмәҫ ошо йән эйәһе үҙенең бер ниндәй музыка ҡоралы ла, бер ниндәй оҫта йырсы ла ҡабатлай алмаҫ тылсымлы моңо менән бар тәбиғәтте әсир итер. Был ата һандуғас, эйе, тап ул йомортҡа баҫырға ултырған инә һандуғасты һаҡлай, ем ташып ашата һәм уға көнө-төнө һайрап ҡына тора икән дә! Ҡошсоҡтары моронлап башлағас, һайрауҙан туҡтай ҙа инәһе менән бергәләп балаларын ашата, осорға һәм һайрарға өйрәтә башлайҙар... Әҙәм фиғелдәренә оҡшап та, оҡшамай ҙа китә был ҡоштар әҙәбе. Ә шулай ҙа уларҙа илаһилыҡ көсләрәктер - Аллаһҡа туҡтауһыҙ тәсбих әйтеүсе тип юҡҡа ғына танылмаған бит һандуғас...

Ҡояш та нурҙарын йәлләмәй: ҡыш буйы ҡалын ҡар юрғаны, боҙ аҫтында ятҡан ерҙе имшетеп, йылытырға керешә. Майҙың тәүге ун көнлөгөнән һуң һауа температураһы 10-15 градус йылылыҡтан тағы ла юғарыраҡ үрләй башлай. Ә бына 1954, 1955, 1967, 1966, 1966, 1972 йылдарҙың майында һауа температураһы хатта ки 33-35 градусҡа тиклем эҫелекте тәшкил иткән! Ә шулай ҙа халыҡ күҙәтеүҙәре буйынса май айының уртаса йылылыҡта килеүе, хатта көндәрҙең һалҡынса тороуы хуплана, сөнки бындай шарттарҙа ҡоротҡостар үрсей алмаясаҡ; ерҙә дым да яҡшыраҡ һаҡлана.

Был айҙың көндәр тиҫбеһен барлағанда, уның изге һәм иҫтәлекле мәлдәргә, байрамдарға бай булыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы - Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө (**1**) менән бәйле, илдә майҙың тәүге биш көнө ял көндәре тип иғлан ителде. Шул уҡ ваҡытта яңы йыл каникулдарын да, май байрамдарын да күпһенеүсе ҡайһы берәүҙәрҙең ризаһыҙлығына ҡарата, яҙ - кеше организмының витаминдарға ҡытлыҡ кисереп, хәлһеҙләнгән мәлендә бик тә урынлы сара, тип әйтке килә. Ул көндәр һаулыҡты нығытыу сараһы булараҡ, саф һауала йәйәү йөрөү, поход, экскурсияға сығыу йә булмаһа баҡсаға барып, ер ҡаҙғандан һуң тирләп-бешеп мунса инеү кеүек файҙалы эштәр менән үткәрелһә, әлбиттә, тип өҫтәргә лә кәрәктер. Сәләмәт тормош рәүеше менән йәшәгән кешеләр өсөн оҙайлы байрамдар мул итеп ашап-эсеү түгел инде күптән, бәхеткә күрә. Май байрамдары тап халыҡтың баҡса хәстәрлектәре менән шөғөлләнеүен күҙҙә тотоп бирелде лә хөкүмәт тарафынан. Ә кем баҡсасы ла, спортсы ла, сәйәхәтсе лә түгел - үҙенә үпкәләһен... Бик булмаһа, ял көндәрен генә түгел, ә тотош айҙы рухи һәм физик сәләмәтлек хаҡына үткәреү өсөн тағы бер мөмкинлек бирә Хаҡ Тәғәлә. Изге рамаҙан айы тыуып (**6**), күптән көткән ураҙа башлана бит, йәмәғәт. Тыйылғандан тыйылып, изгелектәр генә ҡылып, тап ошо ай әсендә икеләтә, өсләтә сауапәжерҙәргә лайыҡ булырға ашығайыҡсы, туғандар!



Совет халҡының фашистик Германия илбасарҙарын ояһында дөмөктөрөүгә һәм Бөйөк Еңеүгә 74 йыл тулыуҙы билдәләүебеҙ (**9**) кешелек хәтерендә мәңге һаҡланасаҡ ҙур, изге байрамдарыбыҙҙың да байрамы. Ошо Еңеү булмаһа... Арьяғын күҙаллау ҙа, фаразлау ҙа ҡурҡыныс. Был көндө лә, хәҙер ил буйынса ғына түгел, донъя тарафтарында ла изге йолаға әүерелгән "Үлемһеҙ полк" ташҡыны ағылыр үҙәк урамдарыбыҙҙан. Дәһшәтле яу көндәре беҙҙән алыҫлаша барған һайын, ошо һуғышта ғүмере ҡыйылған яҡындарыбыҙҙың, бөтөнләй беҙгә таныш булмаған, беҙ уларҙы бер ваҡытта ла күрмәгән ябай һалдаттар, уларҙың фотоһүрәттәрендәге образдары күңелебеҙгә яҡыная бара.

Еңеү байрамы осоронда ла беҙҙә оҙайлы ялдар көтә (**9-12**), кемдәр дача ерҙәрен ҡаҙып, йомшартып өлгөргән, был ялдарҙа сөгөлдөр, кишер, шалҡан сәсер, алмағас олондарын аҡлар, сәскәләр, емешеләк ағастары ултыртыр. Әмәлгә ҡалғандай, тап ошо ял көндәре сиктәрендә ағас ултыртыу көнө лә (**11**) билдәләнә икән. Ниһайәт, байрамдарҙан арынып, эшкә лә тотонорбоҙ.

Ә үҙ эштәрен яратып, күңел биреп башҡарыусы һөнәр эйәләре байтаҡ беҙҙә. Шуларҙың ҡайһылары тап ошо айҙа һөнәри байрамдарын билдәләй: Бөтөн донъя иркеле матбуғат (**3**), Халыҡ-ара акушер (**5**), Радио һәм элемтә тармаҡтары хеҙмәткәрҙәре (**7**), Халыҡ-ара шәфҡәт туташтары (**12**), Биографтар (**16**), Бөтөн донъя музейҙар (**18**), Кадрҙар булеге хеҙмәткәрҙәре (**24**), Филологтар (**25**), Рәсәй эшҡыуарҙары, шул уҡ көндө Химиктар (**26**), Дөйөм Рәсәй китапханалар (**27**), Сик буйы һаҡсылары (**28**), Рәсәй адвокаттары (**29**), Иретеп йәбештереүсе (**31**) көндәре.

Майҙың һуңғы көнө, ғәҙәттә, Бөтөн донъя тәмәкеһеҙ көн тип иғлан ителә, ләкин алама ғәҙәткә дусар булыусылар был йоланы бар тип тә белмәй. Шулай ҙа иманы булған быйыл бер аҙ тыйылыр, сөнки майҙың 31-е иң изге, оло көндәрҙең береһе - Ҡәҙер кисе. Аллаһы Тәғәлә тарафынан үҙенең хаҡ илсеһе аша бәндәләргә иман асҡыстарын, Аллаһтың ерҙәге урынбаҫары булып йәшәү юлын аңлатып биргән Ҡөрьән аяттары - бойороуҙар һәм тыйыуҙар индерелә башлаған төн. Ҡәҙер, йәки Тәҡдир кисе, мең айҙан хәйерлерәк, тиелә аятта. Оҙон ғүмергә тиң был кистә һәр кемдең тормош-көнкүреш шарттарында булырға тейешле үҙгәрештәр, ғүмер оҙайлығы, тыуаһы һәм үләһе кешеләр, бер һүҙ менән әйткәндә, яҙмыштар билдәләнеп ҡуйыла. Шуға ла изге Ҡөрьән индерелә башлаған, яҙмыштар хәл ителә торған был кисте һәр төндө мосолман ғибәҙәттә тороп, изге теләктәр теләп, уяу килеш үткәрергә күнеккән. Был айҙа ғына түгел, алдағы көндәрҙә лә иманлы булып йәшәйек, мосолман ҡәрҙәштәр. Үҙебеҙ тырышлыҡ күрһәтһәк, Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәт-ярҙамдарынан ташламаҫ, иншалла.

**Һабанайҙа тыуғандар:**

**12** - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, ЮНЕСКО эштәре буйынса БР Комитетының башҡарыусы директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Өлфәт Йомағужинға - 70 йәш** (1949).

**15** - билдәле тарихсы, профессор, БР Фән һәм техника өлкәһендә дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Әнүәр Әсфәндийәровтың** тыуыуына **- 85 йыл** (1934-2014).

**18** - прозаик, журналист, йәмәғәт эшмәкәре, 1988-1995 йылдарҙа БР Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты **Динис Бүләковтың** тыуыуына **- 75 йыл** (1944-1995).

**20** - дәүләт эшмәкәре, БР Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - БР Хөкүмәте аппараты етәксеһе вазифаһын башҡарыусы, иҡтисад фәндәре докторы **Илшат Тажетдиновҡа - 50 йәш** (1969).

**23** - тел белгесе, педагогика фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Әхмәр Аҙнабаевҡа - 85 йәш** (1934).

**27** - М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры, йырсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Венер Камаловҡа - 50 йәш** (1969).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ "Терра Башҡортостан" ат-спорт турнирының икенсе этабы 27 апрелдә "Аҡбуҙат" ипподромында уҙҙы. Башҡортостандың 100 йыллығына арналған сарала Балаҡатай, Иглин, Илеш һәм Учалы райондары һыбайлылары ярышты. Иң оҫта һыбайлы - Илеш районынан Роберт Хафизов булды. Турнирҙа башҡорт тоҡомло аттар ғына ҡатнаша. Финал ярыштары Республика көнөндә - 2019 йылдың 11 октябрендә уҙа.

✔ 12 июндә "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале барышында "Бөтәбеҙ бергә - Рәсәй!" тигән ҙур байрам ойошторола. Был көндә өфөләр Надежда Бабкинаның "Рәсәй йырҙары" Бөтә Рәсәй фестиваль-марафонында ҡатнаша. Ҙур проект сиктәрендә Милли кейем байрамы һәм "Этнотөн" (12 июнь), "Симфоник төн" (13 июнь), Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына бағышланған "Алға Башҡортостан!" байрам концерты (14 июнь) һәм гала-концерт (15 июнь) була.

✔ Сочиҙағы Рәсәй инвестиция форумында Башҡортостан Хөкүмәте менән "МедИнвестГрупп" компаниялар төркөмө араһында ҡул ҡуйылған килешеүгә ярашлы, 2020 йылда Стәрлетамаҡта ядро медицинаһы үҙәге асылырға тейеш. Инвестор республиканың онкология хеҙмәте үҫешенә 1 миллиард һум һала. Проект Стәрлетамаҡ дауаханаһы биләмәһендә онкология ауырыуҙарын диагностикалау һәм дауалау үҙәген булдырыуҙы күҙ уңында тота.

✔ 27 апрелдә Башҡортостан биләмәһендә һыу ҡоштарына һәм ҡарағай урманы кейектәренә яҙғы һунар башланды. Яҙғы һунар осоронда инә өйрәктәргә, һуйырҙарға, ҡорҙарға; ярҙан 200 метрҙан кәмерәк алыҫлыҡтан тороп ҡаҙҙарға; һунар эттәре, ҡоштары менән; селдәргә, таҙбаштарға, ҡамыш турғайҙарына, һоро ҡаҙҙарға һунар рөхсәт ителмәй. Һунар итеү ҡағиҙәләрен боҙған өсөн граждандарға - 500 һумдан алып 4000 һумға тиклем, вазифалы кешеләргә 20 меңдән 35 мең һумға тиклем штраф һалыу ҡарала. Төбәктә яҙғы һунар 6 майҙа тамамлана.

✔ Башҡортостан электрон эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙҙары индереү йәһәтенән Рәсәй төбәктәре араһында етенсе урынды алды. Бөгөн республикала ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ осрағына һәм әсәлек менән бәйле мотлаҡ социаль страховкалау буйынса сығымы булған эш биреүселәрҙән 45 проценты электрон эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙҙары менән эшләй. Шуны билдәләп үтәйек: Башҡортостандың Социаль страховкалау фонды 2020 йылда тулыһынса электрон системаға күсергә ниәтләй.

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Халыҡҡа аптырауҙан бушамайым: йә уларға транспорт һалымын арттыралар, бензинға хаҡтар ҙа әсетке һалғандай ҡабара, автомобилдәргә лә хаҡтар көнләп түгел, сәғәтләп үҫә. Ә юлдарҙың сифатһыҙлығы, йәғни йырындар, соҡорҙар арҡаһында юл-транспорт ваҡиғаларында үлем күрһәткестәре иң юғарыларҙың береһе. Был осраҡта халыҡҡа автомобилдәрҙән баш тартыу яҡшыраҡ булыр ине. Әммә ул һүгенә-һүгенә "тығын"ҙарҙа ултырһа ла, гаишниктарға зарланһа ла, төтөн һулаһа ла, автомобилдән баш тартмай.**

# УҢЫШҺЫҘ БУЛҒЫ КИЛМӘЙ...

Күптән түгел генә маршрут автобусында ирекһеҙҙән ике йәш егеттең әңгәмәһе ҡолаҡҡа сылынды. "Касан, ниһайәт, машина һатып алам инде, исмаһам, автобустарҙа тығылып йөрөмәҫ инем", - ти береһе. Икенсеһе унан көлдө: "Маршрут автобустары - уңышһыҙҙар өсөн. Беҙ һинең менән уңышһыҙҙар, дуҫ, уңышһыҙҙар..." "Эшкә урынлашыу менән мин барыбер кредитка машина алам", - тине беренсеһе көр тауыш менән.

Салондағылар уға ихтирам менән ҡарап ҡуйҙы. Сөнки бындағы һәр пассажир үҙенең шәхси автомобиле турһында хыяллана икәне бәхәсһеҙ бит инде. Хатта студенттар ҙа төшөндә үҙҙәрен сит ил машинаһында күрә...

Бер көн килеп Рәсәй банктары үҙҙәренең ставкаһын 3-4 процентҡа тиклем түбәнәйтһә, ә аныҡ эш хаҡы 43 меңгә етһә, студент автобусҡа тығылмайынса, үҙенең иркен автомобиленә сығып ултырасаҡ һәм ҡала үҙәгендәге уҡыу йортона лекцияларға елдерәсәк, ә уҡыу йорто тирәләй бер нисә мең машина йыйылып китәсәк... Газондарға, аллеяларға (хәйер, уларҙы киңәйтелгән юлдар "йотто" инде), велосипед юлдарына һәм йәйәүлеләргә көн бөтә инде! Был автохәрәкәтте туктатырлыҡ түгел. Әле үк тәҙрәнән ҡарайым да, газонда парковкаланған машиналарҙы күрәм. Күрше йорт тирәһендә хәлдәр хәтәрерәк: автомобиль хужалары ергә ҡомташ түшәп, уны тимерсыбыҡ менән урап алып, ауыр йоҙаҡтар менән бикләп ҡуйған, күрәһең, газонды шәхси милек итеп иғлан иткәндәр... Һәр хәлдә, хужалар үҙҙәре ҡайтмайынса, уға сит-яттар инә алмай. Улым уҡыған мәктәп эргәһендә машиналарҙың йәшерен митингыһы, тиерһең. Әлбиттә, унда уҡытыусыларҙың машиналары юҡ. Уның ҡарауы, эргәлә генә республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы, Совет районының Пенсия фонды, тағы ла нинидәйҙер дәүләт учреждениелары. Бина эргәһендәге асфальтланған өс парковка ғына етмәй уларға - туп-тулылар. Ә был мәктәпкә бара торған берҙән-бер йүнле юл. Һәр көн иртән беҙҙең квест башлана - трамвай тукталышынан машиналар лабиринты аша мәктәп тыҡырығына тиклем барып етергә, һуңынан машина тәгәрмәстәре иҙгән бысраҡ аша үтергә.

Мин зарланмайым, сөнки файҙаһыҙ икәнен беләм. Өфөнөң шул тиклем машинаны һыйҙырыу һәм уларға етерлек парковкалар эшләү мөмкинлеге юҡ. Башҡа ҡалаларҙың да. Шуға, европалыларҙан өлгө алырға ҡала: унда күптән инде ҡала буйлап велосипедтарҙа йөрөйҙәр. Хатта Дания принцессаһы ла, хатта ҡышын да.

Бары тик беҙ, өфөләр, һуңғы һулышҡаса бирешмәйбеҙ. Ни өсөн икәне аңлашыла. Берәү ҙә үҙен ПАЗ-икта китеп барыусы уңышһыҙ кеше итеп күрергә теләмәй...

**Олеся ҒҮМӘРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТАҘАЛЫҠ ӨСӨН...

**Ҡалаларыбыҙ таҙа булырға тейеш, уларҙы сүп-сарҙан һәм иҫке-моҫҡонан арындырырға кәрәк, туҙан булмаһын, был - муниципалитеттар һәм коммуналь хеҙмәттәр алдында торған бурыстарҙың береһе. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Йорт идарасыһы" республика форумында ошо турала һөйләне.**




Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарын, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәрен, күп фатирлы йорт советтары етәкселәрен халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға һәм республикала йәшәүселәрҙе сүп-сарҙы айырым йыйыуға өйрәтә башларға саҡырҙы. Республиканың ҡайһы бер ҡалаларында ПЭТ-тара, ҡағыҙ йыйыуҙың ыңғай миҫалдары бар. Форумда ҡатнашыусылар Башҡортостан етәксеһенән Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығына йорт яны биләмәһен межалау һәм кадастр иҫәбенә ҡуйыу, артабан уларҙы "Башҡортостан ихаталары" программаһы сиктәрендә йәшәүселәрҙең милкенә тапшырыу мәсьәләһен ҡарарға тигән йөкләмә биреүен һораны. Радий Хәбиров был тәҡдимде хуплауын белдерҙе. Республика етәксеһенә күп фатирлы йорттарҙың техник документацияһы депозитарийын булдырыу тәҡдиме лә ҡыҙыҡлы тойолдо. Ул шулай уҡ профилле министрлыҡҡа йорт идарасылары өсөн курстар үткәреү мөмкинлеген ҡарарға ҡушты."Йорт идарасыһы" республика форумында ҡатнашыусыларҙа идара итеүсе компанияларҙың ресурстарҙы һаҡлаусы предприятиелар алдындағы бурысы етди борсолоу тыуҙыра. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, идара итеүсе компанияларҙың бурысы республика үҫешен тотҡарлай. Шул арҡала ҙур монополиялар инвестиция программаларын туктата башлай. Башҡортостанда халыҡтан түләүҙәр йыйыу бик юғары кимәлдә, ләкин был аҡса йылылыҡ, ут, һыу менән тәьмин итеүселәргә тулы күләмдә барып етмәй. "Йыш ҡына берҙән-бер мөмкин булған механизм - административ тәьсир, мәжбүр итеү, шул иҫәптән мутлыҡ фактары буйынса енәйәт эштәре ҡуҙғатыу", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостан етәксеһе "Йорт идарасыһы" форумында яңғыраған бөтә тәҡдимдәрҙең ентекле тикшереләсәген билдәләне.

# ТАБИПТАР - АУЫЛҒА!

**Башҡортостанда 2019 йылдан дәүләт медицина ойошмаларына эшкә килгән табиптарға дәүләт ярҙамы күрһәтеү тәртибе һәм шарттары раҫланды.**

Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы юғары квалификациялы кадрҙарға ихтыяж тураһында ғаризалар нигеҙендә медицина хеҙмәткәрҙәренең вакантлы вазифалары реестрын төҙөй. Ошо урындарҙы биләгән осраҡта, бер тапҡыр аҡсалата компенсация түләнә. Түләүҙең суммаһы - бер миллион һум. Табип ошо медицина учреждениеһында кәмендә биш йыл эшләргә тейеш. Башҡортостанда табиптарға ҡытлыҡ 1150 кеше тәшкил итә. Йәш белгестәрҙе ауыл дауаханаларына йәлеп итеү өсөн уларға хеҙмәт хаҡын арттыралар, өҫтәмә түләүҙәр индерәләр, торлаҡ бирәләр. Башҡортостанда медицинала кадрҙар мәсьәләһен хәл итеү өсөн "Ауыл табибы" программаһы ла эшләй. Быйыл "Ауыл табибы" программаһы сиктәрендә 99 табип һәм 10 фельдшер ауыл еренә эшкә ҡайта. Фельдшер-акушерлыҡ пункттарына килгән 55 фельдшерға "Ауыл табибы" программаһы буйынса бер тапҡыр пособие түләнә.

# ШӘМБЕ ЯЛЫН...

**Башҡортостан Хөкүмәтендәге "Мәғариф сәғәте"ндә Мәғариф министрлығы республикала биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күскән мәктәптәр өсөн тематик шәмбеләр уҙғарыу проекты менән таныштырҙы.**

Республика мәктәптәренең 60 проценты яңы форматҡа күсте. Ҡалғандары яңы уҡыу йылы башынан биш көнлөк индерә. Шуның менән бергә һәр мәғариф учреждениеһы айҙың бер шәмбеһендә уҡыусылар менән ҡыҙыҡлы саралар уҙғарырға тейеш тигән ҡарар ҡабул ителде.

Мәғариф министрлығы ошондай тематик шәмбеләрҙе ойоштороу өсөн яҡынса темалар исемлеген төҙөгән. Әйтәйек, сентябрҙә - спорт шәмбе, октябрҙә - этношәмбе, ноябрҙә һөнәри йүнәлештәге шәмбе үткәрергә тәҡдим ителә. Шулай уҡ хәүефһеҙ, экологик, патриотик, сәләмәтлек, мәҙәни, туристик, һаңлы, һаҡсыл, ижади, хәйриә, бейеү, толерантлыҡ, ирекмәнлек шәмбеләре ҡаралған. Республиканың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, мәктәптәр тәҡдим ителгән темаларҙың ошағанын һайлап алырға мөмкин, ләкин ҡайһы берҙәре мотлаҡ буласаҡ. Радий Хәбиров билдәләүенсә, мәктәптәрҙә тематик шәмбеләр моделен бик яҡшы итеп уйларға кәрәк. Республика етәксеһе бер айҙан мәктәптәрҙә сараларҙың нисек уҙыу тураһында мәғлүмәт бирергә ҡушты.

# ЭШ УРЫНДАРЫМЫ?

**Башҡортостанда импортты алмаштырыусы производстволар асыу ҡуҙғаллана. Проекттар Хөкүмәттәге "Инвестиция сәғәте"ндә тикшерелде.**

Мәҫәлән, "Славрос" йәмғите Благовещенда геотекстиль сығарыу буйынса инновациялы производство асырға йыйына. Компания етәксеһе Александр Фадеев билдәләүенсә, әле Рәсәй был продукцияны сит илдәрҙән һатып ала. Яңы производствоға 750 миллион һумға яҡын инвестиция талап ителә, 150 эш урыны барлыҡҡа килә. Импортты алмаштырыу өлкәһендәге тағы бер инвестиция проекты Стәрлетамаҡ районының Оло Ҡуғанаҡ ауылында тормошҡа ашырыла. Был - күп ҡатлы асептик төрөү материалы сығарыу буйынса завод. Май-июнь айҙарында унда ҡорамалды монтажлау башлана. Инвестицияларҙың дөйөм күләме 1,8 миллиард һум тәшкил итә, 110 эш урыны булдырыла. Шулай итеп, Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып һөт һәм шыйыҡ аҙыҡтар өсөн төрөү материалдары сығара башлаясаҡтар.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин рәйеслегендә сираттағы "Инвестсәғәт" үтте. Сарала дүрт проект ҡаралды. Уларҙың һәр береһе буйынса фекер алышып, тәҡдимдәр индерелгәс, Өлфәт Мансур улы хакимиәттең яуаплы подразделениеларына республиканың башҡарма власть органдары һәм проект авторҙары менән берлектә уларҙы тормошҡа ашырыу мәсьәләләрен хәл итергә ҡушты.

✓ Өфө мәктәптәренең береһендә мәктәп һауыт-һабаһы һәм аҙыҡ-түлек блогы хеҙмәткәрҙәренең махсус кейеме бренды күрһәтелде. Сара сиктәрендә ата-әсәләр, мәктәптәр етәкселәре һәм башҡа ҡунаҡтар әҙерләнгән ризыҡтан ауыҙ итте, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар алды, тукланыуҙы ойоштороу һәм рацион буйынса теләктәрен еткерҙе.

✓ Битараф булмаған өфөләр хөкүмәттең сүп-сар йыйыу буйынса унайлы инфраструктура булдырыуын көтмәйенсә, үҙҙәре хәлде үҙгәртергә ҡарар иткән. Инициатив төркөмдәр ҡала халҡынан айырым йыйылған сүп-сарҙы ҡабул итеп, уны икенсел эшкәртеүгә алып бара. "Башинформ" агентлығы Өфөлә сүп-сарҙы, кәрәкмәгән көнкүреш техникаһын һәм кейем-һалымды утилләштереүгә һәм икенсел эшкәртеүгә тапшырыу урындары тураһында мәғлүмәт әҙерләне.

✓ 3-19 июлдә Өфөлә "Республика даны өсөн!" фестиваль-конкурсының муниципаль этабы үтә. Ҡала хакимиәте һәм хакимиәттең Мәғариф идаралығы ойошторған был бәйгенең маҡсаты - власть органдарын һәм ойошмаларҙы, һөнәри төркөмдәрҙе һәм корпорацияларҙы, педагогик, ата-әсәләр йәмғиәттәрен, ғаиләләрҙе һәм граждандарҙы рухи-әхлаҡи үҫтереү һәм граждандыҡ-патриотик тәрбиә биреү, хеҙмәт һәм һөнәри эшмәкәрлеккә берләштереү тора.

✓ Өфөлә Башҡортостандың халыҡ артисы Әхәт Мортазин исемендәге кубокка волейбол турниры бара. Турнир Башҡортостан радиоһының дикторына арналған. Ярышта алты команда ҡатнаша. "Иҫән сағында Әхәт Мортазин "Юлдаш" радиоһының йыл һайын үткәрелгән волейбол кубогында ҡатнаша торғайны. Хәҙер турнир уның исемен йөрөтә, ә уның улы Салауат беҙҙең командала уйнай", - тип һөйләне "Юлдаш" радиоһының йыйылма командаһы капитаны Йәмил Ишмөхәмәтов.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 74 йыллығын билдәләү темаһы төп урында торҙо. Уны үткәреү концепцияһы менән ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова таныштырҙы.**

# ЕҢЕҮСЕ МАЙ!

Әлеге ваҡытта Өфөлә 8994 ветеран йәшәй. Уларҙың 448-е - Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды һәм ҡатнашыусыһы, 69 кеше "Блокадалы Ленинградты йәшәүсе" билдәһе менән наградланған, 62 кеше - концлагерҙарҙың балиғ булмаған тотҡоно, 2946-һы - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың тол ҡатыны. Алина Наил ҡыҙы белдереүенсә, муниципалитетта был категорияға ҡараусыларҙың көнкүрешен яҡшыртыу буйынса маҡсатлы эш алып барыла, социаль ярҙам күрһәтелә. Торлаҡҡа, коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәр ай һайын компенсациялана, сәләмәтлеккә зыян күләме ҡайтарыла, яраланыусыларҙың клиник күрһәткестәре буйынса пенсияларына өҫтәмәр бирелә. Һуғышта ҡатнашҡан ҡатын-ҡыҙҙарға өҫтәмәләр, хәрби йәрәхәттәр алыусыларға компенсация түләнә.

"Еңеү көнө илебеҙҙең һәр кешеһе өсөн ҡәҙерле байрам. Был көндө беҙ ҡаһарман яугирҙар һәм фиҙакәр хеҙмәте менән фронтҡа ярҙам иткән тыл хеҙмәткәрҙәрен иҫкә алыу саралары үткәрәбеҙ. Мәктәптәрҙә ветерандар, тыл хеҙмәткәрҙәре, Рәсәй Геройҙары ҡатнашлығында Ҡаһарманлыҡ дәрестәре, ҡаланың иҫтәлекле урындары буйлап экскурсиялар, класс сәғәттәре, асыҡ дәрестәр, конкурстар, кластан тыш саралар уҙғарыла. Төрлө фәнни-ғәмәли конференциялар, конкурс-фестивалдәр, балалар баҡсаларында һәм белем усаҡтарында тематик саралар үткәреү традицияға әүерелде. Илебеҙҙең йәш патриоттарын бергә туплаған "Иҫләйем. Ғорурланам" тип аталған Бөйөк Ватан һуғышы тарихына арналған олимпиада ла йыл һайын үткәрелә. Ғөмүмән, был көндәрҙә барлыҡ мәғариф, мәҙәниәт, сәнғәт учреждениеларында илебеҙҙең шанлы ла, данлы ла тарихына бағышланған төрлө саралар ойошторола", - тине Алина Сөләймәнова.

Ә инде күп халыҡты йыйған төп саралар 6 майҙа, киске сәғәт етелә Ҡала мәҙәниәт һарайында тантаналы концерттан башланасаҡ. 8 майҙа 4-се яртыла Ҡала мәҙәниәт-ял үҙәгендә консультация саралары, фотокүргәҙмә, инвалидтар, һуғыш ветерандары, тыл хеҙмәткәрҙәре өсөн концерт ойоштороласаҡ. Шул уҡ көндө "Башҡортостан" Дәүләт концерт залында республика кимәлендәге тантана уҙғарыласаҡ, унда Өфөнөң 350 ветераны ҡатнашасаҡ.

Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов белдереүенсә, 8 майҙа Рус драма театры алдындағы майҙанда көндөҙгө сәғәт икенән Вадим Задорожныйҙың хәрби техника музейындағы - хәрби, шулай уҡ бөгөн Рәсәй Армияһында булған заманса техника менән бер рәттән, Бөйөк Ватан һуғышы йылдары техникаһы, Артур Насировтың шәхси коллекцияһындағы ретро-автомобилдәр күргәҙмәһе эшләйәск. Ул 9 майҙа ла эшен дауам итәсәк. Шул уҡ ваҡытта Еңеү паркында "Ретро-Гаражъ ПСК-6" музейындағы техника күрһәтеләсәк.

9 майҙа байрам саралары иртәнге 10-да, Өфө территориаль гарнизоны хәрби частары хәрбиҙәренең, көс структуралары хеҙмәткәрҙәренең, курсанттарҙың, кадеттарҙың һәм хәрби техника колонналарының парады менән башланасаҡ. Ҡала Советы алдындағы трибуналарҙа төп ҡунаҡтар - Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм тыл хеҙмәткәрҙәре буласаҡ. Сараға 100 кеше саҡырылған һәм уларҙы оҙатып йөрөтөүселәр билдәләнгән. Хәрби парадҡа 18 "парад ҡумтаһы", шулай уҡ Ишембай ҡалаһының кадет корпусының барабансылар взводы, байраҡ йөрөтөүселәр, һаҡ взводы, Өфө мәктәп-интернаты кадеттары иҫәбенән линияларҙа тороусылар - барлығы 1300-ҙән ашыу кеше йәлеп ителәсәк. 11 тула 20 минуттан 11-гә тиклем Вадим Задорожныйҙың хәрби техника музейы "эскпонаттары" парады үтәсәк. Һуңынан хәрби техника дислокация урынына ҡайтасаҡ. Рус драма театры майҙанында ике ялан кухняһы эшләйәсәк.

Сәғәт 11-ҙән 12-се 10 минут араһында дөйөм республика "Тынлыҡ минуты" иғлан ителәсәк. Һуңынан сәғәт беренсе яртыға тиклем Октябрь проспектынан Галле исемендәге урамдан Шота Руставели урамына тиклем "Үлемһеҙ полк" үтәсәк. Артабан төнгө 10-ға тиклем В. И. Ленин исемендәге майҙанда мәҙәниәт учреждениеларының, йәштәрҙең, "ҠурайТВ" телеканалының концерттары буласаҡ, ҡаланың һәм республиканың үҙешмәкәр һәм профессиональ ижади коллективтары сығыш яһаясаҡ. Тантаналарҙы ошо уҡ майҙанда сәғәт 10-да күкте йәйғор төҫтәренә мансыған фейерверк тамамлаясаҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

## ӨМӘЛӘР, АКЦИЯЛАР...



**27 апрелдә республика буйынса шәмбе өмәләре, "Йәшел Башҡортостан" экологик акциялары үтте.**

Баш ҡала биләмәһен таҙартыу өмәһендә 106 мең кеше ҡатнашты. 874 берәмек техника йәлеп ителде, 3 661 куб метр майҙандан сүпсар сығарылды. Өмә саралары сиктәрендә "Йәшел Башҡортостан" экологик акцияһы ла үтте. Баш ҡала райондары биләмәһендә 2573 төп ағас һәм 221 төп ҡыуаҡлыҡ ултыртылды. Акцияға Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин да ҡушылды. Был көндө Киров урамындағы 91-се йортта йәшәүселәр йорт ихатаһы территорияһында "Карап" аллеяһын булдырҙы һәм унда 35 ылыҫ ағасы ултыртты. Ленин районында Ҡамышлы урамында "Чемпиондар аллеяһы" булдырылды. Был атама социаль селтәрҙәрҙә тауыш биреү юлы менән һайланған. Бында 89 ылыҫ үҫентеһе ултыртылды. Шулай уҡ Орджоникидзе районының 116-сы мәктәп территорияһында "Советтар Союзы Геройы Бикеев Солтан Хәмит улы исемендәге Дан аллеяһына" нигеҙ һалынды.

Шулай итеп, баш ҡала йәйгелеккә әҙерләнә. Әле "Горзеленхоз" МУП-ының инженер хеҙмәте 20 фонтандағы механик зыянды тикшерә, йыуыу, буяу, көйләү, сантехник ҡорамалдарҙы һүҙыу һ.б. техник эштәр менән шөғөлләнә. "Уфагорсвет" МУЭСП-һы хеҙмәткәрҙәре иһә яҙ башланыу менән ҡаланы рөхсәтһеҙ йәбештерелгән реклама иғландарынан таҙарта башланы. Таҙартылған бағаналар, үкенескә күрә, тиҙ арала тағы ла иғландар менән сыбарланыуға ҡарамаҫтан, ойошма хеҙмәткәрҙәре был эште артабан да дауам итергә ниәтләй. Ә инде тәртипһеҙ граждандар асыҡланғанда, уларға - 500-1000, ойошмаларға 10000-15000 һум күләмендә административ штраф ҡаралған.

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

## ТӨНЬЯҠ КОРЕЯ БАШЛЫҒЫ...

### Рәсәйҙә нимә эҙләне?

**Рәсәйгә беренсе тапҡыр Төньяҡ Корея (КНДР) башлығы Ким Чен Ындың килеүе бөтә донъя мәғлүмәт сығанаҡтары тәүге биттәрендә биргән яңылыҡҡа әйләнде. Үҙенең йәҙрә программаһы менән күп илдәрҙең һәм беренсе сиратта Американың, йәнен үртәгән Төньяҡ Кореяға күптән баҫым бара. Унан был программаһын сикләүҙе талап итеп, әленән-әле сығыштар яңғырай. Ошоға ҡағылышлы яңы һөйләшеүҙәр алдынан Ким Чен Ындың Рәсәйгә килеп ҡайтыуы төрлөсә ҡабул ителде.**

Үҙенең был килеүе менән ул Америкаға һәм башҡа илдәргә донъя аренаһында яңғыҙы һәм дипломатик изоляцияла булмауын күрһәтергә теләнеме, әллә Владимир Путиндан яҡлау эҙләнеме, ысынлап та, бер аҙ аңлашылмай.

Рәсәй менән Төньяҡ Корея араһындағы тауар әйләнеше электән ҙур күләмдә булманы, ә Рәсәйҙең Корея халыҡ демократик республикаһына (КХДР) ҡаршы халыҡ-ара санкцияларға ҡушылыуы был һанды тағы ла әҙәйтте. Шулай уҡ ил араһында уртаҡ проекттар ҙа юҡ. Совет ваҡытынан алып эшләп килгән һәм Төньяҡ Кореянан Рәсәйгә килеп эшләү мөмкинлеге биргән программа ла, Берҙәм милләттәр ойошмаһы (ООН) баҫымы аҫтында, оҙаҡламай туҡтаясаҡ. КХДР эшселәре ағымдағы йылдың аҙағына тиклем Рәсәй биләмәһенән сығырға тейеш. Был ваҡытты оҙайтыу, тимәк, БМО-ға ҡаршы барыу тигәнде аңлата, ә Рәсәй быны эшләмәйәсәк.

Санкциялар индереү бер илгә лә файҙаға түгел, сөнки был уға төрлө өлкәләге хеҙмәттәшлеккә юл яба. Ә Рәсәйҙең Берләшкән милләттәр ойошмаһындағы Хәүефһеҙлек советында тыйыу хоҡуғына эйә булыуы, үҙенең режимына ҡаршы ағымдағы санкциялар тулҡынына юлды ябыу мөмкинлеген дә күҙ уңында тотоп килгәндер, тип баһаларға була Ким Чен Ындың был аҙымын. Шулай уҡ Рәсәйҙең, бер нәмәгә ҡарамай, донъя кимәлендә тотҡан абруйы тураһында ла, һис шикһеҙ, хәтеренән сығармай һәм ул-был була ҡалһа, элекке замандарҙағы кеүек, Мәскәүҙең ярҙамына өмөт итеренә ышана икәнлеген дә күрһәтергә теләне, буғай, КХДР лидеры. Ләкин бында төп һорау - Кремль быларҙың бөтәһенә лә нисек ҡарай? Һәр хәлдә, Мәскәүҙе Ким Чен Ындың шәхси яҡлаусыһы һәм союздашы итеп ҡарау хата.

Төньяҡ Кореяның үтә лә йәшерен ил булыуы һәм үҙ биләмәһенә ниндәй ҙә булһа комиссияны индереүҙән баш тартыуы унын, ысынлап та, ҡеүәтле йәҙрә программаһы бармы, әллә бары тик ҡурҡытыу ғынамы икәнен аңларға мөмкинлек бирмәй. Шулай ҙа төрлө илдәрҙең сейсмик станциялары КХДР биләмәһендә ваҡыты-ваҡыты менән көслө ер аҫты һелкенеүҙәрен теркәй. Төньяҡ Корея етәкселеге лә, үҙ сиратында, уңышлы йәҙрә һынауҙары үткәреүе тураһында белдереп тора. Тимәк, шикләнергә урын бар.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Кукуруз бутҡаһы

❖ Был бутҡа буй-һындың зифа булыуына ярҙам итә, сөнки уның туҡлыҡлылығы башҡа бутҡаларҙан түбән, һимертмәй.

❖ Кукуруз бутҡаһы тәндә токсиндарҙан арындыра, эсәктәр эшмәкәрлеген, аш һеңдереүҙе, тиренең торошон яҡшырта.

❖ Был бутҡаның иң мөһим өҫтөнлөгө - уның ҡандағы холестерин кимәлен яйлауында, тимәк, йөрәк өйәнәге, башҡа ҡан һауыу ҡурҡынысы ла кәмей, тигән һүҙ.

❖ Бутҡаны бешереү, әлбиттә, еңел түгел, көймәһен өсөн гел болғап торорға кәрәк.

### Ашҡаҙан өсөн

❖ Ашҡаҙандың лайлалы тиресәһе ауыртҡанда бөтнөк, һары мәтрүшкә, юл япрағы, аҡ сәскәне тигеҙ күләмдә алып, болғатырға. 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыу өҫтәп, 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 мәртәбә ашарҙан 1 сәғәт ашҡа 1/4 стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

### Борсаҡ бутҡаһы

❖ Борсаҡ бутҡаһы йөрәк эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай. Магнийға бай булыу сәбәпле, күңелде күтәрә.

❖ В9 витамины тиренең төрлө ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлығын тәьмин итә.

❖ Борсаҡ бутҡаһы бөйөрҙәр эшмәкәрлеген яҡшырта, ашҡаҙан эшмәкәрлеген, ҡан баҫымын көйләй, аҙ ҡанлылыҡтан да ҡотҡара.

❖ Кальций тешкә файҙалы.

❖ Бутҡаға кишер һәм һуған өҫтәһәң, ул тағы ла файҙалыраҡ була.

❖ Буй-һынығыҙ матур булһын тиһәгеҙ, бутҡаға аҡ май йәки үҫемлек майы өҫтәргә онотмағыҙ.

### Йоҡо туйһын, тиһәң...

❖ Ағып торған һыу аҫтында аяҡтарҙы йыуырға кәрәк - көнө буйы йыйылған арыуҙан, мускулдарҙың ҡыҫылыуынан ҡотолаһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

**Шул уҡ ваҡытта, XX быуат башында уҡ сағыу балаҫтар ҙа һуғыла башлаған, күрәһең. Руденко Иҫән ауылында алты төҫкә буялған балаҫ тап итә. Төҫлө буйҙары бер тигеҙ генә итеп һуғылған балаҫта төҫтәр түбәндәгесә ҡулланылған: һары, ҡара, ҡыҙыл һары, йәшел, сейә төҫө, күк-шәмәхә.**

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

Буй балаҫ һуғыу сәнғәте бик оҙаҡ йәшәй. Йылдар үткән һайын, төҫтәре төрләнә бара. Күк, шәмәхә, йәшкелт, йәшел, һары ҡыҙыл төҫтәр ҡулланыла. Анилин буяуҙары биҙәккә яңы төҫтәр өҫтәй. XX быуаттың икенсе яртыһында һуғылған балаҫтар төрлө төҫлө булыуы менән айырылып тора. Хәҙер инде буялмаған иләнгән йөн тар буй булып үткәрелгән, ул биҙәктең ситтәрен билдәләүсе генә.



*Көньяк-көнсығыш балаҫтары. Экспедиция материалдары. Т. Сурина фотоһы.*

Ҡайһы бер техник алымдар буйлы һыҙаттарға төрлөлөк индергән. Тура буйҙар пунктирлы һәм тешләләре менән сираталаша. Тоташҡан урындарҙа теш биҙәктәр бер-береһенә индереп һуғылған, йәки баҫҡыс итеп һалынған. Улар йыш йәки һирәк (ҡылыстың 1 йәки 2 буйы аша сираталау), киңлеге һәм оҙонлоғо буйынса ла төрлө. Төҫлө буйҙарҙың киңлеге лә үҙгәргән. Төҫтәрҙе ҡулланыуҙа һәр оҫтабикәнең үҙенә генә хас ритмы барлыҡҡа килгән, төҫтәрҙе лә һәр кем үҙенсә зауыҡ менән һайлаған.



*Тәбиғи төҫтәге йөндән һуғылған балаҫ. Белорет районы. Т. Сурина фотоһы. 1976 й.*

XX быуаттың 70-80-се йылдарында күпләп экспедициялар үткәреү ҙур этнографик материал тупларға ярҙам итте. Ғилми архивтарҙа Белорет, Бөрйән (1976), Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр, Хәйбулла (1970, 1971, 1981, 1982, 1983) райондарында төшөрөлгән фотолар йыйылды. Г. Мөхәмәтшина (1958), М. Кузнецов (1971), И. Кибальник (1982) һәм башҡа рәссамдарҙың ошо уҡ экспедицияларҙа төшөргән төҫлө һүрәттәре лә һаҡланған. Былар барыһы ла көньяҡ-көнсығыш төбәктә балаҫ һуғыуға бәйле барлыҡ традицияларҙы күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

КӨН ҠАҘАҒЫ



# ФЕКЕРҘӘР...

## ауаздашлыҡ тапты

**Башҡорт теле уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезында бик күп ҡатнашыусылар менән милли мәғариф өлкәһендәге хәл ителәһе мәсьәләләр буйынса әңгәмәләштек. Съезға бағланған өмөттәр, эшләнәһе эштәр, киләсәккә күҙаллауҙар, тәжрибәләр тураһында ҡатнашыусыларҙың яуаптарын һеҙгә лә еткерәбеҙ.**

***Зәһрә РӘХМӘТУЛЛИНА, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Мәғариф өлкәһендәге дәүләт сәйәсәте туған телдәрҙе өйрәнеү проблемаларын нисек көйләргә тейеш? Ысынлап та, был башҡорт теленә генә түгел, башҡа төбәктәрҙәге туған телдәргә лә ҡағыла торған системалы проблема. Мин ҡатнашҡан секцияла сит өлкәләрҙән килгән вәкилдәр ҙә эшләне, шуға, федераль кимәлдә алып барылған сәйәсәткә аныҡ тәҡдимдәр тыуҙы. Мәҫәлән, республика кимәлендә Башҡортостандың дәүләт телдәрен регламентлаған закон ҡабул ителергә тейеш, тигән фекерҙе хупланыҡ. Сөнки быңдай закон илдең башҡа төбәктәрендә бар, күрше Татарстанда ла ҡабул ителгән. Бынан тыш, Хөкүмәт янында күп ведомстволарға ҡағылған тел проблемаһын алып барған, эш йүнәлештәре биргән, системалаштырған бер башҡарма орган кәрәк тип таптыҡ. Ваҡытында Хөкүмәттә был мәсьәлә буйынса бер яуаплы кеше була торғайны, бөгөн иһә тотош бер бүлек кәрәк, тип иҫәпләйбеҙ, сөнки тел мәсьәләһе бер мәғариф өлкәһенә генә ҡағылмай. Был бүлек мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәтен, киң мәғлүмәт саралырын алып барған ведомстволар эшен дә дөйөмләштерергә тейеш, Хөкүмәт эргәһендәге туған телдәр буйынса комиссия эшен дә тергеҙеү мөһим, тип көтәбеҙ.

Сит төбәктәрҙән килгән ҡунаҡтар үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Татарстанда, мәҫәлән, республика кимәлендә ҡабул ителгән дәүләт программаһы нигеҙендә халыҡты туған телде өйрәнеүгә йәлеп иткән бушлай курстар ойошторола, уларҙа шөғөлләнергә теләүселәр арта бара икән. Беҙҙә лә был тәжрибәне файҙаланырға кәрәк.

Федераль кимәлдә бөгөн рус теленә ҡағылған федераль маҡсатлы программа эшләп килә. Шулай уҡ Рәсәй халыҡтары телдәрен ҡурсалаған, ярҙам иткән федераль программа ла ҡабул итергә кәрәк, тигән тәҡдимебеҙ бар. Мәғариф буйынса федераль законда "милли мәктәп" тигән нигеҙле төшөнсә юҡ, беҙҙең күп проблемалар тап шуға бәйле һәм шул төшөнсәне индерергә кәрәк, тигән тәҡдим менән сығырға иҫәп тотабыҙ. Бөгөн уҡытыу процесында лицензия үткән уҡытыу әсбаптары менән ҡулланырға тейешбеҙ. БР Мәғариф министрлығы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә 36 комплект дәреслек федераль исемлеккә индерелгән. Ә бына башҡорт телендә уҡытыу ойошторолған мәктәптәрҙә башҡа фәндәрҙе лә туған телдә уҡыр өсөн тәржемә ителгән әсбаптарға ла лицензия алыу сараһын күреү фарыз. Был төрлө сығымдар талап итә, әлбиттә. Тәржемә ителгән китап йөкмәткеһе менән рус телдәгеһенән айырылмай, шуға күрә беҙ уға лексик тикшереү генә үткәреүҙе тәҡдим итмәксебеҙ.

Съезд теория белгестәрен, практиктарҙы, чиновниктарҙы, уҡытыусыларҙы, атай-әсәйҙәрҙе бөтәһен бергә йыйҙы һәм фекерҙәр ауаздаш булыуын аңланыҡ. Кадрҙар мәсьәләһе, балала телде өйрәнеү теләге булдырыу атай-әсәйҙәр тарафынан да күтәрелә, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров та шул турала әйтте. Башҡорт теленең йәнтөйәге -беҙҙең республикала, беҙ уны ҡурсаларға тейешбеҙ һәм ошоно бөтәһе лә яҡшы аңлауы, конструктив һөйләшеүгә әҙер булыуы һөйөндөрҙө.

***Ҡәҙриә ФӘТХУЛЛОВА, Ҡазан федераль университеты доценты:*** Мин ҡатнашҡан секцияла күтәрелгән мәсьәләләр бөтә милли телдәр өсөн уртаҡ, беҙ барыбыҙ ҙа бөгөнгө осорға хас булған ошо милли телдәрҙе һаҡлап ҡалыу, уларҙы уҡытыу, үҫтереү менән бәйле проблемаларҙы хәл итергә тырышабыҙ. Мин Татарстан Республикаһында ғәмәлгә ҡуйыла торған проекттар тураһында һөйләнем, үҙебеҙҙә хәл ителмәгән проблемалар тураһында әйтеп үттем. "Ана теле" онлайн-мәктәбе етәксеһе булараҡ, шул проект тураһында һәм уның әһәмиәте тураһында мәғлүмәт еткерҙем. Масштаблы онлайн-мәктәп был, биш йыл эшләп килә һәм ҡулланыусылар ҙа күп. Уны эшләү еңел булманы, фильмдар төшөрөлдө, аудиолар яҙылды, текстар төҙөлдө, ғалимдар тарафынан тикшерелде һәм платформаға ултыртылды. Милли телдәрҙе дәүләт структуралары дәрәжәһендә ҡулланыу - уртаҡ проблема, шуны тормошҡа атҡарғанда ғына ғына телде өйрәнеү теләге барлыҡҡа киләсәк. Бынан тыш, уҡыу-уҡытыу әсбаптарын милли телдәргә тәржемә итеү, федераль экспертиза үткәреү ҙә барыбыҙҙы ла борсой. Әммә беҙ, уҡытыусылар, оптимистик ҡараштабыҙ һәм барыһы ла ыңғай хәл ителер, тип көтәбеҙ.

***Булат ШОЙНЖОНОВ, Бүрәт Республикаһы 1-се милли лицей-интернаты директоры:*** Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезындағы фекер алышыуҙарҙан һуң күп кенә мәсьәләләр буйынса бергә эшләргә мөмкин һәм кәрәк булыуын аңланыҡ. Мәҫәлән, балаларға туған телен өйрәтерлек мөхит булдырыу мәсьәләһендә ата-әсәләр, урындағы власть һәм федераль кимәлдәге структуралар беҙҙең менән бергә эшләһә, отошлораҡ булыр ине. Сөнки ата-әсәләр һәм йәмғиәт кенә тейешле шарттар тыуҙыра алмай: улар үҙҙәре туған телен белмәй, йәмғиәттә лә ул телдә һөйләшмәйҙәр. Әле кәңәшмәлә дөрөҫ әйттеләр, дәүләт туған тел мөхитен булдырыуҙа ярҙам итергә тейеш. Бүрәт Республикаһы 1-се милли лицей-интернатына балалар 1 синыфҡа туған телен өйрәнеү маҡсаты менән килә һәм ата-әсәләр араһында беҙҙең белем усағы бик популяр. Шуның өсөн бындай милли белем усаҡтары туған телдәрҙе үҫтереүгә ярҙам итә һәм мөхит тыуҙырыу мөмкинлеген бирә. Сөнки бында аралашыу тик туған телдә генә бара, балалар бүрәт телен яҡшы өйрәнә, уҡытыусылар барыһы ла тик бүрәт телендә һөйләшә. Тағы ла беҙҙә Этномәҙәни белем биреү ойошмалары ассоциацияһы 2014 йылдан эшләп килә, тәүҙә ул 7 мәктәптә үҙ эсенә алғайны, хәҙер уға 10 мәктәп инә. Был белем усаҡтарында туған тел, мәҙәниәт, тарих, этнография, йола һәм башҡалар тәрәнәйтеп өйрәнелә. Беҙҙең Мәғариф министрлығы ошо ойошмаға инген мәктәптәрҙе айырыуса яҡшы ҡарай һәм шул рәүешле төбәктә милли сәйәсәтте тормошҡа ашыра. Башҡортостанда ла милли мөхит булдырылған белем усаҡтары бар, шуға бөгөн бында коллегалар федераль кимәлдәге законға "милли мәктәп" тигән төшөнсәне ҡулланыуға индерергә тәҡдим итте. Был бик дөрөҫ тәҡдим.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

✓ *Һырдаръя башҡорттары Уралға күсенә. Ҡыуаҡан ырыуы ҡарыһүҙендә шундай уҡ мотив күҙәтелә: уларҙың ата-бабалары, юғалған йылҡы көтөүен эҙләп, Йүрүҙән буйына килеп сыға һәм ошо иркен ерҙәргә күсеп ултыра.*

*БОРОН-БОРОН...*

# АТТЫ ИЗГЕЛӘШТЕРЕҮҘЕҢ...

## үҙ хикмәте булғандыр



**Башҡорт риүәйәттәрендә һәм легендаларында аттың кешегә яҡын булыуы уның халыҡты ҡурсалай алыуы, кешеләргә юл күрһәтеп барыуы, ауыр хәлдәргә тарыған ваҡытта яңы йәшәү урындарын табырға ярҙам итеүе кеүек ваҡиғалар аша бирелә.**

Риүәйәттәрҙә ат тотемистик баба рәүешендә ҡабул ителеп, башҡорт ырыу төркөмдәренә күсеп ултырыу өсөн яңы ерҙәр таба алыусы зат итеп һүрәтләнә. Мәҫәлән, "Әйлеләр, мырҙалар, тырнаҡлылар ҡайҙан килеп сыҡҡан?" тигән риүәйәттә уларҙың ата-бабаларының Һырдаръя буйҙарында йәшәгәнлеге тураһында әйтелә. Бер заман ырыу аҡһаҡалының һылыу ҡыҙы һәм аттары юғала. Өс егет уларҙы эҙләргә сығып китә. Былар ат эҙҙәре буйлап килә торғас, Әй һәм Йүрүҙән буйҙарына килеп сығып, аттарҙы һәм ҡыҙҙы ошонда осрата. Һырдаръя яғына кире ҡайтҡас, улар аҡһаҡалдарға үҙҙәре күргән ерҙәр тураһында һөйләй, һәм Һырдаръя башҡорттары Уралға күсенә. Ҡыуаҡан ырыуы ҡарыһүҙендә шундай уҡ мотив күҙәтелә: уларҙың ата-бабалары, юғалған йылҡы көтөүен эҙләп, Урал һырттары аша үтеп, Йүрүҙән буйына килеп сыға һәм бөтә ырыуы менән ошо иркен ерҙәргә күсеп ултыра. Тағы ла бер фольклор әҫәрендә һөйләнелеүенсә, Учалы яҡтарында халыҡ күбәйеп киткәс, бер аҡһаҡал үҙе үлер алдынан улына иркен ерҙәргә күсеп китергә ҡуша. Бындай ерҙәргә уны бәйҙән ысҡындырылып ебәрелгән ҡолондар алып сығырға тейеш була. Улар артынан бара торғас, хәҙерге Арғаяш башҡорттарының ата-бабалары Миәс йылғаһы үҙәненә килеп сыға.

Р.Ғ. Кузеев төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында юл күрһәтеүсе ат тураһындағы сюжеттың киң таралыуын көнкүреш һәм дини ҡараштар үҙгәреүенә ярашлы бүребаба хаҡындағы боронғо тотемистик мифтың һуңынараҡ үҙгәртелеүе аша аңлата.

Ат юл күрһәтеүсе рәүешендә төньяҡ-көнсығыш һәм Урал аръяғы башҡорттарының ғына ауыҙ-тел ижадында сағылыш тапмаған. Билдәле эпик герой Иҙеүкәй үҙенең улы Мораҙымға (меңдәр) аттар көндөҙ үлән утларға, төнөн ял итергә туҡталған урындағы яңы ерҙе төйәк итергә кәңәш итеп, васыят әйтә. Был урын Дим йылғаһы үҙәне булып сыға. Халыҡта Әлшәй районының Түбәтәй һәм Себенле ауылдарына нигеҙ һалыныуҙы ла ошо ваҡиға менән бәйләйҙәр. Әлшәй районының мең ырыуы башҡорттары араһында Иҙеүкәй һәм Мораҙым вафат булғас, уларҙы ҡайҙа ерләү тураһындағы мәсьәләнең нисек хәл ителеүе тураһында риүәйәт таралған. Ул былай булған: аҡһаҡалдар мәрхүмдәрҙе хәрби аттарының арҡаларына бәйләп һалып ебәргәс, улар ҡайҙа барып туҡтай, шунда батырҙарҙы ерләргә ҡуша. Аттар Түбәтәй ауылынан алыҫ булмаған Күнкәҫ ауылы янындағы тау башында туҡтай. Был ҡәберҙәр хәҙер ҙә ҡайһы бер кешеләр өсөн табыныу урыны булып тора.

"Баштай ырыуы" легендаһына ярашлы, Туҡ йылғаһы буйына беренсе кеше тарпандар артынан барып, килеп сыҡҡан. Бәрәстауға етә килә, ул ҡырағай аттарҙы күҙҙән юғалта һәм ошо яҡтарҙа йәшәргә ҡала.

Ырымбур өлкәһендә хәҙер район исеменә нигеҙ булған "Ҡыуандыҡ" топонимының килеп сығышы шулай уҡ ат менән бәйле. Әүәл Рамазан исемле башҡорт Көньяҡ Уралдың Гөбөрлө һыртында ҡайраҡ таш эҙләп йөрөгән. Шул таштарҙы эҙләп табып, тоғон тултырғас, болонда торғоҙоп ҡалдырған аты эргәһенә китә был. Аты ҡалдырған урында булмай сыға. Уның эҙҙәре буйлап юллап бик оҙаҡ барһа ла, Рамазан атын тиҙ генә таба алмаған. Төндө тауҙар араһында уҙғарғас, таң менән тау артынан тау артылып, таныш булмаған йылға үҙәненә килеп сығып, атын табып ала. Ҡыуанысынан Рамазан ошо йылғаға "Ҡыуандыҡ" тип исем ҡуша. Һуңынан ул ошо йылға буйҙарына үҙенең ырыуҙаштары - үҫәргәндәрҙе алып килә, һәм улар ошонда Ҡыуандыҡ ауылына нигеҙ һала. Ул 1953 йылда ҡала итеп үҙгәртелә, уның гербында артына боролоп ҡарап барыусы алтын ат урын алған.

"Һаҡтау" риүәйәтендә бик күп йылдар элек ҡыпсаҡ ауылы Ҡунаҡбай (Ырымбур өлкәһе Новосергиевский районы) башҡорттарының йылҡы көтөүенең сит яҡтарға сығып китеп юғалыуы тураһында бәйән ителә. Бер йыл үткәс кенә был аттар Урал аръяғы һырттарында, Һаҡтау буйында табыла. Ошо ерҙәр бында тәүләп килгән кешеләргә бик оҡшай, һәм улар, ошо тау армыттары араһына күсеп килеп, һуңынан Ҡәнзәфәр тип аталып йөрөтөлә башлаған Һаҡтау ауылына нигеҙ һала.

Оҡшаш сюжет "Ямаш менән Йомаш" хикәйәтендә лә сағылыш тапҡан: күп йылдар элек бөрйән ырыуынан бер туған һунарсылар Ямаш менән Йомаш бүре баҫтыра барышлай арыған аттарын иреккә ебәреп, икенселәренә менеп, ары киткән. Тик теге аттар кире ҡайтмай. Юғалған аттарҙы оҙаҡ ҡына эҙләһәләр ҙә, улар табылмай. Бер нисә ай үткәс, бесән ваҡытында Ямаш йылға буйына төшкән икән, ҡышын юғалған аттарҙы күреп ҡала. Ямаш аттарҙы өйөнә алып ҡайта ла, ошо турала атаһына һөйләй. Атаһы уға аттары ҡыш сыҡҡан мул үләнле йылға буйына күсеп ултырырға кәңәш итә. Ямаш атаһы ҡушҡанын үтәй - ошо урында ул Ямаш ауылын нигеҙләй.

Ошондай риүәйәт түңгәүер башҡорттары араһында ла теркәлгән. Уның тыуған яҡты өйрәнеүсе Р. Рәхимов тарафынан яҙып алынған вариантында Хәйбулла районының Таштуғай ауылын түңгәүерҙәр Таналыҡ йылғаһының Таштуғай тауҙары менән уратылып алынған бик матур һыубаҫар туғайында нигеҙләүе тураһында бәйән ителә. Улар ҙа ошо ергә юғалған йылҡы көтөүен эҙләп килеп сыҡҡан була. Юл күрһәтеүсе аттар мотивы "Аҡһаҡ ҡола" һәм "Ҡара юрға" хикәйәттәренең ҡайһы бер варианттарында осрай: риүәйәт геройҙары үҙҙәренең кәләштәренә аҡһаҡ ҡола йәиһә ҡара юрға аттарын эҙләп барышлай юлыға.

Тотемизм күренештәрендә, шул иҫәптән атты изгеләштереүгә бәйле культта, юл күрһәтеүсе тотем тотороҡло элемент булып иҫәпләнә. Был башҡа халыҡтар традицияларына ла хас булған күренеш. Сыуаш ҡарыһүҙендә Тура илаһ тарафынан яратылған ҡанатлы ат ("ҫилҫунаг") сыуаштарҙың тәү бабаларын урман төпкөлдәренән дала киңлектәренә алып сыға.

Уғыҙхан тураһындағы мифта уның ғәскәре менән ҡараңғылыҡ иленә килеп еткәс, бер ҡарттың кәңәше буйынса мәмерйәгә инә торған урында дүрт ҡолондо бәйләп ҡалдырып, уларҙың инәләрен - бейәләрҙе үҙе менән алып китеүе тураһында бәйән ителә. Кире сығырға булғас, хан ғәскәре алдынан әлеге дүрт бейәне ебәрә, һәм улар мәмерйәнән сығыу урынын таба. Италия сәйәхәтсеһе Марко Полоның Ҡытайға барыуы тураһындағы китабында ҡыпсаҡтарҙың ҡараңғылыҡ иленә походҡа барып, унан бейәләр артынан эйәреп, кире ҡайтыуы хаҡында оҡшаш легенда килтерелгән. "Бокту-Кириш" исемле тыва эпик хикәйәтендә ырыуҙың бөтә кешеләре ҡоллоҡҡа алып кителгәс, бер туған ир һәм ҡыҙ балаға ҡолонло бейә осрап, малайға атаһының мәмерйәлә йәшерелгән һуғыш ҡоралдарын табырға ярҙам итә. Монгол эпосында аҡ бейә геройға ата-әсәһен ҡоллоҡҡа алып киткән дошманы торған урын тураһында хәбәр итә. Боронғо һинд мифологияһында батша, иреккә ебәрелгән изге ат артынан ғәскәре менән барып, төрлө ил һәм халыҡтарҙы буйһондора. Һинд-иранлыларҙың "Басра Хәсәне тураһындағы әкиәт"ендә ат Хәсәнде тылсым эйәһенә алып барғас, уға ҡатынын эҙләп табырға мөмкинлек тыуа. Тирия батшаһы Мутондың ҡыҙы Элисса, атаһы үлгәс, батша булып алған ағаһының эҙәрлекләүенән ҡасып, үҙенең яҡындары менән караптарға ултырып, йәшерен рәүештә диңгеҙгә сығып китә. Оҙаҡ ҡына йөҙөп барып, Урта диңгеҙҙең Төньяҡ Африка ярҙарына етәләр. Элегерәк Элиссаға ул ат башы һөйәген тапҡан ерҙә яңы ҡалаға нигеҙ һаласағы тураһында күрәҙәлек ҡылған булалар. Яр буйлап бара торғас, ҡасаҡтар ысынлап та ат башы һөйәген табып, ошо урында Карфаген ҡалаһына нигеҙ һала. Ливия сүллегендә аҙашҡан аргонавтарға диңгеҙгә табан юлды уның төбөнән сыҡҡан аҡбуҙ ат күрһәтә. Боронғо Рим ҡарыһүҙендә Марс алланының изге аттары уға бағышланып, яҙын тыуған егеттәрҙе үҙҙәре артынан эйәртеп, уларҙы торасаҡ ерҙәренә алып бара. Был мифтарға төрлө халыҡтарҙың тылсымлы әкиәттәрендә мифик аттарҙың геройҙарға ауырлыҡтарҙан сығыу юлдарын өйрәткән эпизодтары килеп ялғана.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Боронғо дәүерҙәрҙә юл күрһәтеүсе ат тураһындағы сюжеттар барса халыҡтар араһында таралған булып, бәлки, тере донъя барлыҡҡа килгән архаик эпохаларҙа йәшәгән, тип иҫәпләнгән кеше-аттарҙың, йәғни кентаврҙарҙың әҙәми заттың тәү бабалары булыуы тураһындағы мифтар ерлегендә тыуғандыр.**

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

# БАШҠОРТ

1135 йылдарҙа башҡорт иленә килгән Әбү Хәмит әл-Андалуси мосолманлыҡты ҡабул иткән башҡорт Дауыт бин Ғәлиҙең Анатолияның Конья ҡалаһы эргәһендә "оҙон кешеләр" зыяраттары хаҡында мәғлүмәт биреүен һөйләй. Иҙриси был өлкә хаҡында замандаш хәбәрселәрҙән алған мәғлүмәттәрҙе Птолемей географияһында күргән мәғлүмәттәр менән бергә сағыштырып, мөмкин ҡәҙәр ентекле мәғлүмәт биргән. Мәҫәлән, Яйыҡ (Иҙрисиҙа Суйыҡ, Суҡан) һәм Иҙел (Ағиҙел) йылғалары эргәләрендә урынлашҡан Немжан, Гурхан һәм Ҡараҡая ҡалалары һәм был яҡтарҙа эшләнгән тимер һәм баҡыр әйберҙәрҙең, ҡоралдарҙың һәм эшкәртелгән тейен һәм ҡондоҙ тиреләренең яҡын һәм алыҫ өлкәләргә сығарылыуын хәбәр итә.

Башҡорттар һәм венгрҙар хаҡында ислам сығанаҡтарында бирелгән мәғлүмәттәрҙең буталыуына "эске башҡорт" һәм "тышҡы башҡорт" һүҙбәйләнештәре сәбәп булған. Һәр хәлдә, был һүҙбәйләнештәр Иҙрисиҙа билдәле мәғәнә аңлатҡан терминдар кеүек күрһәтелгән. Мәҫәлән, башҡорттарҙың Урал тауҙарында йәшәгәндәре (Иҙел һәм Яйыҡ йылғалары араларындағы далала йәшәгәндәренән айырыр өсөн) Әүлиә Чәләбиҙең "Сәйәхәт-намә"һендә лә "Эске ил һәштәктәре" исеме менән осрай.

X быуатта уғыҙҙарҙың Өс йорт районынан тирә-яҡтарға таралыуынан һуң башҡорттарҙың Хорезм менән бәйләнеше нығынған. Бынан тыш, XIX быуатта ла Хиваға ебәрелгән Башҡорт иленең Урал урмандары байлыҡтарынан эшләнгән ҡаҡ һәм ҡайын ороларынан яһалған семәрле һауыт-һабаларҙы Бируни "төрк иленән Хорезмға килтерелгән" әйберҙәр араһында һанап үтә. Башҡа яҡтан Ибн Фаҙлаллаһ әл-Ғөмәри (1348 йылда үлгән) Манғышлаҡ халҡының ҙур өлөшөн бөгөнгө көндә лә башҡорттарҙың бер тармағы булған бөрйәндәр булыуын асыҡ аңлатҡан кеүек, бөгөн Арал күле көньяғында, Чимбай тирәһендә, ҡараҡалпаҡтар араһында ултырған башҡорттарҙың унда борон замандан бирле йәшәүен һәм был ике халыҡтың араһында уртаҡ титулдар булыуын, ҡайһы бер ваҡытта башҡорттар үҙ теләктәре менән ҡараҡалпаҡ хандарының хакимлығы аҫтына инеүен дә беләбеҙ (ҡарағыҙ: Зәки Вәлиди Туған, Бөгөнгө Төркөстан. Яңы баҫма, 204-се бит һ.б.)

Башҡорттар, монголдар баҫып алыуынан алдараҡ, мосолман булған. Мәҫәлән, Яҡут һәм Казвини Венгриялағы башҡорттарҙың ҡайһы берҙәрен Ислам дәүләттәрендә осратып мәғлүмәт алыуҙарын, был башҡорттарҙың ата-бабалары Исламды ҡабул итеүен, йәғни уларҙың Ислам динен ҡабул итеүҙән һуң Венгрияла ерләшеүҙәрен һөйләй. Ибн Фаҙлаллаһ әл-Ғөмәриҙең Анатолиялы сауҙагәр Хәсән Румиҙан алған мәғлүмәттәре буйынса, башҡорттар монгол идараһы ваҡытында айырым бер мосолман ҡазыйҙың идараһы аҫтында булған. Бөгөнгө көндә Хажи Хөсәйен бин әмир Ғөмәри Тараби әл-Төркөстани исемле 1342 йылда вафат булған бер ҡазыйҙың Өфөгә яҡын Шишмә ауылында урынлашҡан кәшәнәһе халыҡ тарафынан зыярат ителә.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ике тапҡыр яралана, контузия ала. Хәрби наградаларға лайыҡ була. Уйлап ҡарағыҙ, ун туғыҙ йәшлек егеттәр командир булып һалдаттарҙы атакаға күтәрә.*



**Бөйөк Еңеү байрамы алдынан күренекле башҡорт яҙыусылары, фронтовиктар Ғәли ИБРАҺИМОВ менән Рамаҙан ҠОТОШОВтың ҡыҙҙары Һөйөклө Ғәли ҡыҙы менән Асия Рамаҙан ҡыҙын сәйгә саҡырып алдыҡ. Апайҙар атайҙары хаҡында иҫтәлектәр һөйләне, улар ауыҙынан ишеткән һуғыш хәтирәләрен яңыртып, шул заман кисерештәрен, күргәндәрен барлап, бик йылы аралашыу ойоштороҙо.**

# ЯУГИР

## һуғыш хәтирәләрен

**Хөрмәтле апайҙар, әйҙәгеҙ, шунан башлайыҡ: 9 Май һеҙҙең өсөн, һеҙҙең ғаилә өсөн ниндәй мөһимлектәге байрам?**

**Асия Рамаҙан ҡыҙы:** Беҙҙең ветеран атайыбыҙ, олатайыбыҙ ошо көндәрҙә 95 йәшлек юбилейын ҡаршыланы. Ә инде Еңеү көнө беҙҙең ғаилә өсөн иң оло байрам. Байрам ғына түгел, был беҙҙең ғаиләнең тарихы ла. Беҙҙең атай бит ул һуғыштан әйләнеп ҡайтмаҫҡа ла мөмкин булған. Ә ул ҡайтҡан һәм быуынын дауам иткән. Был көндө атайыбыҙҙы ейәндәре, бүләләре ҡала буйлап алып йөрөй, парктарға барабыҙ, йырҙар тыңлайбыҙ, тәбиғәткә сығабыҙ. Ҡасандыр был байрам халыҡта һағышлы байрам булһа, бөгөн ул патриотик бер көслө, рухлы сараға әйләнде.

Элек ветерандар артыҡ йыйылып барманы, һәр хәлдә, атайымдың ундай тантаналарҙа йөрөгәнен иҫләмәйем. Ул үҙенең полкташтары менән генә һирәкләп күрешә ине. Өфөлә бер генә дуҫы булды, күберәк Мәскәүгә, Ялтаға, Омскиға китә инеләр. Яҙыусылар менән артыҡ аралашманы, тип әйтергә була, яҙышыуға ла пенсияға сығып, алтмыштан уҙғас ҡына ныҡлап тотондо бит. Аралашҡан яҙыусыһынан Яҡуп Ҡолмойҙо ғына иҫләйем.

**Һөйөклө Ғәли ҡыҙы:** Атайыбыҙ тере саҡта 9 май көндө баҡсала өҫтәл йыя ине. Уның янына мотлаҡ ҡәләмдәш ветеран дуҫтары килә. Беҙ, балалары, ейәндәре уларҙы хеҙмәтләндереп йүгерешеп йөрөйбөҙ. Был ғәҙәт мин үҙемде иҫләгәндән, һуңғы йылдарға тиклем дауам итә, йәғни беҙ хәҙер ҙә, атайыбыҙ юҡта ла, шул уҡ баҡсала байрам табынына йыйылышабыҙ. Сөнки беҙ бит фронтовик балалары - фронтовик ҡыҙҙары.

**Атайҙарығыҙ, булаcаҡ яҙыусыларыбыҙ, һуғышты ҡайҙа ҡаршы алған? Улар һеҙгә был хаҡта нимәләр һөйләне?**

**Асия Рамаҙан ҡыҙы:** Атайымды 1942 йылда ун һигеҙе тулыу менән армияға алғандар. Ул Өфөгә эвакуацияланған Севастополь зенит артиллерияһы училищеһын тамамлай һәм 19 йәшендә офицер дәрәжәһендә фронтҡа ебәрелә, Орел-Курск дуғаһында һуғыша. Артабан Брянск һәм 1-се Белоруссия фронттары ғәскәрҙәре составында Берлинға тиклем хәрби юл үтә. Ике тапҡыр яралана, контузия ала. Хәрби наградаларға лайыҡ була. Уйлап ҡарағыҙ, ун туғыҙ йәшлек егеттәр командир булып һалдаттарҙы атакаға күтәрә. Алға китеп әйткәндә, һуғыштан һуң уның йәштәштәре булған егерме дүртенсе йылғыларҙың биш проценты ғына иҫән ҡала.

Атайым Белоруссия, Польша аша Берлинға барып етә. Берлин эргәһендәге бейеклектәрҙә урынлашып, беҙҙең артиллерия егерме көнләп ҡаланы бомбаға тота. Ҡалаға инеп урынлашҡас, унда һәр илдең үҙенең "зона влияния" тип аталған биләмәһе булдырылған. Атайым беҙҙең зонала ҡалдырылып, 1947 йылға тиклем хеҙмәт итә һәм полковник дәрәжәһендә демобилизациялана. Хеҙмәтенән һуң уға Мәскәү ҡалаһында хәрби академияла уҡырға тороп ҡалырға тәҡдим итәләр, әммә ул Башҡортостанын, атай-әсәйен үтә ныҡ һағынған була һәм бөтә нәмәнән баш тартып, ҡайтып китә.

Башҡортостанға ҡайтҡас, бындағы ҡыйралышҡа иҫе китә атайымдың. Бигерәк тә беҙҙең Ишембай яҡтары бөлгөнлөккә төшкән була. Күптәр аслыҡтан ҡырылған. Өс улын фронтҡа оҙатҡан аталары аслыҡтан, ауыр эштән миктәп үлгән. Әсәһе һуҡырайған. Тыуған йортондағы ҡыйыҡтың һаламы ла, ҡоймалар ҙа, эргә-тирәләге ағастар ҙа яғып бөтөлгән. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, һуғышта йөрөгән хәрби улдары өсөн килгән пособиены атай менән әсәйгә бирмәй, күрше ауылда йәшәгән почтальон алып торған. Ошо пособие килеп еткәндә, бәлки, ҡарттар ҙа иҫән ҡалыр ине. Ул почтальондың ҡырын эштәре аҙаҡ фашланған: күптәрҙең өлөшөнә ингән өсөн уны хөкөм итеп, ултыртып ҡуйғандар.

Һуңынан атайым Өфөгә китә, совет, партия органдарында, республика гәзиттәре редакцияларында, Башҡортостан китап нәшриәтендә эшләй. 1964 йылдан Өфө авиация институтында уҡыта. СССР Фәндәр академияһының Философия институтында кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай һәм утыҙ йыл самаһы эшләп, хаҡлы ялға китә.

**Һөйөклө Ғәли ҡыҙы:** Атайым 1939 йылда хәрби хеҙмәткә алына. Хабаровск өлкәһенә эләгә. Ул хеҙмәт иткән йылдарҙа көндәлек тота һәм дәфтәренә барыһын да тәфсирләп яҙып бара. 1943 йылға тиклем уларҙы япон сигендә резервта тоталар. Унан Курск дуғаһына күсерәләр. Ул шунда һуғыш үткән ерҙәрҙең нисек бушлыҡҡа әйләнеп ҡалыуын күреп аптырай.

Беренсе Украина фронтында һуғыша, Польша, Украина, Белоруссия аша үтеп, Одер эргәһендә ҡаты яраланып, госпиталгә эләгә. Дауаланып сыҡҡанда инде Еңеү иғлан ителә. Ләкин ҡапыл ғына ҡайта алмай әле, атайымды Венгрияға ебәрәләр. Еңеүҙән һуң беҙҙең армия сит илдәрҙән төрлө предприятиеларҙы, сәнәғәт, ауыл хужалығы ҡоралдарын күсереп алып ҡайта. Атайымдар Венгриянан Карпат тауҙары аша мал ҡыуып алып килеп, Украинаға тапшыра.





Һуғыш тамамланғас, Ишембайға ҡайтып, нефть техникумында тәүҙә инглиз теленән уҡыта, аҙаҡ "Совет Башҡортостаны" гәзитендә хәбәрсе, әҙәби хеҙмәткәр, бүлек мөдире, яуаплы секретарь вазифаларын үтәй. Шул уҡ йылдарҙа ситтән тороп Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. Һуңыраҡ Мәскәүҙә СССР Яҙыусылар союзының Юғары әҙәби курсында уҡый. 1959 йылдан алып оҙаҡ ваҡыт "Ағиҙел"журналының яуаплы секретаре булып эшләй.

**Атайҙарығыҙҙың һуғыш ветераны икәнен белеп үҫтегеҙме? Һуғыш тураһында һөйләнеме улар һеҙгә?**

**Һөйөклө Ғәли ҡыҙы:** Биш йәштәр тирәһендә генә атайымдың һуғышта ҡатнашҡан яугир булыуын белеп ҡалдым. Уның яҫы офицер ҡайышы бар ине. Беҙ тыңламағанда, атайым шуны шартлатып итәгенә һуғып, беҙҙе тыйып ҡуйған була торғайны. "Хәҙер эләгә!" тигән була ла, үҙе берҙе лә эләктермәй. Шунан бер ваҡыт, был минең һуғыштан алып ҡайтҡан ҡайыш, тип әйтеп ҡуйҙы. Ҡайыштың "һуғыштан" алып ҡайтылған булыуы мине шул тиклем ныҡ тетрәндерҙе, бер ваҡыт мин атайым өйҙә булмағанда ул ҡайышты иҙән ярығына төшөрҙөм дә ҡуйҙым. Эҙләп-эҙләп тә тапманы уны атайым, мин дә әйтмәнем...

1956 йылда "Бер полк кешеләре" тигән романы баҫылып сыҡты. Был һуғыш тураһындағы беренсе башҡорт романы ине. Атайыма яҙыусылар килеп ултырып, был хаҡта бик күп һөйләштеләр, шунда уның "яҙыусы" икәнлеген дә аңлап алдым. Шулай ҙа бәләкәйерәкмен әле. Урамда балалар менән уйнайбыҙ ҙа "Кемдең атай-әсәйе кем?" тип һорау бирешәбеҙ. Мин әйтәм: "Әсәйем - табип, атайым - яҙыусы!" Бер малай: "Атайың бер ҙә яҙыусыға оҡшамаған, яҙыусылар бейек цилиндрлы эшләпә кейә, һинекенең ундайы юҡ", - ти. "Булмаһа ла яҙыусы", - тип ныҡышам. "Улайһа, нисә китап яҙған атайың?" - ти был. "Бер..." - тим мин. Был минән көлдө. Ә мин тот та йәбеш быға. "Минең атайым һуғышта булған! Минең атайым яҙыусы!" - тип ҡолас ташлап тартҡылашам тегенең менән. Танауым ҡанап, өҫ-башым йыртылып ҡайтып индем, малай кешенән яҡшы ғына эләккәйне шул. Индем дә, атайыма ҡарап: "Һин яҙыусымы, түгелме? Һин кем ул?" - тип илайым. Ул шунда миңә барыһын да ултыртып аңлатты. Мин уның һуғышта булғанын һәм шул һуғыш тураһында ҙур китап яҙғанын белдем...

Үҫә бара атайымдан һуғыш тураһында ҡыҙыҡһынып һораша башланыҡ. "Нисә неместе үлтерҙең?" тигән һорауҙы бирә бит инде балалар иң беренсе. Ә атайыбыҙ бик баҫалҡы кеше ине. "Әллә, кем уны һанаған? Ҡул һуғышында, бәлки, өсәү-дүртәү булғандыр", - ти. "Аҙ бит, нишләп күберәк үлтермәнең?" - тибеҙ балалығыбыҙға барып.

Артабан мин һуғыш тураһында уҡый, был осор менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланым. "Васек Трубачев" тигән китапты уҡып, "Эх, тағы ла һуғыш башланһын ине лә, мин унда барып, Зоя Космодемьянская кеүек батыр ҡыҙ булыр инем", тип хыялланғаным хәтеремдә.

Олоғая бара атайым да арыуыҡ ҡына иҫтәлектәр һөйләп ҡалдырҙы, мин уларҙы яҙып, төрлө баҫмаларҙа баҫтырҙым. Мәҫәлән, атайымды ҡотҡарған ҡайсы тураһында ҡыҙыҡ ҡына бер хәтирә бар. Түш кеҫәһендә бәләкәй ҡул ҡайсыһы йөрөткән ул. Бер бәрелештән һуң ул ҡаты яралана, ә санитарҙарҙың уға килеп етергә ваҡыты юҡ. Хәле бөткәндән бөтә барып, ағас төбөндә ята. Шул мәл бер санитар "Кемдә ҡайсы бар?" тип марля ҡырҡырға ҡайсы эҙләй һәм атайым уға саҡ ҡалҡынып, "Миндә" тип өндәшә. Ҡайсы артынан килгән санитар уның хәлен аңғарып, арбаға тейәп алып китә. Унан теге медсестра уға ҡайсыһын кире бирә. Атайым ҡайсыһын һуғыштан алып ҡайта, һеңлеһенә бирә. Ул үлгәс, һеңлеһе ҡайсыны миңә тапшырҙы, ә мин уны Әҙәби музейға илтеп ҡуйҙым. Уның урыны шунда.

**Асия Рамаҙан ҡыҙы:** Мин атайымдың һуғышта булыуын һуң ғына белдем. Ул ваҡытта, әллә ветерандар күп булғанғамы икән, уларҙы артыҡ ҡәҙер ҙә итмәнеләр, мәктәптәрҙә балаларға "Бына - ветеран" тип күрһәткән кеше лә юҡ ине. Ветерандар үҙҙәре лә ниндәйҙер психологик травма алып ҡайтҡан быуын булғандыр инде, улар үҙ балалары менән артыҡ аралашманы. Ошо осор быуындар араһында бәйләнеш өҙөлөп ҡалғандай булды. Атайым да гел эштә йөрөнө, беҙгә ваҡыты ла юҡ ине. Һәр ваҡыт яуаплы вазифаларҙа эшләне, командировкаларҙа йөрөнө, уның ҡасан ҡайтып, ҡасан киткәнен күрмәй ҙә ҡала инек.

Беренсе тапҡыр ул 1984 йылда ветеран булараҡ Еңеүҙең 30 йыллығын билдәләгән осрашыуға барҙы. Ул ваҡытта инде минең уландарым да үҫеп еткәйне һәм олаталарын мәктәп байрамына саҡырҙы. Шул байрамдан атайым шундай аптырап, тәьҫирләнеп ҡайтты. "Был балалар ҡайҙан беләләр икән һуғыш тураһында? Бөтөн нәмә менән ҡыҙыҡһыналар бит әле!" - тип ҡат-ҡат һөйләне ҡайтҡас. Балаларҙағы патриотик рух уны нисектер ҡанатландырып ебәргәндәй булды...

***Үҙемде белә-белгәндән атайым яҙышты. Әсәйемдең бер туған ҡустыһы Ғәзим Шафиҡов менән бергәләп, архивтарҙа соҡоноп, золом ҡорбандары булған шәхестәрҙең исемен, хеҙмәтен ҡайтарыу өҫтөндә эшләнеләр. Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина, Ғөбәй Дәүләтшин, Дауыт Юлтыйҙарҙың ижадын тергеҙҙеләр. Улар бер ваҡытта ла буш менән булып йәки кәйеф-сафа ҡороп йөрөмәне. Атайым эргәһендәге кешеләрҙе бик эшлекле, етди ағайҙар итеп хәтерләп ҡалғанмын. Илленсе йылдарҙа атайҙарҙы йыш ҡына хәрби сборға саҡыра торғайнылар. Мин бала саҡта уны шул хәрби кейемдә көйө хәтерләп ҡалғанмын.***

✓ *Оҙаҡ итеп һөйләшеп ултыралар, йырлашалар. Назар Нәжми аккордеонда уйнай, Хәким Ғиләжев йырлап ебәрә! Ҡатындарын да, балаларын да алып киләләр. Ул саҡта минең апайҙы, скрипкаһын тоттороп, ултырғысҡа баҫтыралар.*



# АТАЙҘАРЫБЫҘҘЫҢ...

## күңелдә һаҡлайбыҙ





▸ **Атайҙарығыҙға, уларҙың дуҫтарына, фекерҙәштәренә бәйле бала саҡ иҫтәлектәре яҡтымы?**

**Асия Рамаҙан ҡыҙы:** Үҙемде белә-белгәндән атайым яҙыусы. Әсәйемдең бер туған ҡустыһы Ғәзим Шафиҡов менән бергәләп, архивтарҙа соҡоноп, золом ҡорбандары булған шәхестәрҙең исемен, хеҙмәтен ҡайтарыу буйынса эшләнеләр. Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина, Ғөбәй Дәүләтшин, Дауыт Юлтыйҙарҙың ижадын тергеҙҙеләр. Улар бер ваҡытта ла буш менән булып йәки кәйеф-сафа ҡороп йөрөмәне. Атайым эргәһендәге кешеләрҙе бик эшлекле, етди ағайҙар итеп хәтерләп ҡалғанмын.

Илленсе йылдарҙа атайҙарҙы йыш ҡына хәрби сборға саҡыра торғайнылар. Мин бала саҡта уны шул хәрби кейемдә көйө хәтерләп ҡалғанмын. Һәм хәтеремдә, нишләптер, уны һуғышҡа оҙатҡанмын икән, тигән мәғлүмәт нығынып ҡалған да, гел генә "Атай һуғышҡа киткәндә" тип һөйләй ҙә йөрөй инем. Ололар аңлай алмай ыҙалана. Аҙаҡ ҡына минең буталғанымды төшөнөп алып, аңлатып ҡуйҙылар.

**Һөйөклө Ғәли ҡыҙы:** Яңы күпер урамындағы бер ағас йортта йәшәгәндә ауылса ҙур бүлмәнең бер яғында һике, икенсе яғында атайыбыҙҙың эш өҫтәле тора ине. Кис булһа, беҙҙең, балаларҙың, шаярғыһы килә, тик әсәйебеҙ тыя, атай эшләй, шауларға ярамай. Ә атайыбыҙ яҙа ла яҙа, яҙа ла яҙа. Унан Революцион урамындағы фатирға күскәс, атайҙың эш бүлмәһе айырым булды. Йыш ҡына яҙыусылар килеп ултырҙы, аралаштылар. Кәтибә апай Кинйәбулатова менән уҡыған саҡтарынан дуҫ инеләр, ул беҙҙең өйҙөң көтөп алынған ҡунағы булды. Уны әсәй-атайҙар яратып "Кәти" тип кенә йөрөттө.

Шәриф Биҡҡол, Ғилемдар Рамазанов, Хәким Ғиләжев ғаиләләре менән беҙҙең эргәлә ҡуртымға бүлмә алып йәшәйҙәр ине. Беҙҙең фатир үҙебеҙҙеке, шуға күберәк беҙҙә йыйылалар ине. Ҙур түңәрәк өҫтәлде уртаға ултырталар. Әсәйем бәлеш, картуф бешерә. Селедка телеп һалалар ҙа, гәзиттәрҙе йыртып, салфетка урынына ҡулланалар. Оҙаҡ итеп һөйләшеп ултыралар, йырлашалар. Назар Нәжми аккордеонда уйнай, Хәким Ғиләжев йырлап ебәрә! Ҡатындарын да, балаларын да алып киләләр ҡайһы ваҡыт. Ул саҡта минең апайҙы, скрипкаһын тоттороп, ултырғысҡа баҫтыралар. Апайым башҡорт көйҙәрен дә, классик музыкаларҙы ла башҡара. Өй эсе бер концерт залы кеүек булып китә ине.

▸ **Һуғыш осоро кешеләрендә, бигерәк тә ветерандарҙа, Сталин культы һаҡланды. Һеҙҙең өйҙә булдымы был культ?**

**Һөйөклө Ғәли ҡыҙы:** Сталин беҙҙең атайҙар өсөн бик абруйлы кеше булды. Бөйөк шәхес итеп ҡаранылар, әммә унан бик ҡурҡтылар. Хатта Сталин темаһына һөйләшеү ҙә мөмкин булмаған хәл булған булған. Атайым гәзиттә эшләгәнендә, мәҫәлән, байрамдарға ҡарата Сталиндың ҡотлау һүҙе булһа, ул төндә телефонограмма менән ебәрелгән һәм шул төндө берәү дежурҙа ултырып ҡалып, хәбәрҙе ҡабул иткән һәм шунда уҡ тәржемә итеп, иртәнсәккә гәзит номерына ҡуйғандар. Ҡыҫҡа ғына, эстәлекле ҡотлауҙар һәм мөрәжәғәттәр килгән ил башлығынан. Һәм ул был яҙмаларын үҙе яҙған булған. Сталин тураһында атайым хатта олоғайғас, заманалар үҙгәргәс тә бер насар һүҙ ҙә әйтмәне, ул теманы ҡуҙғатманы ла.

**Асия Рамаҙан ҡыҙы:** Минең ҡартатайым, әсәйемдең атаһы, Әхмәтзәки Вәлидиҙең ғәскәрендә полк муллаһы булған. Егерменсе йылдарҙа улар Башҡортостандан ҡасып китергә мәжбүр булғандар. Ҡырғыҙстанға барып, шунда йәшәгәндәр. Балалары ла шул яҡта тыуа. Бары тик илле өсөнсө йылда ғына тыуған яҡтарына ҡайтыу мөмкинлеге сығып, һағынышып ҡайтып төшәләр. Бына шул ҡартинәйҙәр ҙә, әсәй ҙә шул яҡтағы хәл-әхүәлдәре, йәшәйештәре хаҡында бер ваҡытта ла һөйләмәне.

***Биш йәштәр тирәһендә генә атайымдың һуғышта ҡатнашҡан яугир булыуын белеп ҡалдым. Уның яҫы офицер ҡайышы бар ине. Беҙ тыңламағанда, атайым шуны шартлатып итәгенә һуғып, беҙҙе тыйып ҡуйған була торғайны. "Хәҙер әләгә!" тигән була ла, үҙе берҙе лә эләктермәй. Шунан бер ваҡыт, был минең һуғыштан алып ҡайтҡан ҡайыш, тип әйтеп ҡуйҙы. Ҡайыштың "һуғыштан" алып ҡайтылған булыуы мине шул тиклем ныҡ тетрәндерҙе, бер ваҡыт мин атайым өйҙә булмағанда ул ҡайышты иҙән ярығына төшөрҙөм дә ҡуйҙым. Эҙләп-эҙләп тә тапманы уны атайым, мин дә әйтмәнем...***

Мин үҙем дә был турала алтмышынсы йылдарҙың был яғында ғына ишетеп белдем. Был беҙҙең халыҡтың Сталин заманында шул ҡәҙәр ҡурҡытылыуы, баҫылыуы тураһында һөйләй. Әммә уларҙың ҡурҡыуын был даһи кешегә ҡарата булған әллә хөрмәте, әллә икенсе тойғомо баҫып киткәйне, булһа кәрәк. Һәр хәлдә, улар Сталиндың исеменә лә, есеменә лә тел тейгеҙмәне. Олатайҙарыбыҙҙың тарихын ишетеп белгән бәләкәй ҡустым бер саҡ йәне көйөп Сталиндың портретына тотҡан да "дурак" тип яҙған. Атайым шунда "Ошо яҙыу өсөн элегерәк бөтөн ғаилә менән төрмәгә китер инек", тип ҡуйҙы.

Бөгөн атайым ул замандың сәйәсәте һәм башҡа тарихтар хаҡында күп яҙа. Хәтере шәп әлегә, зиһене яҡты. Торғаны менән бер тере шаһит, тере архив бит ул.

▸ **Туған тел, милли мәҙәниәт тураһында һүҙ ҡуҙата инеме яҙыусылар, улар заманында был өлкәлә проблема булдымы икән?**

**Асия Рамаҙан ҡыҙы:** 1963 йылда Н. Хрущевтың рус булмаған барлыҡ гәзиттәрҙе ябыу тураһында указы сыҡҡан. Ҡайһы бер милли республикаларҙа был документ тормошҡа ашырылып, туған телдәге баҫмалар эшләүҙән туҡтаған. Ә беҙҙең республика журналистары быға ҡаршы сыҡҡан. Атайым әйтеүенсә, Рәми Ғарипов беренсе булып был эште ойоштороп йөрөгән. Йөҙләп кеше Өлкә комитет бинаһы алдына барып баҫып, етәкселәрҙән яуап талап иткән. Ул саҡтағы партияның Башҡортостан Өлкә комитетының беренсе секретары Зыя Нурыев бинанан сығып, митингыла ҡатнашыусыларҙы тыңлаған. Мәсьәләнең төбөнә төшөнгәс, Мәскәүгә шылтыратам, тип кабинетына инеп китә. Бер сәғәттән сығып: "Тыныс булығыҙ, мәсьәләне кире ҡарарбыҙ тинеләр", - тип хәбәр иткән. Ошо ваҡиғанан һуң милли гәзиттәр яңынан тергеҙелеп, эш башлай. Күреп тораһығыҙ, тел өсөн көрәш беҙҙең милләттә бөтә йылдарҙа һәм замандарҙа ла барған.

▸ **Атайҙарығыҙ ниндәй холоҡло кешеләр ине? Әсәйҙәрегеҙ менән ниндәй мөнәсәбәттә булдылар? Ғаилә тәрбиәһе нимәләргә нигеҙләнде?**

**Асия Рамаҙан ҡыҙы:** Атайымдың бер ваҡытта ла ғаиләһенә ваҡыты булманы. Ул бик эшкә бирелгән кеше ине, әле лә эшләй. Бөтә кешенең проблемаларын, йомоштарын хәл итте. Уға райондан да, ауылдан да ярҙам һорап, яҡлау эҙләп киләләр ине. Киләләр, беҙҙең өйҙә ҡуна ҡалалар, нимәләрҙер көтөп яталар, уҡырға инергә килеүселәр тулып китә. Өйҙә былай ҙа үҙебеҙ биш кеше, килеүселәр иҙәндә лә, ишек төбөндә лә ята. Ҡустыма хатта ваннаға урын түшәп бирәләр ине. Атайым шулайтып башҡаларға иғтибар һәм хөрмәт күрһәтеп, ғаиләһендәгеләрҙе онотоп китә торған холоҡло булды. Мин быларҙы үҙем олоғая барғас ҡына анализлайым. Ә ул ваҡытта атайҙың абруйы ҙур, әсәй ҙә уға һүҙ тейгеҙмәй, зарланмай, шулай тейеш тип ҡабул итеп йәшәй.

Икәү-ара бик татыуҙар ине. Әсәйем ауыр йылдарҙа үҫһә лә, нисектер, тормошҡа яраҡлашып етмәгәнерәк ҡатын булды. Ул донъя йөгөнә төшөп егелмәне, нимәләрҙелер хәл итеп йөрөмәне, атайымдың ышығында ғына йәшәүҙе хуп күрҙе. Шунлыҡтан, ғаиләләге кер йыуыу, иҙән йыуыу кеүек ҡара эштәр ҙә бик иртә минең иңемә ятты. Әсәй атайҙың иркә ҡатыны булып ҡартайҙы һәм шулай булып китеп тә барҙы.

Бер саҡ ҡартинәйемдән: "Ҡасан йәшәү рәхәтерәк ине, хәҙерме, әллә революцияға тиклемме?"- тип һорағайным, ул уйлана биреп ултырҙы ла: "Болғанышҡа тиклем",- тине. Ә бит рус яҙыусылары күп осраҡта башҡорттоң боронғо йәшәйешен, революцияға тиклемге хәлен ауыр итеп һүрәтләй, был беҙҙең быуындың аңына һеңеп ҡалған. Шуға ла ҡартинәйемдең элекке дәүерҙә йәшәргә теләүе тураһында ишетеп аптырағайным. Эйе, шул осорҙағы быуындар бәйләнешенең бөтөнләй өҙөлөп ҡала яҙыуы, ололарҙың ярты ғүмере йәшерен булыуы беҙҙең ысынбарлыҡты белмәй үҫеүебеҙгә килтерҙе. Шуға ла мин бөгөн ейәндәрем менән тығыҙ аралашырға, уларға бөтөн тарихтарҙы ла һөйләп ҡалырға тырышам. Улар был хаҡта беҙҙән - үҙ ғаиләһе вәкилдәренән ишетергә тейеш, тип иҫәпләйем.

**Һөйөклө Ғәли ҡыҙы:** Атайҙың әсәйгә оло һөйөүен беҙ, балалары ла, һиҙә, күрә инек. Әсәй үҙ сиратында ҡатыраҡ булды, хистәрен күрһәтмәне. Әммә бик донъясыл булып, атайҙы ныҡ хәстәрләй торғайны. Уның кейемен дә үҙе һатып ала, ашарына ла тәрбиәләп кенә бешерә, кәрәген таба һалып бирә, атайым яҙышҡанда өйҙә тынлыҡ тоторға тырыша, һәм башҡалар. Әсәй шундай булмаһа, атайыбыҙ кейемен дә, тамағын ҡайғырта алмаҫ ине, моғайын. Сөнки артыҡ ер кешеһе түгел ине. Атай һөйләшергә яратты, яҙышмағанда күп итеп һөйләй ҙә һөйләй торғайны. Уны әсәй ҙә, беҙ ҙә тыңлайбыҙ, башҡалар ҙа тыңлай. Шундай һүҙсән, алсаҡ булды ул. Беҙҙең менән ныҡ яҡшы һәм яҡын аралашты, һәр һорауыбыҙға яуап бирҙе, барыһын да аҡыллы итеп аңлатып, төшөндөрөп бирә белде.

Бер күренеш һаман күҙ алдымда. Атайымдың әсәйгә оло мөхәббәтле булыуы тураһында әйткәйнем бит инде. Бына атай үлем түшәгендә ята, әсәй уның янында мыштырлап йөрөй. Бер саҡ атай әсәйҙе саҡырып алды ла, ҡулынан һыпырып-һөйөп: "Зөһрә, мин бит һине шул тиклем яратып китәм..." - тине. Бына шулай йәшәне улар...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт халҡының йөҙәрләгән яҙыусы һәм шағиры ҡатнашып, шуларҙың ун һигеҙе батырҙарса һәләк була. Утыҙҙан ашыуы тән һәм йән яралары менән ҡайтып, ҡәләм тирбәтеп йәшәүҙе дауам итә. Бөгөн уларҙың иҫәндәре бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Беҙ уларҙы яҙған әҫәрҙәре, иҫтәлектәре һәм балалары, ейәндәре һөйләгәндән белеп өйрәнәбеҙ. Ә уларҙы белгән-күргәндәр был хаҡта һөйләргә тейеш. Сөнки хәтер шулай йәшәй. Уны ололар балаларына, ә әлегеләй фронтовик ҡыҙҙары беҙгә - уҡыусыларға бәйән итергә бурыслы.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**




## "Танкистар" һәм "самауырҙар"

Мәжлес ҡыҙғандан ҡыҙҙы. Иҫке тальянка хужаһы тартҡан ыңғайына яҙылып өлгөрә алманы. Уның сыңрау моңон күмәк тауыштар, һыҙғырыуҙар, иҙәнгә йән көскә һуғылған ағас аяҡтар һәм арба тәгәрмәстәре "таҡ-тоғо" күмеп китте. Был гөрһөлдәүҙәрҙән өҫтәл ишараты ла "бейей" башланы. Уның өҫтөндәге ҡырлы стакандар һикереште, бер-береһенә бәрелешеп сайпылышты, ҡолап түгелде. Иҫерешкән ирҙәрҙең һәр кеме үҙенсә ҡысҡырҙы:

- Э-эх, Маруся!

- Һа-а-ай! Итегеңде туҙҙырма!

- Даввай! Наливай!

Көслө ҡулдар тос йоҙроҡтары, киң устары менән әлеге бысраҡ иҙәнгә дөпөлдәтә һуғып мәжлескә дәрт өҫтәне. Шул ғәйрәтле беләктәр ағас ҡулайлама өҫтөнә ултыртылған тоҡос кәүҙәләрҙе арбаһы-ниййе менән өйөрөлтөп алып йөрөнө. Һыңар аяҡтарында һикрәнләгән, ҡыҙып китеп ҡултыҡ таяҡтарын атып бәреп төшөп киткәндәре иҙәндәге был тоҡостарға эләгеп ҡолап та китте. Унан һикереп торҙо ла, аҡһай-туҡһай тағы ялпылданы. Ялбыр ҡаштар аҫтындағы ҡара, һоро, зәңгәр күҙҙәр атакаға күтәрелгәндәгеләй зәһәр ялтыраны. Һаҡал-мыйыҡ баҫҡан эйәктәр юғары күтәрелде. Миҙалдар сыңланы. Уларҙың ҡайһылары ысҡынып та осто. Мәжлес ҡыҙыуҙан үтеп, ниндәйҙер ҡурҡыныс, дәшһәтле ҡотороуға әйләнде.

Тап шул ваҡыт сөй келәгә генә эләктерелгән ишек бәреп асылды ла, күҙ йомоп асҡан арала бүлмәгә йүгерешеп ҡоралды һалдаттар инеп тулды. Алдан өйрәтелгән тәртип менән улар мәжлестекеләргә ҡаршы теҙелешеп тороп, ҡоралдарын төҙәне. Шашып бейеүселәр тынысланып та өлгөрмәне, һалдаттарҙың артынса милиция майоры килеп баҫты ла, телмәр тотто:

- Иптәш фронтовиктар! Совет иле һеҙҙең киләсәк тормошто ҡайғыртыу сәбәпле, йортһоҙ-ерһеҙ, ҡараусыһыҙ ҡалған ғәриптәрҙе махсус дауалау йорттарына урынлаштыра! Бөгөн төндә һеҙ барығыҙ ҙа поезға ултыртылып оҙатылырға тейеш! Йыйынығыҙ!

Иҫеректәр бер аҙ телһеҙ ҡала биреп торҙолар ҙа, барыһы бергә геүләргә керешгте:

- Ниндәй дауалау йорто тағы?

- Ә нисек дауалайһың һин мине? Аяҡтар тегеп ҡуяһыңмы?

- Бер ҡайҙа ла бармайым! Мин ошо ер өсөн һуғыштым! Һин, молокосос, имсәк имгәндә мин ут эсендә булдым!

Милиционер ҡулын күтәреп, тынлыҡ талап итте:

- Иптәштәр! Һүҙ көрәштереү урынһыҙ! Берәрләп сыға башлайбыҙ!

Бындай хәбәр ярһып алған халыҡҡа етә ҡалды:

- Һин нимә, гражданин начальник, беҙҙе ҡулға алаһыңмы?

- Кем ул һин улай һөйләшергә?

Таяҡтарын юғалтҡан ағас аяҡлы бер алпауыт һикерә-һикерә яҡынлаша ла башланы:

- Һин мине, фронтовикты, ҡурҡытмаҡсы итәһеңме? Мин, беләһеңме, ҡурҡытып маташҡан фашистың муйынын нисек итеп бороп ырғыттым...- Киҙәнеп ынтылған еренән һыңар аяғы ишелеп ҡолап та китте үҙе. Уның дағыр-доһор барып төшөүе һәм әсе итеп һүгенеп ебәреүе башҡаларына сигнал һымаҡ булды. Иҫерек фронтовиктар, дөрөҫөрәге, фронтовиктарҙан ҡалған өлөштәр - ҡулдан эшләнгән ағас арбасыҡтарҙағы ярты кәүҙәләр, һыңар ҡуллы, һыңар аяҡлылар һәм хатта бер һуҡыр, һалдаттарға ҡаршы алышҡа ташланды. Бүлмә эсе даһыр-доһор тауыштарға һәм ирҙәр ауыҙынан сыға алған иң әшәке, әҙәпһеҙ әр-битәргә күмелде. Тик оҙаҡ барманы был бәрелеш. Күпмелер ваҡыттан ҡаршы тороусылар баҫтырылып, ҡулдары шаҡарылып, һөйрәтелеп, ҡайһылары баштарына тоҡ кейҙереп күтәрелгән килеш бер-бер артлы сығарыла ла башланы. Бындай эште беренсе тапҡыр һәм тәүге урында ғына башҡармаған һалдаттарҙың тоҡтары ла, бәйләү өсөн ептәре лә бар ине. Улар был бисараларҙы шулай һөйрәткеләп алып сығып, подъезд төбөнә ҡуйылған грузовикка тейәне. Тегеләре хәлдәренән килгәнсә ҡарышты, тулап ҡырталашты, әммә көстәр тигеҙ түгел ине. Ярым-йорто әҙәмдәр нисек кенә ярһыу булғанда ла, һау-сәләмәт йәштәргә ҡаршы көс була алманы. Берәй сәғәттән арбаһы тотошлайы брезент менән көпләнгән һәм ҡоралы һаҡ ҡуйылған машина төнгө ҡала буйлап вокзалға табан елдерә ине инде.

Ә вокзалда иһә мәхшәр! Ошондай уҡ әллә нисә йөк машинаһынан әллә күпме ғәриптәрҙе һөйрәп төшөрәләр, аҡырышып, ҡысҡырышып поезд вагондарына табан өҫтөрәйҙәр. Күптәре шулай уҡ иҫеректәр. Кемдәрелер тауыш-тынһыҙ ғына тәгәрмәстәрендә тәгәрәй, аҡһаҡлап бара, ҡайһыларын ҡултыҡлап, етәкләп алып киләләр. Һалдаттар бер йөктәрен индереп ҡуялар ҙа, икенселәре артынан йүгереп китәләр. Әйтерһең, ҡайҙалыр алғы һыҙыҡта алыш бара ла, улар яралыларҙы ташый. Шундай "ҡыу-ҡыйғы" менән вагондарҙы тултырҙылар. Аҡ халатлы санитарҙар оҙатыуында инеп урынлашҡан "самауырҙар" ҙа етерлек ине. Самауырҙар улар аяҡһыҙ-ҡулһыҙ булған ҡоро кәүҙәләр. Бары зарлы күҙҙәрен мөлдөрәтеп, башҡаларҙың ҡаңғырышҡанын күҙәтеп кенә ултыра алыусылар. "Танкистар" бер-береһенә ярҙам итеп, көслө ҡулдары менән иптәштәрен тартып алып, вагондарға үрмәләй, һәндерәләргә менеп ултыра. "Танкистар"ы - аяҡһыҙҙар. Ҡулдары менән ерҙән этенеп, арбаларында йөрөгән ғәриптәр. Уларҙы халыҡ шулай атаған. Былары шуға күнгән.

Тейәлешеү тамамланғас, "танкистар" һәм "самауырҙар", сатан-сулаҡтар, һуҡыр-һаңғырауҙар, иҫһеҙ-хәтерһеҙҙәр, контузиялылар менән шығырым тултырылған поезд, ауыр ыңғырашып-уфылдап, ҡуҙғалып китте. Оло бәлә, аһ-зар, ҡот осҡос фажиғә тейәп. Ҡайғы-хәсрәт, бәхетһеҙлек, сараһыҙлыҡ тейәп. Асыу, үпкә, күҙ йәштәре тейәп...

1949-ҙың апрель айы ине был. Бөйөк Еңеүҙең дүртенсе яҙын ҡаршылаған йыл.

Немец илбаҫарҙары сигенә башлағандан һәм үҙебеҙҙең ерҙәр азат ителә барғандан алып Советтар Союзының ҙур ҡалалары ғәрип фронтовиктар менән тула башланы. Улар урамдарҙа, вокзалдарҙа, ашханалар янында хәйер һорашып торҙо. Улар эсеп аунап ятты. Улар төрлө енәйәт эштәре ҡылды. Улар ҡаланың төҫөн, йөҙөн боҙҙо. Боҙмаҫлыҡ та түгел ине, һуғыш ил буйынса 27 миллион ғүмерҙе алып китеүҙән тыш, тере ҡалғандарҙан 46 миллион 250 меңдән ашыу халыҡ төрлөсә ҡазаланып ҡайтҡайны. Шуларҙың 775 меңе - башына, 155 меңе - күҙенә, 3 миллионы ҡулына яраланған. Миллиондан ашыуы ике ҡулһыҙ, 54 меңе тома һуҡыр. Күптәре ғаиләһеҙ, йорт-ерһеҙ ҡалған. Ҡайһылары ҡайҙан булыуын да хәтерләмәй. Кемдәрелер был хәлдә яҡындарына йөк булырға теләмәй, ошолай ҡала урамдарында, вокзалдарҙа көн итеүгә тороп ҡалған. Был халыҡ аяҡ-ҡуллы, һау-сәләмәт йәмғиәттән ситләшеп, үҙҙәренең донъяһын төҙөп алған. Буш фатирҙарға оялаған, шундай урындарҙа күмәкләп йыйылып китәләр, осрашалар, күрешәләр, хәл белешәләр. Һәм, әлбиттә, уларҙың күңелдәре китек. Уларҙың йөрәктәре яралы. Уларҙың йәндәре ауырыу. Улар быны эске менән баҫырға теләй. Улар был ғәҙелһеҙлеккә түҙә алмай, үҫтәрен бер-береһенә төшөрөп, үҙ-ара һуғыша. Улар йәмғиәттең, тыныс совет тормошоноң кәрәкмәгән өлөшөнә әйләнгән. Улар хәҙер инде үҙҙәре килтергән еңеүҙе лә, советтарҙы ла, был донъяны ла һүгә.

1949 йылда Сталиндың 70 йәшлек юбилейын ҡаршылар алдынан, уға бүләк яһау йөҙөнән ил етәкселеге шундай эшләй алмаған, ҡараусыһыҙ, ғаиләһеҙ булған ғәрип фронтовиктарҙы үҙ теләктәре менән һәм мәжбүри рәүештә махсус лагерҙарға - дауалау, аҫрау урындарына ебәрә. Был саралар СССР Министрҙар Советы һәм СССР Юғары Советы Президиумының "Хәйерселек һәм йәмғиәткә ҡаршы булған элементтар менән көрәшеү" тигән ҡарары нигеҙендә ойошторола. Облавалар ҙур ҡалаларҙа бер нисә төн эсендә бара һәм тотолғандар эшелон-эшелон оҙатыла. Еңеүҙең биш йыллыҡ тантаналы байрамына ҡала урамдары ғәриптәрҙән азат ителеп, таҙартылып, иркенәйеп ҡала. Хәҙер инде совет халҡының, ҡунаҡтарҙың күҙен сөйәлләгән, ауыр хәтирәләр уятҡан, хәйерселек, бөлгөнлөк билдәһе булған алам-һалам кейемле, шау миҙаллы сатан-сулаҡ фронтовиктар аҙым һайын юл ҡыйып ҡулын һуҙып тормай. Эш һорап ишектәрҙе ҡаҡмай. Йәшәр мөйөш, пособие дауламай. Бында ҡалғандарына ла оҙатыусыһыҙ урамға сығыу тыйыла. Яңғыҙ йөрөгәндәрҙе лә шундай уҡ яҙмыш көтә. Хәҙер улар юҡ - һиллек, тынлыҡ, бөтөн ерҙә байрам төҫө.

* * *

Арыуы ла, иҫереүе лә етеп, вагон бәүелтеүенә ойоп киткәндән көн яҡтырыуға ғына уянды Рамаҙан. Уянды ла ҡайҙалығын аңлай алмай ятты. Рельстарҙың туҡылдауы яйлап иҫенә килтерҙе. Уларҙы төндә вагонға тейәгәйнеләр бит! Өйрәнелгәнсә, ҡулдарына таянып һикереп килеп торҙо. Беренсе күргәне - тәҙрә аръяғында йәлпелдәп йүгергән тәбиғәтте күҙәтеп моңайып килгән Василий булды. Уныһы иптәшен ишетмәгән-күрмәгәндәй, эйәгенә таянып ултырҙы ла ултырҙы. Ахырҙа, ынтылып төрттө Рамаҙан:

- Вася, ҡайҙа барабыҙ беҙ?

Ерән сәсле ир башын борҙо:

- Валаам утрауына тиҙәр.

- Валлаам? Ҡайҙа ул?

- Карелия яғында, Ладога күле эргәһендә, ти.

- Унда нимә? Лагермы икән? Беҙ әсирҙәрме әллә, Вася?

Дуҫы ауыр һуланы:

- Поездағы санитарҙар әйтеүенсә, элекке монастырҙы фронтовиктар өсөн махсус дауахана иткәндәр. Унда беҙҙе дауалаясаҡтар, тиҙәр...

Рамаҙан ҡыҙа башланы:

- Минең нимәмде дауаларға? Һинең нимәңде дауалап була? Өҙөлгән аяҡтарҙы ҡайҙан табып ҡуймаҡсылар?

Вася күнгәнме, тыныс ине:

- Хәҙер шаулауҙан ни фәтүә? Һуғышта үлмәгәнде, моғайын, инде лә үлмәҫбеҙ. Беҙ түҙмәгән нимә бар, Ромка?..

Ярһыу егет Рамаҙан-Ромка ян-яғына ҡаранып, һорау алырҙай, йоҙроҡ төйнәп әрләп асыуын сығарырҙай берәйһен эҙләне лә, тапмай, кире топчанға ҡоланы һәм әсенеп ике ҡуллап башын ҡыҫты:

- Э-эх! Кисә шул бер шешәне төпләргә лә ҡайтып китергә кәрәк булған беҙгә, Вася! Дядя Коляның өгөтләүенә бирелеп ултырҙыҡ бит, иҫерелгән дә онотолған.

- Бөгөн алмаһалар, иртәгә алырҙар ине барыбер. Урамға сыҡмай ята алмаҫ инек. Күрәһең бит, күпме кешене йыйғандар, әле һин йоҡлағанда башҡа ерҙәрҙән дә тейәнеләр. Так что, киткән баш киткән, дуҫ...

Рамаҙан менән Василий ҡырҡ дүртенсе йыл Мәскәү аҫтындағы бер ҡала госпиталендә танышты. Операциянан һуң иҫенә килеп, аяҡтарын таптырып дауалаған Рамаҙанды бында инде ярты йылдай ятҡан Василий башта ситтән күҙәтте. Йоҙроҡ төйнәп боларған, был халәтенә күнергә теләмәгән ҡарасман егеткә санитаркалар яҡын да бара алманы. Василий, ахырҙа, уның янына үрмәләп менә лә, түшәккә ҡуша ҡыҫып, укол һалдырта башланы. Ҡыҙҙар ике тоҡос кәүҙәнең көрмәкләшкәнен йөрәктәре һыҙлап күҙәтеп тора. Яңыраҡ ҡырҡылғанының, әлбиттә, күпкә бармай, хәле бөтә һәм медсестралар уның теш ҡыҫып ыңғырашыуы, олоу-сыйнауы аҫтында ашығып урауын алыштыралар, яраларын йыуа. Медиктар киткәс, Василий егеттең янында ҡалып ултыра бирә. Үҙенсә йыуатҡан була:

- Һин, дуҫ, улай ҡаршылашма. Ни хәтлем тиҙерәк күнәһең, шулай үҙеңә яҡшыраҡ буласаҡ. Күпме генә тулаһаң да, аяҡтар үҫмәй бит. Мин бына һигеҙ ай ошо хәлдәмен. Ҡалайтаһың - яҙмыш...

Ҡарасман күҙ сиптәре буйлап ҡойолған йәштәренән оялып, ҡарашын ситкә бора.

- Исемең кем?

- Ра... маҙан...

- Рома инде беҙҙеңсә, Роман.

- Мин Василий Егорович. Вася тиергә лә була.

Тегеһенә барыбер, унда исем ҡайғыһы юҡ.

- Ҡайһы яҡтыҡы һин? Ниндәй милләт балаһы?

- Башҡор-тостандан, - Рамаҙанға һөйләшеү ауыр бирелә, яңы ғына ҡуҙғатылған аҫҡы өлөшө мейеһенә үтеп һыҙлай.

- Нисә көн үҙеңсә ҡысҡыраһың шул. Аңлаған әҙәм юҡ.

- Ы-ыһ... Ҡарале... пистолет таба алмайһыңмы?

Вася яурындарын һикертә:

- Пистолет? Нимәгә?

- Һис юғы бысаҡ табып бир әле. Былайтып ятыр хәл юҡ...

Вася өҙә һуҡмай, теше-тешкә теймәй шаҡылдаған, ауыртыныуҙан йөҙө ҡыйшайып ҡатҡан һалдатҡа ҡарай биреп ултыра ла, шыуып төшөп, ҡулдарында һикерә-һикерә сығып юғала. Күп тә үтмәй,

тешенә быяла шешә эләктереп, кире килеп инә.

- Мә, дуҫ, ошоно аҙыраҡ уртла әле. Врачтың үҙенән алдым.

Ауыҙына алып киленгән шешә морононан спирт еҫе бөркөлдө. Рамаҙан нимә икәнен аңлаһа ла һораны:

- Нимә ул?

- Әжәл дарыуы.

Рамаҙан хәленән килгәнсә башын ҡалҡытып, ике-өс уртланы ла, сытырайып йотоп ебәрҙе. Тамағын яндырып төшөп киткән утлы һыу нисә көн аҙыҡ төшмәгән ашҡаҙанын өтөп алды. Тәненең имен ерҙәрен рәхәт кенә йылылыҡ солғаны. Ошо еңеллекте ебәрмәҫкә ҡабаланып, тағы уртланы егет, унан тағы ауыҙын һондо. Өсөнсөнән һуң шешәне алып ҡуйҙы иптәше:

- Етәр, яраларың асылып китер.

Эсеп алғас, һыҙланыуы ла баҫылғандай булды, асығыуы иҫенә төштө, бер аҙ икмәк сәйнәне, йылы сәй эсте. Вася уға кәрәк нәмәләрҙе алып биреп, фронт яңылыҡтарын һөйләп, һаман эргәһендә ураланды.

* * *

Ошонан ары оҙайлы һәм ғазаплы биш ай буйына бер палатала ғүмер кисерҙе ирҙәр. Рамаҙан, егерме дүрте яңы тулып үткән егет, утыҙ туғыҙынсы йыл армияға алынғандан һуғышҡа инеп, инде фашистарҙы өңөнә табан ҡыуып барғанда минаға баҫып күккә осҡандан тере ҡалған. Василий Егорович иһә ҡатыны менән ике балаһын ҡалдырып, яуға алынған да, ҡырҡ икелә үк ғаиләһен немецтар ҡырып, ауылын яндырып киткәндәр тигән хәбәр алған, үҙе танк эсендә янып, аяҡтарын ҡырҡтырған, ҡайтыр урыны ла, һыйыныр туғаны ла булмаған утыҙҙы аша атлаған ир-уҙаман. Ололата сабырыраҡ та, холҡо ла тыныс, ыңғай кеше ул. Минуты менән тоҡанып дөрләп бара торған Рамаҙандың ҡапма-ҡаршыһы. Әммә икеһенең ике төрлө фиғелдә булыуы уларға дуҫлашып китеүгә ҡамасауламаны, киреһенсә, бер-береһен тулыландырғандай инеләр. Икеһенә бер хәсрәт тә, бер ҡайғы.

- Ромка, туғанҡайым, әйҙә ауылыңа хәбәр итәйек. Һинең бит яҡындарың, көткән кешеләрең бар, - тип өгөтләне ураған һайын Рамаҙанды Вася. Тик егет яҡын да килмәне:

- Бындай хәлдә унда ҡайтып күренәһем юҡ!

- Әсәйең бар, апайҙарың. Мәхрүм итмә уларҙы...

- Мин был хәлдә әсәйемә бары тик имгәк кенә буласаҡмын. Ул ҡарт кеше, хәҙер мине ҡараһынмы? Күҙ көйөгө булып ятайыммы? Былай, исмаһам, үлгән - бөткән.

- Их-х, булғандың ҡәҙерен аңламайһың, туған. Минеке кеүек бала-сағаң, ата-әсәң туҙҙырылып бөткән булһа...

- Һиңә лә шулай яҡшыраҡ түгелме ни? Ҡатыныңа һин ошолай кәрәк булыр инеңме, ә? Күнәйек, тиһең бит үҙең, шулай булғас, дөрөҫлөктө лә ҡабул итәйек, Вася: беҙ был көйө берәүгә лә хәжәт түгел!

Бөйөк Еңеүҙе лә шул госпиталдә ҡаршыланы улар. Үҙҙәре кеүек ярым-йортолар менән "Ура" ҡысҡырып, спирт сәкәштереп, йырлашып-илашып. Шунда оҫталар арба әтмәләп бирҙе. Йөрөргә, арбала хәрәкәт итергә өйрәттеләр. Дауаланыу тамаланғас, баш һуҡҡан яҡҡа юлланыусылар төркөмөндә Вася менән сығып киттеләр ҙә, әллә ни төр ер-һыу гиҙеп йөрөп, Сочи ҡалаһына килеп туҡталдылар. Был яҡ йылыраҡ та, туғыраҡ та ине. Эҙләнә торғас, баш терәрлек бер бүлмә табып, береһе итек ямаусы, икенсеһе сумаҙандар йүнәтеүсе булып урынлашып, йәшәп киттеләр. Аяҡтары булмағас, ҡулдары бығаса белмәгән һөнәрҙәрҙе лә өйрәнде. Ул ҡулдар кәрәктә аяҡ та, таяҡ та булды. Ул ҡулдар ашатты ла, эсерҙе лә, яҙылмаған яҙмыштарҙы кистерҙе лә.

**(Дауамы бар).**

*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

# БАШЛАНҒЫС - ФОЛЬКЛОРҘА

**Күптән түгел Үзбәкстандың Термез ҡалаһында сәсәнлек сәнғәтен һаҡлау һәм пропагандалау маҡсатынан ойошторолған Халыҡ-ара баҡши сәнғәте фестивалендә музыкант, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Илһам БАЙБУЛДИН икенсе урын яулап ҡайтҡайны. Илһам Ханнан улы менән ошо сара тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**



**Урта Азия халыҡтарындағы баҡшилыҡ - фольклор һөйләү сәнғәтенә бағышланған был саранан ниндәй тәьҫораттар менән ҡайттығыҙ?**

- Былай ҙурлап, дәүләт кимәлендә үткәрелгән сара тик ыңғай тойғолар уятты. Ҡала архитектураһында ла миллилектәрен һаҡлап ҡала алғандар. Ғөмүмән, мәҙәниәттең һәр йүнәлешендә халыҡсанлыҡ сағыла. Сәсәнлек традициялары ла, бар нескәлегендә булмаһа ла, һаҡланған. Президенттары фестивалде асыу тантанаһында ҡатнашып, кешелек тыуҙырған бар сәнғәттең башланғысы - фольклорҙан, тине. Улай ғына ла түгел, сара Үзбәкстан президенты Шәфҡәт Мирзиёевтың шәхси теләге буйынса ойошторолған. Был да уларҙың һүҙ сәнғәтенә булған мөнәсәбәте тураһында һөйләйҙер. Фестиваль-бәйге ике йылға бер үтәсәк, тип килешеп таралыштылар.

Фестивалгә эпос һөйләүселәр йыйылғайны. 60-ҡа яҡын эпос һөйләүсе булды. Ҡатнашыусыларҙың иң олоһона 90 йәш ине, малайҙар ҙа бар ине. Гран-при Ҡаҙағстандан Улжан Байбусиноваға тапшырылды. ЮНЕСКО ҡанаты аҫтында үткән был фестивалдә бәйге генә түгел, ғилми-ғәмәли конференция ла үтте. 74 дәүләттән барлығы 160 милләт вәкиле килгән, тинеләр. Төрлө милләттәр менән аралашып, үҙең өсөн ниндәйҙер асыштар яһап, үҙең дә тәжрибә менән уртаҡлашып, бер-берендең мәҙәниәте менән танышып ҡайтыу үҙе бер мәртәбә. Шуға ла бындай сараларҙа урын алыу мөһим дә түгел.

**Сығышығыҙҙа башҡа милләттәрҙе ниндәй башҡорт халыҡ эпостары менән таныштырҙығыҙ?**

- Ғәҙәттәгесә, ҡурайҙа "Урал" көйөн уйнап, һуңынан "Урал батыр" эпосына күстем. Уны өҙләп, ә "Аҡһаҡ ҡола" эпосын үҙенең көйө-йыры менән башҡарҙым. Һәр сығыш яһаусыға ярты сәғәт ваҡыт бирелгәйне. Үзбәктәрҙең төп дастаны "Алпамыш", шуға улар күберәк уны һөйләне. Барыһы ла эпос килтермәгәйне, сөнки бар халыҡтар ҙа эпослы түгел. Ҡайһыларҙың сығыштары ябай музыкаль номерҙарҙы хәтерләтте.

Үзбәкстандағы ҡарағалпаҡтар эпосты өҙләп һөйләйҙәр икән, ғөмүмән, үзбәктәрҙең үҙҙәрендә өҙләп һөйләү манераһы бар. Иң ҡыҙығы, уларҙың сығышы гел юғары нотала бара. Урта Азия халыҡтарының көйҙәре лә шулай бит. Хакастар, мәҫәлән, чакан тигән музыка ҡоралына ҡушылып, тыныс ҡына һөйләйҙәр. Ҡырғыҙҙар иһә "Манас"ты музыкаль инструментһыҙ, һөйләп кенә башҡара.

**Был өлкәлә сағыштырыу мөмкинлеге булған сәсән булараҡ, беҙҙәге сәсәнлек сәнғәте кимәле тураһында ниндәй фекерҙәһегеҙ?**

- Иң тәүҙә, беҙҙә сәсән тигән һүҙгә саҡ ҡына аныҡлыҡ индереү кәрәктер. Юғиһә, шиғыр менән һөйләшә белеүсене лә, эпос һөйләүсене лә, фольклор өйрәнеүсене лә сәсән тиҙәр ҙә ҡуялар. Стиленә ҡарап, уларҙы, бәлки, төрлөсә атарғалыр? Боронғо замандағы сәсән менән әлеге үҙҙәрен сәсән тип атаусылар бер тигәнде аңлатмай. Миңә лә сәсән тип һүҙ бирһәләр ҙә, ундай дәрәжәне ҡабул итә алмайым. Сәсән булыу өсөн ныҡлы өлгөрөп етеү, боронғо сәсәнлек традицияларына эйә булыу кәрәк. Мин әле өйрәнсек кенә. Ғөмүмән, сәсәнлекте сәңгелдәктән тәрбиәләү фарыз.

Икенсенән, шул уҡ эпос һөйләүгә килгәндә, беҙҙә уны тасуири шиғыр уҡыған кеүек һөйләйҙәр. Әйтәйек, хакастар, шиғыр һөйләгәндәге кеүек ҡулдарҙы болғап һөйләү эпосҡа хас түгел, тиҙәр. Инструментҡа ҡушылып һөйләүгә иғтибар аҙ. Бер яҡтан, инструмент булһа, һөйләүсегә еңелерәк, икенсе яҡтан, уның тыңлаусыға тәьҫир көсө лә бермә-бер арта.

Шулай уҡ башҡорт халҡында йыр формаһындағы эпостар байтаҡ - "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡуңыр буға" һ.б. Яҙма фонетикала эпосты ошо рәүешле башҡарған өлгө юҡ. Әммә фольклор экспедициялары ваҡытында уларҙы өлөшләтә-өлөшләтә яҙып алғандар. Мәҫәлән, "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосының бер өлөшө "Балҡантау" көйө менән беҙгә таныш. Беҙҙең эпос һөйләүселәргә шуларҙы йыйырға һәм халыҡҡа ҡайтарырға ине. Йыр формаһындағы бик үҙенсәлекле, матур жанр бит ул.

Һуңғы йылдарҙа беҙҙә сәсәнлек традицияларын тергеҙеү буйынса күп саралар үтә, сәсәндәр мәктәптәре барлыҡҡа килә. Балалар араһында "Урал батыр" эпосын һөйләүселәр ярышы бар. Яйлап барыбер йәш быуын араһынан көслө эпос һөйләүселәр үҫеп сығасаҡ, шулай итеп сәсәнлек мәктәбен дә ҡайтара аласаҡбыҙ, тип уйлайым.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ*

# ӘБЙӘЛИЛСӘ...

## Оялыу

Техника үҫеше бөтөн район-ҡалаларҙы яҡынайтып бөттө. Элекке кеүек, поезд менән баш ҡалаға килеп, аҙналап тиерлек ятып, йомош йомошлау юҡ хәҙер. Көнөндә килеп әйләнергә мөмкин. Шулай бер апай таң һарыһынан такси менән Өфөгә елдереп килеп етеп, шундай уҡ етеҙлек менән эштәрен дә эшләгән. Ошо уҡ машина менән кире ҡайтырға һөйләшкәс, водителгә шылтыратҡан. Уныһы: "Елки-палки" кафеһы эргәһендә көтәм", - тип әйтә башлаһа ғына, һүгенә тип уйлап ояла ла, телефонды һүндерә лә ҡуя икән апай. Оҙаҡ шулай аңлаша алмағандар.

Һоҡланыуҙы, аптырауҙы, үкенесте, асыу килеүҙе йәки башҡа берәй көслө хис кисергән мәлдә әйтелә торған был ымлыҡ, ысынлап та, һүгенеү һүҙен алыштырыусы, фәнни итеп әйткәндә, эвфемизм булараҡ барлыҡҡа килгән. Баш ҡалалағы әллә күпме туҡланыу урындарындағы, кибеттәрҙәге сит телдәге атамалар ниндәйҙер оятһыҙ һүҙҙе аңлатмай тип кем әйтер? Баҙар мөнәсәбәттәре заманында оят та ҡаса, тиҙәр бит.

## Өгөрсө

Ҡыяр тип тормайбыҙ беҙ был йәшелсәне, үҙебеҙсә "әгүрсә" тип кенә ебәрәбеҙ. Ни генә тиһәң дә, Мәғнит ҡалаһының беҙҙең телгә йоғонтоһо көслөрәктер, күрәһең. Районның төрлө ерендә был һүҙҙең фонетик варианты үҙгәреп китеүе ихтимал, мәҫәлән, "өгөрсө", "әгөрсә" тигәне лә ҡулланыла.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресендә уҡытыусы әлеге лә баяғы ошо өгөрсөнөң һүрәтенә төртөп күрһәтеп, "Был нимә?" тигән һорау биргән, имеш. Өгөрсө икәнен белгәс, уҡыусылары тап шулай тип яуаплаған да. Ҡапыл ғына уҡытыусы үҙе лә өгөрсөнөң әҙәби телдә нисек аталыуын онотҡан, нисек кенә тырышһа ла, иҫенә төшөрә алмаған. Шунан ни, нимә тиһен, "Дөрөҫ, өгөрсө", тип йөпләп ҡуйған. Өгөрсө генә булһа ла, ошондай һүҙҙәр ҙә башҡорт теленең байлығының бер күрһәткесе булып тора әле ул.

## Һайырсы ҡәйнә

Әбйәлилдең бер ауылында тыуып-үҫкән егет Мәғнит ҡалаһынан кәләш алған. Ата-әсәһе башҡорт булғанға, йәйҙәрен ауылға өләсәһенә ҡайтып йөрөгәнгә күрә, был ҡала ҡыҙы ярайһы ғына башҡортса аңлай һәм һөйләшә икән. Шулай ҙа һәр башҡорт ауылына хас үҙенсәлекле һөйләште килен булғас үҙләштергән. Бер мәл ҡәйнәһенең урамдан инеп килгәнен күреп: "Нимә, ҡәйнәм, һайырсылап ҡайтып киләңме?" - тип тә әйткән, тиҙәр. Аңын-тоңон белмәй, аңламай әйткәнгә көлгән дә ҡуйғандар. Юғиһә, ҡәйнә тиклем ҡәйнәгә йәш килендең "хәйерсе, урам буйлап йөрөп, бушты-бушҡа ауҙарып, хәбәр йыйып ҡайтып киләңме" тип әйтеп тороуы килешмәгән эш булыр ине, айһай. Ҡала ҡыҙы булыуы ғына ҡотҡарған.

**Дилбәр ХӘКИМОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОГА - ЭШ УРЫНЫНДА?

■ "Тиҫкәре калориялы" ризыҡтар бар тигән теория йәшәй. Бындай аҙыҡ-түлекте эшкәртҡән саҡта уларҙың үҙҙәрендәге калорияға ҡарағанда күберәк энергия тотола. Live Science яҙыуынса, был хата фекер. Мәҫәлән, "тиҫкәре калориялы" тип сельдерей, латук, грейпфрут, ҡыяр, томат, ҡарбуз, кәртмәле, брокколи иҫәпләнә. Алабама университеты ғалимдары уларҙың тәьҫирен кеҫәрткеләрҙә тикшереп ҡараған. Улар сельдерей менән туҡланғанда ризыҡтың күпмелер күләме барыбер "плюс"ҡа киткән. Кеҫәрткеләр сельдерейҙе һеңдереү өсөн яҡынса ризыҡтағы калорияларҙың 33%-ын тотонған. Шул уҡ ваҡытта, 24% калория шул көйө ҡалған. Кешеләрҙә, ғалимдарҙың фекеренсә, өҫтә әйтелгән ризыҡтарҙан 19-ҙан 50%-ҡа тиклем калория ҡаласаҡ, ә уларҙы эшкәртеү өсөн 25% китәсәк. Әммә кеше дөрөҫ туҡлана икән, был ризыҡтар ярҙамында ябығырға ла мөмкин. Шуныһы ла бар, түбән калориялы ризыҡ тиҙ асыҡтыра. Әйтәйек, 60 кг ауырлыҡтағы ҡатын-ҡыҙ үҙен 6 сәғәт туҡ тойһон өсөн 3 кг сельдерей ашарға тейеш.

■ Статистика буйынса, һәр 5-се баланың артыҡ ауырлығы бар, ә һәр 12-се бала һимеҙлек теркәлә. Сәбәбе ябай - ашаған ризыҡтары күләме тотонолған энергиянан артығыраҡ. Ғалимдар билдәләүенсә, хәҙерге заман кешеһе аҙ хәрәкәтләнә, физик хеҙмәт юҡ тиерлек. Етмәһә, рационындағы күпселек ризыҡтарҙың калориялары юғары, әммә аҙыҡ ҡиммәте түбән. Май һәм шәкәрҙән тыш файҙалы матдәләре булмаған ризыҡтар - чипсылар, фастфуд, татлы һыуҙарҙы балаһына күптәр тыймай ҙа. Һимеҙлек нәҫелдән дә күсә. Ата-әсәнең береһе генә һимеҙ булһа ла, бала хәүеф төркөмөнә инә. Әммә нәҫел факторын дөрөҫ туҡланып еңеп була. Үҫмерҙәрҙең 50%-ында шулай уҡ туҡланыу йәһәтенән тайпылыштар күҙәтелә. Һимереү депрессия тураһында хәбәр итеүе лә бар.

■ Роспотребнадзор билдәле дарыу исемдәренә оҡшаш атамалы өҫтәмәләрҙе тыйырға тәҡдим итә. Бындай атамалар кешенең аңын буташтыра. Әгәр ҙә БАД-тарға ҡарата бындай тыйыу үҙ көсөнә инһә, фармацевтика баҙарынан 20%-ҡа яҡын бренд юҡҡа сығасаҡ. Был тәҡдим Евразия иҡтисади комиссияһына ебәрелгән дә инде. Миҫал өсөн "Формакс" БАД-ы менән "Форлакс" дарыуы, "Энзим форте" БАД-ы менән "Мезим форте" дарыуҙары һ.б. килтерелә. Шуныһы ла бар, биоөҫтәмә рекламаһында уны дарыу итеп күрһәтеү тыйыла. Әммә уларҙы йыш ҡына дарыуханаларҙа һаталар һәм уларҙың ҡабы ла дарыуҙарҙыҡына оҡшаш. Әлегә был законды боҙоу иҫәпләнмәй.

■ Эшләп йөрөүсе һәр 6-сы хеҙмәткәр стрестың нимә икәнен яҡшы белә, ти ғалимдар. Ә бына йога кешенең психик торошона яҡшы йоғонто яһай һәм стресс кимәлен түбәнәйтә. Шуға ла эш урынында йога менән шөғөлләнеү мөмкинлеге булған ойошмалар хеҙмәткәрҙәр өсөн бик ҡулайлы мөхит иҫәпләнә. Эш биреүселәр хеҙмәткәрҙәренең сәләмәтлеген дә нығыта, эшкә һәләтлелеген дә арттыра. Бығатиклем йога менән шөғөлләнеүҙең йоҡо сифатын, һығылмалылыкты яҡшыртыуы, ҡан баҫымын түбәнәйтеүе тураһында яҙғайныҡ.

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП…



# ТАНК ЯЛАНЫ

**Салауат ауылында тыуып, Ҡужанда ғүмер кисергән Рәхимә инәй Мостаҡова менән әсәйем Йәмилә Хамматова - класташтар. Һуғыш башланған йылдың көҙөндә икеһенә лә 10 йәш тула. Оҙон дүрт йылға һуҙылған аяуһыҙ һуғыштың ҡот осҡос ауырлыҡтарын улар үҙ күҙҙәре менән күргән, йөрәктәре аша үткәргән. Шул осорҙағы ауыл хәлдәрен һөйләүҙәрен үтенһәң, һис инәлтмәй, кисә генә булғандай итеп бәйән итә ине улар.**

- Кис булып, әсәйҙәр эштән ҡайтып күренеү менән, беҙ, бер төркөм ҡыҙҙар, еләк һатырға Магнитҡа ҡарай юлға сығабыҙ. Ҡайһы берәүҙәр еләкле биҙрәләрен ҡулына тотҡан, ҡайһы бер ҡыҙҙар көйәнтәгә элеп, яурынына һалған. Таң атыуға йәйәүләп 30 саҡрымда ятҡан ҡалаға барып етәбеҙ. Еләгебеҙҙе шул тиклем яратып һатып ала торғайны мәрйәләр. Үҙҙәре беҙҙе маҡтап-маҡтап китәләр. Еләк һатҡан аҡсаға икмәк алабыҙ ҙа, тағы йәйәүләп ҡайтырға сығабыҙ, - тип һөйләй Рәхимә инәй.

- Һеҙҙең менән әсәйегеҙ йә башҡа олораҡ ҡатын булғандыр ул? - тип һорайым.

- Ҡайҙан. Улар көнө-төнө эштә, нурмы тултыра, - тип яуаплайҙар.

- Үҙегеҙ генә ҡурҡмай торғайнығыҙмы һуң?

- Ҡурҡыуҙы уйламай ҙа инек. Яман уйлы кешеләр бер ҡасан да осраманы былай юлыбыҙҙа.

- Шулай еләк, һөт һатырға йөрөгәндә Таштимер тирәһендә беҙгә йыш ҡына нимес әсирҙәре тап була торғайны. Уларҙы уңдан да, һулдан да мылтыҡлы конвой оҙатып бара. Ниместәрҙең нәҙек, оҙон булыуҙары әле лә күҙ алдымда. Аяҡтарындағы ағас табанлы ҡаталары ҡаҡ юлда таҡ-тоҡ килә, буш котелоктары шалтырай. Беҙгә, оҙон ҡара сәсле башҡорт ҡыҙҙарына, күпкүк күҙҙәре менән текләп ҡарай торғайнылар. Былар ниндәй халыҡтан икән, тип тексәйгәндәрҙер инде, - тип хәтерләй ул ваҡыттарҙы әсәйем. - Әсирҙәрҙе гел генә Ҡыркты тауы яғына алып киткәндәрен күрә торғайныҡ.

- Ауылымдан төньяҡтараҡ, Ҡырктыға яҡын, Арғы Уһаҡкош, Бирге Уһаҡкош тигән ике һаҙ булды. Беҙ, эреле-ваҡлы бала-саға йыйылып, шул яҡҡа йыуаға, ҡымыҙлыҡҡа барабыҙ. Бер мәл, 1943-1944 йылдар тирәһе булғандыр, шул һаҙҙарға яҡын урында, ҙур танк хасил булды. Тәүҙә ҡурҡтыҡ. Аҙағыраҡ, өйрәнә төшкәс, йыуа, ҡымыҙлыҡ ашап туйбыҙ ҙа, тотонабыҙ теге танк эргәһендә уйнарға. Баҫтырышабыҙ, танктың өҫтөнә менеп, һикереп төшәбеҙ, көбөгә буйлап шыуышабыҙ. "Беҙҙекеләр", "ниместәр" булып уйнайыҡ тиһәк, беребеҙҙең дә нимес булғыһы килмәй торғайны. Был мәлдәрҙә инде һуғыш уйындары ла туктатылған, нимес һалдаттарын да ҡайҙалыр алып киткәйнеләр, - тип һөйләй Рәхимә инәй.

Ауыр һуғыш барған яу ҡырҙарынан меңдәрсә километр алыҫлыҡта ятҡан башҡорт ауылына нисек килеп эләккән һуң немец танкыһы? Ҡасандан бирле тынғы бирмәгән ошо һорауыма аныҡыраҡ яуап алыу ниәте менән Салауат ауылының аҡһаҡалы Мөждәбә ағай Сәйфетдиновҡа мөрәжәғәт иттем:

- Нисек килде, ағай, Салауат ауылына немец танкыһы, үҙе йөрөпмө?

- Юҡ, үҙе йөрөп килмәне ул. "Тигр"ҙы беҙҙең совет танкыһы һөйрәтеп алып килде. Саң борҡотоп килгән танктар ауылды үтеп, Ҡыркты аҫтына йүнәлде. Немец танкыһын ауылдан алыҫ булмаған бер ерҙә ултыртып ҡуйҙылар. Аҙаҡ белдек - "Тигр" учениелар өсөн кәрәк булған. Уны "сәп" итеп файҙаланғандар.

Ауырып тороуына ҡарамаҫтан, аҡһаҡал Ватан һуғышына бәйле тарихты әҙмә-эҙлекле итеп һөйләп бирҙе.

- Теге ағас табанлы сабаталары менән таҡ-тоҡ баҫып килгән әсирҙәр шул учениеларҙа ҡатнашҡан. Уларҙы ауылда фатирға һалған осраҡтары ла булды. Өйөнә ҡарап, кемгә берәү, кемгә икәүөсәүҙе.

Мөждәбә ағай һөйләй, мин ара-тирә һорауҙар ҡыҫтырып, уны иғтибар менән тыңлайым.

- Учениелар туҡтатылғас, әсирҙәрҙән ағас ҡырҡтырып, таш сығартып һәм башҡа эштәрҙә алып йөрөнөләр. Бер мәл улар күренмәй башланы. Ниместәрҙе Үҙәнбаш яғына алып киткәндәр, тип һөйләнеләр. Ә ҡанлы һуғыш иҫтәлеге булған нимес танкыһы Ҡыркты аҫтында ҡалды. Моторының майы күп була икән. Уны колхоздың кәрәк-ярағына алып бөттөләр.

Миңә лә ул танкты бер тапҡыр ғына күрергә яҙҙы. Салауат мәктәбендә уҡығанда уҡытыусыбыҙ шунда экскурсияға алып барғайны, тип хәтерләй әсәйем.

- 1953 йылдар тирәһе булғандыр. Танкты Магнит ҡалаһынан килеп, "скрап"ҡа алып киттеләр, - тип тамамланы хикәйәтен күпте күргән уҙаман. Быны Рәхимә инәй ҙә дөрөҫләй.

Шул замандарҙан алып был урын "танк яланы" тип йөрөтөлә. Һуғыш йылдарында ул ерҙәрҙә һөрөп, иген сәсһәләр, хәҙер көтөүлек булып хеҙмәт итә.

**Фәрзәнә ХАММАТОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Ишкилде ауылы.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ҒОРУРЛАНАБЫҘ ҘА УЛ…

**Ошо көндәрҙә Халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар көнө билдәләп үтелде. Ошо айҡанлы Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейында күренекле башҡорт яҙыусыларының һәйкәлдәре һәм бюстарына арналған күргәҙмә ойошторолдо.**

Ошо сараны әҙерләгән мәлдә башҡорт һүҙ оҫталарының һәйкәлдәре һәм бюстары бик үк күп булмауы ла, башҡа проблемалар ҙа асыҡланды. Иң мөһиме һәм иң әсендергәне - был проблема тик ҡәләм оҫталарына арналған һәйкәлдәргә генә ҡағылмай. Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 74 йыллығын ҡаршылайбыҙ. Баш ҡалабыҙ Өфөлә был тарихи датаға, ғөмүмән, Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандарына арналған иҫтәлекле урындар күпме? Республикаға ағылған туристарға, районҙарҙан экскурсияға килгән мәктәп уҡыусыларына халҡыбыҙҙың ҡаһарманлығын һәйкәлдәр аша сағылдырған ниндәй урындар менән таныштыра алабыҙ? Баҡтиһәң, артыҡ маҡтана ла алмайбыҙ икән. Әйтәйек, Еңеү паркындағы Александр Матросов (Шакирйән Мөхәмәтйәнов) менән Миңлеғәли Ғөбәйҙуллинға ҡуйылған һәйкәлде, постаментҡа урынлаштырылған хәрби техниканы, Миңлеғәле Шайморатов менән Таһир Күсимов бюсын, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың ҡәберен, Тыл хеҙмәтсәндәренә ҡуйылған һәйкәлде һәм Хәрби-дан музейын үҙ эсенә алған комплекстан, шулай уҡ Аҡ йорт янындағы Ленин паркында урынлашҡан А. Матросов һәйкәленән башҡа урынды атап та булмай. Бындай комплекстың булыуы, әлбиттә, һәйбәт, әммә унда тарихыбыҙҙың бер өлөшө генә. Заманында Европаны аяҡҡа баҫтырған атлы ғәскәр данын Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ойошторолған 112-се кавалерия дивизияһы ла лайыҡлы яҡлай: шул шанлы йылдарҙа 78 Герой биргән бер генә хәрби берләшмә лә юҡ! Шуға күрә кавдивизия үҙе үк мөһәбәт һәйкәлгә лайыҡ түгелме ни? Йәки 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында, яу яландарында һуғышсыларҙың тоғро дуҫы, ярҙамсыһы булып, 1946 йылда Башҡортостанға кире ҡайтарылған Ҡарлуғас ҡушаматлы ат?

Шулай уҡ республикаһың баш ҡалаһында 28 башҡорт полкы ҡатнашҡан 1812 йылғы Ватан һуғышы азаматтары иҫтәлегенә ҡуйылған бер генә һәйкәлдең булмауы ла уйға һалмай ҡалмай. Ә бит һәйкәлдәр, әҙип әйтмешләй, тереләр өсөн ҡуйыла. Улар йәш быуында илһөйәрлек, Ватанға бирелгәнлек рухында тәрбиәләүҙә баһалап бөткөһөҙ ҙур роль уйнай. Балаларға тарихи үткәнебеҙ тураһында һөйләнып та, ғорурланып та, рухланып та, күҙҙәребеҙгә йәш алып та һөйләйбеҙ, ә ни өсөн һәйкәлдәре юҡлығын нисек аңлатырбыҙ? Шуға күрә республика етәкселеге, Мәҙәниәт министрлығы, шулай уҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты был төңгәлдә маҡсатҡа ярашлы эш алып барырға тейеш, тип иҫәпләйем.

**Ғәҙилә БҮЛӘКОВА,**
**М. Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы мөдире.**

✓ *Мансур тиҙ генә атынан төштө лә, ҡыҙып китеп, аяғөҫтө килеш немецтәргә ҡаршы автоматы менән бер туҡтауһыҙ ут һиптерә башланы. "Сафин, Сафин, туҡта!" тип әйтеп ҡарайым, юҡ, туҡтамай.*



ХӘТЕРКИТАП

# БОЛАН ТИРЕҺЕ ЛӘ АШ БУЛДЫ...

**Мин 1937 йылдың 15 июлендә Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында тыуғанмын. Атайым Сафин Мансур Миңлеғәле улы Иҫке Собханғолда урман хужалығында ат ҡараусы, әсәйем Шәмсүрә Мәхмүтдин ҡыҙы шунда йыйыштырыусы булып эшләгән. Һуңыраҡ атайым Байғаҙыға үҙенең атай нигеҙенә күсеп ҡайтырға ниәт итә. Ул һуғышҡа киткәс, беҙ әсәйем ҡулында 3 бала тороп ҡалдыҡ: мин, ҡустыларым Хәсән һәм Урал. Атайымдың әсәһе Шәмсениса өләсәйем беҙҙе бик ҡурсалай торғайны. Сөнки әсәйем, барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙар кеүек, хужалыҡ эшенә егелде. Уның төрлө эштәрҙә эшләгәне хәтерҙә: ураҡ та урҙы, көлтә лә бәйләне, бесән дә сапты, мал фельдшеры, хужалыҡ рәйесе, бригадир, хатта лесник булып эшләне.**

...Беҙҙең бәләкәс кенә булһа ла ҡапма-ҡаршы ике өйөбөҙ булды. Соланыбыҙҙың башы юҡ ине, иҙәне лә яртылаш ҡына һалынған. Өйҙә иң өлкәне мин булғас, эштең иң әсеһе миңә эләкте. Утын булмағанда Хәсән ҡустым менән Ҡаршытауҙан сытыр, суғыртмаҡ күтәреп, ҡайһы саҡта һөйрәп алып ҡайта торғайныҡ. Ҡыш үтеп, ер асыла башлағас, кешеләрҙең картуф еренән серегән картуф эҙләп алып, өйҙәге тимер мейесебеҙ өҫтөнә һалып бешереп ашаған саҡтар хәтерҙә. Ашарға өйҙә бер нәмә лә булмағас, картуфлыҡтан кишергә оҡшаған ҡуянтубыҡ, урмандан көпшә, һарына, әттек, Ҡаншал тауынан йыуа, бүтәгә эҙләп алып ҡайтабыҙ. Әсәйемә сутыйлап иген утарға бирәләр. Хәсән ҡустым менән беҙ ҙә барабыҙ ҙа, мин әсәйгә ярҙам иткән булам, ҡустымдан көпшә, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ йыйҙырам. Йолҡҡан ҡыйҙы күлдәгемдең итәгенә һалып ситкә сығарам. Ҡайтҡанда йылға буйынан сытыр, ауған ағастарҙың серемәгән ерен йөкләп алып ҡайтабыҙ. Иң үҙәккә үткәргәне билсән булды. Әсәйем беҙҙе игендең ҡыйын йолҡорға ҡуша ла, үҙе икенсе эшкә китә. Ул заманда аттар ҡорсаңғылап бөттө, йонсоу булды. Бүре талаған аттарҙы, ауырыу аттарҙы йыуа торғайнылар. Ҡорсаңғылаған аттарҙы газокамераға индереп йыуҙылар.

...Беҙҙең бер ҡыҙыл һыйырыбыҙ булды. Бесән бөткәс, әсәйем ҡайҙандыр бер күбәләй генә бесән алып ҡайтты. Өләсәйем шуны көн һайын услап ҡына ашата торғайны. Беҙгә ҡайҙандыр бер ағай дөйә менеп килгәйне. Теге дөйә бейек булғас, беҙҙең тәпәшәк кенә кәртә башынан һыйырға тигән бесәнде ашап бөткән дә ҡуйған. Балалар, хатта һуғыштан ҡайтҡан ағайҙар һәм инәйҙәр теге дөйәне күрергә киләләр. Үҙебеҙҙең кәртәлә торһа ла, беҙ сыға алмайбыҙ, сөнки аяҡҡа кейергә кейем юҡ. Шулай ҙа юлын таптыҡ - тәҙрәнең алама ғына быялаһын тап менән ҡырып, тын менән өрөп иреттек тә, күҙҙәй генә шул тишектән өсәүебеҙ алмашлап дөйәгә ҡарап аптырайбыҙ. Уның һыйырҙың бесәнен ашап торғаны башыбыҙға барып етмәй. Әсәйем шунда илап килеп инде.

...Әсәйем Нәзирә тигән инәй менән дуҫ булды. Ул инәй колхоз аттарына бесән ташый торғайны. Ул беҙҙең тәңгәлдән, һыйыр эйәреп ашай-ашай барһын тип, юрый яйлап ҡына үтә. Ат һарайына тиклем һыйыр шулай теге бесәнде ашап бара. Ат аҙбары эргәһендә лә Нәзирә инәй йәшереп кенә һыйырға әҙерәк бесән ҡалдыра. Кирәев Әхмәт ағай ҙа колхоз атын ҡараны, ул да һыйырыбыҙға йәшереп бесән ташлағыланы. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәшел үләнгә баҫҡас-иткәс кенә һыйырыбыҙ күтәртеп үлеп ҡуйҙы. Кәртәлә бер генә һарыҡ ҡалғайны, уны ла урлап һуйып ашанылар. Кем икәнен белһәк тә, ҡурҡып, өндәшмәнек, өләсәйем, әсәйем өсәүләп иланыҡ.

...Ғәйзулла ағай бригадир сағында өләсәйемде Һәүәнәк тамағындағы ырҙынға иген елгәрергә ебәрҙе. Йәш булғас, иген яна. Шуға уны туҡтауһыҙ болғап торорға кәрәк. Өләсәйем оло йәштә булһа ла тыңланы. Мине лә иптәшкә үҙе менән алды. Ғәйзулла ағай ат менән килеп, өләсәйемдең таш тирмәнен кешегә күрһәтмәй генә түшәккә төрөп һалып алды. Әсәйем ике ҡустым менән өйҙә ҡалдылар. Шул иген елгәргәндә минең тамағым туйып ҡалды. Өләсәй ҡурмас ҡыҙҙырып бирә. Аҙаҡтан һыу эсәм. Теге таш тирмәндә игенде тартып, икмәк бешерҙе. Ҡайтҡас, иптәш ҡыҙҙар, һин ҡайҙа йөрөнөң, һимереп киткәнһең, тинеләр. Мин, бер ҡатлыланып, ырҙында өләсәйем менән иген киптерешеп йөрөнөм, тигән булдым.

...Аслыҡ көсәйгәндән-көсәйә генә барҙы. Бер ваҡыт урамда дуҫтар менән йөрөп ятҡанда самолет ауыл өҫтөндә өйөрөлөп йөрөнө лә, ауылдың ҡап уртаһына бер яғына ҡом, икенсе яғына ҡыҙыл сепрәк бәйләнгән әйбер төшөрөп китте. Беҙ уны тиҙ генә алып, кәнсәгә алып барып бирҙек һәм Абдулхаҡ Иҫәнбаев ағайҙан уҡыттыҡ. Унда һәр өйҙәге кеше башына ҡарап өс бармаҡлы бирсәткә, ойоҡ, талҡан, ҡорот, киптерелгән картуф йыйырға тип яҙылғайны. Апайҙар һәм инәйҙәр аптырашып ҡалды. Тағы ла самолет килһә, был юлы нимә һорар икән, тип көтөп йөрөй торғайныҡ. Ҡайһы саҡта фәлән-фәлән урында урман яна, һүндерегеҙ, тигән хәбәр була ине самолет ташлаған төргәктә. Бер йылы самолет төшөрөп киткән хатта ил башлығы Иосиф Виссарионович Сталиндың үлеп ҡалыуы тураһында хәбәр ителде...

...Минең атайым ауылдашыбыҙ Ярулла ағай Баязитов менән бергә һуғышҡа киткән булған. Әлкә ҡасабаһында бергәләп ат уйнатып бер ай ятҡандар. Һуғышҡа ла бергә ингәндәр. Бер ваҡыт әсәйем кер йыуып торғанда күрше Хәбирә апай килеп инде лә, "Шәмсүрә еңгә, Ярулла ағай аяғын ҡалдырып, һуғыштан ҡайтҡан, әйҙә, барып күрәйек", тине. Әсәйем тиҙ генә ҡулын һөртә һалып, башындағы яулығын рәтләп бәйләне лә ишеккә табан атланы. Күп тә үтмәй, улар икәүләп илашып килеп инделәр. Әсәйем өрлөккә өс мөйөшлө хат һәм документтар ҡыҫтырҙы. Ул атайҙың документтары һәм хаты булған икән. Ул арала урманға һарына, әттек, көпшә эҙләп киткән өләсәйем ҡайтып инде. Әсәйем һөйләп биргәс, ул да яулығы менән күҙҙәрен һөртә-һөртә, урындыҡҡа ятып иланы. Ғаилә ҡара ҡайғыла ҡалды.

...Ярулла ағайға барып, атай тураһында тағы ла һораштыҡ. "Мансурҙы яу яланында бейек арыш араһында ҡалдырып киттем. Немецтәр алдан да, арттан да етеп киләләр ине. Иң тәүҙә аты яраланды. Мансур тиҙ генә атынан төштө лә, ҡыҙып китеп, аяғөҫтө килеш немецтәргә ҡаршы автоматы менән бер туҡтауһыҙ ут һиптерә башланы. "Сафин, Сафин, туҡта!" тип әйтеп ҡарайым, юҡ, туҡтамай. Ҡысҡыра-ҡысҡыра артынан барам. Туҡтамай, ҡыҙып, ут һиптерә, немецтәрҙе ҡыра ғына. Унан арыш араһына йығылды. Күкрәгенән урғылып аҡҡан ҡаны арыш башаҡтарына һибелде. Мин тиҙ генә күкрәген ҡулым менән ҡаплап, өҫтөнә үҙемдең пилотканы һалдым. Үҙенең пилоткаһы менән битен ҡапланым да, кеҫәһенән документын алып, арыш башаҡтарын йолҡоп алып, өҫтөнә ҡаплаған булдым. Автоматының һабы менән соҡоп тупраҡ та һипкеләнем. Унан алға ҡарай йүгерҙем. Күп тә тормай, шул уҡ яланда атымды, һыңар аяғымды ла ҡалдырҙым. Ярай әле, арттан килгән дуҫтар күреп ҡалып, мине госпиталгә алып киткәндәр. Әгәр ҙә һалдаттар күрмәһәләр, мин дә шул яу яланында ятып ҡалыр инем. Бына шул рәүешле һуғыш ҡорбаны булды дуҫым Мансур Сафин. Икебеҙҙең дә атыбыҙ шул яланда ҡалды", - тип һөйләне Баязитов Ярулла ағай. Тыңлап ултырған өләсәйем һығылып-һығылып иланы. Атайым Ярулла ағайға, әгәр ҙә мин үлһәм, минең ғаиләмде, әсәйемде, өс баламды ҡаҡмаҫһың, тигән. Улар шулай бер-береһенә һүҙ бирешкән булғандар...

...Мин дә аруҡ ҙурайҙым. Бер көндө кәнсәгә саҡырҙылар. Әсәйем: "Ҡыҙым, Фәйзулла бабайындың звеноһына күбә тарттырырға йөрөһәң, әҙ булһа ла көндәлек һуғырҙар ине", - тине. Ризалаштым. Фәйзулла бабай Иҫәнбаев иртүк тороп ут яғып, салғы сүкей башлай. Уның салғы сүкегән тауышына рәхәтләнеп йоҡлайым. Миңә бәләкәс салғы бирҙеләр. Салғым йә ҡаҙала, йә үләнде һыпыра һуғам. Саба белмәгәс, иң артта йөрөйөм. Яйлап сабырға өйрәндем шулай ҙа. Әсәй ебәргән икмәк өшә һымаҡ ҡына, ашаһаң, тиҙ генә бөтөп бара, ашамаһаң, хәл юҡ. Тегеләр күрмәгән саҡта көпшә өҙә һалып ашайым. Бер көндө минең икмәгем бөттө. Кискеһен: "Бар, Ләлә, ошо ҡола бейәне мен дә әсәйеңдән тиҙ генә икмәк бешертеп алып кил", - тип ҡайтарҙылар. Әсәйем мине күргәс аптырап китте. Икмәге юҡ ине, күрше Маһира инәйемдән алып, бер моҡсайға һалып бирҙе. Мин әсегән эркет кеүек ойотҡанды аяғөҫтө генә эстем дә теге икмәкте эйәргә бәйләп, кире юлға сыҡтым. Ҡараңғы төшкәнсе барып өлгөрөргә кәрәк. Килеп тороп ҡурҡыта. Ут яҡҡандар ҙа мине көтөп һөйләшеп ултыралар икән. Аттан төшкәс, эйәрҙән икмәкте сисеп алайым, тиһәм, икмәк юҡ. Әсәйем иҫке моҡсайға һалған да, йыртылып, төшөп ҡалған икән. Мин яҡтыла барып етер өсөн атымды йән-фарман ҡыуғанмын инде. Фәйзулла бабай, минең икмәккә өлөш булаһың инде, тип көйөп ҡуйҙы. Мин ҡыуыш эсендә юрған аҫтына инеп һығылып-һығылып иланым. Кире эҙләп китер инем, ҡараңғы. Шунан һуң мине ҡайтарманылар. Күбә тарттырһам, йә ағасҡа, йә ҡырмыҫҡа иләүенә һуҡтырып, күбәне ауҙарам да ҡуям. Фәйзулла бабай, һуҡранып, күбәне яңынан яһай. Шулай итеп, Фәйзулла бабай мине эшкә өйрәтте...

**Ләлә ЗАМАНОВА.**
**Бөрйән районы**
**Иҫке Собханғол ауылы.**
**(Дауамы бар).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Күҙҙәргә көсөргәнеш тә шундай һөҙөмтә бирә. Уҡыу өсөн шарттарҙы ҡатмарлаштырып, һуңынан ҡапыл еңеләйтеп, беҙ күҙҙәрҙе көсөргәнештән арындырырға ярҙам итәбеҙ.

Ваҡ хәрефтәрҙе уҡыу күрәгарашлыҡ ваҡытында яҡшы. Бигерәк тә был осраҡта уҡыу өсөн тәғәйенләнгән тексттың күҙҙән алыҫта булыуы һөҙөмтәле.

## Ятҡан килеш нисек дөрөҫ уҡырға

Беҙҙе һәр саҡ ятып уҡыуҙан тыялар, шул уҡ ваҡытта табиптар ултырып уҡыуҙың да зыянлы икәнлеге тураһында бер ни әйтмәй. Янбашта хәрәкәт тоткарлана, геморрой, умыртҡа һөйәгендә проблемалар һәм башҡа сирҙәр тап беҙ бер төрлө ултырыуҙан барлыҡҡа килә. Урта быуат ғалимдарының һүрәттәрен ҡарағыҙ, улар аяғөҫтө, махсус ауыш өҫтәл артында эшләгән. Совет мәктәптәрендә ҡайһы бер дөйөм белем биреү мәктәптәрендә балалар дәрес ваҡытында тәжрибә рәүешендә шулай уҡ парта-конторкалар артында баҫып торған. Әммә был тәжрибә оҙаҡҡа бармаған.

Әлбиттә, беҙ аяғөҫтө уҡытайыҡ, тимәйбеҙ, ләкин уҡыған ваҡытта кәүҙә торошон йыш - 10-15 минут һайын алмаштырырға кәрәк. Хатта уҡыған ваҡытта бер аҙ баҫып йәки ятып алһағыҙ ҙа насар түгел. Бының күҙҙәргә генә түгел, хатта тотош организмға файҙаһы ҙур.

Ятып уҡығанда күҙҙәр ғәҙәти булмаған, ҡатмарлы шарттарҙа көсөргәнеш ала, шуға күрә билдәле шарттарҙы үтәгәндә был көсөргәнеште күнекмә тип иҫәпләргә мөмкин.

Вертикаль торошта тейешле яҡтылыҡ булғанда, йәғни яҡтылыҡ арттан һул ҡулбаш аша төшкәндә, һеҙ еңел генә уҡый алаҫаҡһығыҙ. Әммә ятып уҡығанда тәүге минутта уҡ уңайһыҙлыҡ тояһығыҙ. Ни өсөн шулай һуң? Сөнки ятып уҡығанда текст менән күҙ араһындағы ара ҡыҫҡара. Бынан тыш, китапты үҙәктә генә тотоп булмай, уҡыу мөйөшө үҙгәрә. Әгәр ятҡан килеш, күҙҙәрҙе көсөргәнештән арындырмай оҙаҡ уҡығанда, уларҙың осҡорлоғо, ысынлап та, түбәнәйеүе мөмкин. Шулай уҡ ятып уҡығанда күкрәк ситлеге ҡыҫыла һәм тын алыу боҙола. Ҡан әйләнеше ауырлаша, баш мейеһендә тоткарлыҡтар булыу мөмкин. Ятып уҡығанда елкәлә ауыртыу барлыҡҡа килеү хәүефләндерергә тейеш. Әгәр башығыҙҙа ауыртыу тойһағыҙ, тән торошон үҙгәртегеҙ, башта ултырығыҙ, һуңынан тороп, йөрөп алығыҙ.

Әгәр сама тигәнде онотмаһағыҙ, был кире күренештәрҙең барыһын да булдырмаҫҡа мөмкин. Әгәр бик ятып уҡығығыҙ килә икән, йоҡлар алдынан 10-15 минут уҡыу зыян түгел. Бынан тыш, йоҡлар алдынан оҙайлы булмаған уҡыу йоҡоһоҙлоҡтан бер сара ла булып тора - күҙҙәрҙең бер үк хәрәкәте нервы системаһын тынысландыра һәм мейене йоҡоға әҙерләй. Әлбиттә, ниндәйҙер тынысландырыусы әҫәр уҡығанда.

Үҙен ятҡан килеш уҡып та һис бер уңайһыҙлыҡ кисермәҫкә күнектереүселәр, ғәҙәти шарттарҙа ла ҡыҫҡа дистанцияға йүгергән марафонсы кеүек, үҙен яҡшы тоясаҡ.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЕҘ БЕЛГӘН ГЕРОЙҘАР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**17-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Әмиров. Хызыров. Йоа. Акула. Элмәк. Гималай. Ыштан. Әлшәй. Итегем. Тромб. Көл. Тарма. Даға. Әтәс. Ғаләм. Наза. Ерталар. Нотоҡ. Мәрмәр. Толстой.

**Вертикаль буйынса:** Солтанов. Айытҡолов. Тәрбиәсе. Хыял. Рәхмәт. Агния. Музей. Касса. Лакмус. Амангилдина. Арҡар. Взвод. Әй. Эйә. Таған. Лупа. Әрем. Көй. Аймаҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**7 май "Эҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миннуллин), мелодрама 12+
**8 май "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Буләков), трагикомедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 май "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. 12.00, 14.00 0+
**6 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. 12.00, 19.00 6+
**7 май "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), комедия. 12.00, 19.00 12+
**8 май "Вспомним всех поименно"**, музыкально-поэтическая композиция. 12.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4 май "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). 12.00, 14.00 0+
**5 май "Три поросенка"** (С. Михалков). 12.00, 14.00 0+
**10 май "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+

ӘЙТКӘНДӘЙ...

## СӘСӘН БУЛҺАҢ...

**Социаль селтәрҙәрҙә "Салауат әйтеше" бәйгеһе башланды. Ул халҡыбыҙҙың милли геройы Салауат Юлаевҡа арнала.** Бәйге 20 марттан 1 июнгә тиклем дауам итәсәк. Унда героик эпостарҙы башҡарыусылар, шулай уҡ халыҡ ижадының эпос, ҡобайыр, иртәк, бәйет, йыр һ.б. жанрҙарҙарында ижад итеүселәр ҡатнаша ала. Йәш буйынса сикләүҙәр юҡ. Олатай, өләсәйҙәре ижады менән сығыш яһаусылар айырым номинацияла билдәләнәсәк. Иң ҡыҙыҡлы эштәр "Шоңҡар" журналында баҫылып сығасаҡ. Бәйге vk.com/public179842022 төркөмөндә ике этапта үтә. Марттан майға тиклем ҡатнашыусылар тәҡдим ителгән темалар буйынса ижад өлгөләрен күрһәтәсәк. Июндә Салауат йыйыны фольклор байрамында бәйгенең йомғаҡлау өлөшө уҙасаҡ. Еңеүселәр тап ошо йыйында билдәләнәсәк. Сараны Республика халыҡ ижады үҙәге, "Шоңҡар" республика йәштәр журналы, Башҡортостандың сәсәндәр үҙәге ойоштора.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



**"Рамаҙан айы кешеләргә тоғро юл күрһәтеүсе, ялғандан хәҡиҡәтте айыра торған дәлилдәр менән Ҡөрьән индерелә башлаған айҙыр. Шуға күрә ошо айға килеп ирешкәндәр ураҙа тотһон", - тиелгән "Әл-Бәҡара" (Һыйыр) сүрәһенең 185-се аятында. Быйыл мосолмандар 6-сы майҙан алып ураҙа тота башлаясаҡ.**

## УРАҘА АЙЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

Рамаҙан айының башынан алып ахырынаса байрам. Мосолмандар бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөп, Ҡөрьән уҡып, зыярат ҡылып, изге ғәмәл эшләп үткәрергә тейеш был айҙы. Рамаҙандың 21-се көнө - Фәтех Мәккә көнө, 21-29-сы көнө - Ҡәҙер кисе булыу ихтималы булған кистәр.

Аллаһ илсеһенең вәғәҙәләрендә ураҙа айының һәм ауыҙ астырыуҙың әһәмиәте тураһында әйтелгән. "Аллаһы Тәғәлә был айҙа ураҙа тотоуҙы фарыҙ итте һәм өҫтәмә ғибәҙәттәр ҡылыу айы итеп билдәләне. Берәү өҫтәмә - нәфел ғәмәлде ҡылһа, ул барлыҡ фарыҙ ғәмәлен ҡылған кеүек булыр. Был сабырлыҡ айылыр, ә уның әжере - йәннәттер. Был айҙа мөьминдәрҙең ризыҡтары киңдер: берәү был айҙа ураҙа тотоусыға ауыҙ астырһа - муйынын тамуҡ сылбырынан азат итер һәм гонаһтары ярлыҡаныр", - тигән Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм. "Беҙҙең ураҙа тотоусыға ауыҙ астырырлыҡ тәғәмебеҙ булмаһа?" - тигән һорауға Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм: "Хатта бер хөрмә йәиһә бер йотом һыу, йә һөт менән булһа ла ауыҙ астырһа - әлеге кешегә әжер-сауаптар яуыр", - тип яуап биргән.

Был айҙың беренсе өлөшө рәхмәт көндәре, урталағы өлөшө - ғәфү-мәғфирәт һәм ярлыҡау көндәре, аҙаҡҡы өлөшө - уттан ҡотолоу көндәре. Рамаҙан айының һәр кисендә Аллаһы Тәғәлә өс тапҡыр әйтер ти: "Минән берәй нәмә һораусы бармы? Теләгәнен бирермен. Миңә тәүбә итеүсе бармы? Тәүбәһен ҡабул ҡылырмын. Минән гонаһтарының ярлыҡауын үтенеүсе бармы? Гонаһтарын ярлыҡармын!" Ауыҙ асыу ваҡытында Ул тамуҡ ғазабынан, гонаһ эйәләрен ғазаптан азат итер. Был айҙа Аллаһы Тәғәлә йәннәт ишектәрен астырып, тамуҡ ишектәрен сылбыр менән уратып, бикләп ҡуйыр. Ләкин боҙоҡ, ялған һөйләп, яуызлыҡтар ҡылып йөрөүселәрҙең ас тороуҙарында күп хикмәт табылмаҫ. Ураҙа тотоу менән кеше үҙенең зәғифлеген һәм мохтажлыҡын таныярға тейеш. Шуның менән уның ғорурлығы, тәкәбберлеге кисәлә. Ураҙа тотоу мосолмандарҙың ихтыяр көсөн нығыта. Тормоштағы ауыр һынауҙар алдында уға әҙерлек булып тора. Сөнки ураҙа башҡа бөтә хөкөмдәр кеүек нәфсенең тулыһынса пакланыуына алып барыусы алымдарҙың береһе һанала. Раббыының ҡушҡанына буйһоноп, хәләл нәмәләрҙән баш тартҡан кешенең харам нәмәләрҙән баш тартмауы мөмкин булмаҫ. Үҙенең ихтыяр көсөн ураҙа тоторға буйһондорған кеше башҡа һынауҙар алдында ла бирешмәҫ!

Рамаҙан айы - Ҡөрьән айы, рамаҙан - рухты паклау, шайтандың йөрөй торған юлы тарайып, нәфсе һынала торған ай. Ошо һынауҙарҙы именлектә, сәләмәтлектә үтеп сығырға яҙһын, Аллаһы Тәғәләгә ололап, шөкөр итеп ҡылған доғаларығыҙ, тотҡан ураҙаларығыҙ ҡабул булһын!

ИЖАДХАНА

# БАТЫРЫБЫҘҘЫ...

## шәхес булараҡ асты трагедия

**Милли театр сәхнәһендә Бөйөк Ватан һуғышы темаһын яҡтыртҡан спектаклдәр араһынан Флорид Бүләковтың Советтар Союзы Геройы, легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовтың шәхесенә арналған героик жанрҙағы "...Шайморатов генерал..." трагедияһы (1998 йыл) айырым урын алып тора. Унда төп ролде башҡарыусы - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла ҮТӘШЕВ менән ошо спектакль хаҡында бәләкәй генә әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**



**Актер өсөн анығ героик шәхесте уйнауы нисек? Шәхес кисергән ваҡиғалар булған, ул унда ниндәй юлдан киткән, һөҙөмтәлә нимәгә килгән - быларҙың барыһы ла актерға ла, тамашасыға ла билдәле бит?**

- Берҙән, еңел, уның хаҡында тарихи материалдар табырға була ине. Икенсе яҡтан, ауыр, сөнки һәр кемдең үҙенең уйҙарында, аңында ошо шәхестең образы бар. Шул сәбәпле тамашасының генерал Шайморатовына тап килерме икән, тигән борсолоуҙар, хафаланыуҙар булды. Уға тиклем дә тарихи шәхестәрҙе - Салауатты (М. Кәрим "Салауат"), Сыңғыҙханды (Н. Абдыҡадиров "Сыңғыҙхандың һуңғы төйәге"), Әнғәм Атнабаевтың һуғыш темаһына бәйле "Ул ҡайтты" спектаклендә төп герой Тимербулатты һ.б. уйнағайным. Улар араһында Шайморатов генерал образы айырылып тора. Ул минең үҙем өсөн дә бик ҡәҙерле.

Флорид Бүләков уны бик яратып, матур итеп яҙған. Ғөмүмән, ижади төркөм бик ихлас эшләгәйнек. Режиссеры - Азат Нәҙерғолов, рәссамы - Таң Еникеев, композиторы - Урал Иҙелбаев, актерҙар Гөлли Мөбәрәкова, Нурия Ирсаева, Шамил Рәхмәтуллин, Эльвира Юнысовалар уйнаны. Уйҙар аша бөгөнгө көнгә хәтирә булып ҡына ҡайтҡан кеше булараҡ, генералдың кейеме лә аҡһыл төҫтә ине. Күптәр быны тәнҡитләне, хәрбиҙәрҙең кейеменә тура килмәй, тейеүселәр булды. Пьеса бер кешенең яҙмышына ғына түгел, Ҡ. Даяндың "Шайморатов генерал" йырына ла ҡоролғайны. Уның исеме лә ошо йырҙан өҙөп алынған, шуға ла ике яҡлап өс нөктәләр ҡуйылған. Композитор Урал Иҙелбаевтың музыкаһы ла ошо осорға сумырға шул тиклем ярҙам итә ине, унда ошо йырҙың көйө һуғыш мәхшәре - танкыларҙың, артиллерияның атыуҙары артында ишетелеп-ишетелеп ҡала ине. Бер яҡтан - Тыуған ил алдындағы бурыс, икенсе яҡтан, хәрби егеттәрен иҫән-аман алып ҡайтыуға бәйле атайҙарса борсолоуҙар - ике хис, ике ут араһында ҡалған шәхестең уйланыуҙары трагедияһының башынан аҙағынаса үтә. Һаман иҫләйем, спектаклдә ошондай һүҙҙәр бар ине: "Бөтөн Башҡортостандан иң яҡшы, иң көслө егеттәрҙе йыйып алып, уларҙы һәләк итергә юл ҡуйһам, халҡыбыҙ ҡәһәрләр мине". Шайморатов даншан көҫәгән парад генералы түгел, ул һалдаттары менән бергә утты-һыуҙы кисеүсе һәм шуның менән уларҙың ихтирамын яулаусы. Образды аса алғанмындыр, тип уйлайым, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы миңә ошо һәм тағы бер нисә спектаклдәрҙәге ролдәремде башҡарғанда юғары актерлыҡ оҫталығы күрһәткән өсөн тапшырылды. Сәхнәлә ул бик оҙаҡ барҙы тип әйтә алмайым, театрҙың үҙ йорто булмаған дәүерҙә сыҡҡайны. Шулай ҙа төп бинаға күскәс тә уйнап йөрөнөк.

**Атайығыҙ шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, ул һуғыш иҫтәлектәре менән уртаҡлаша инеме?**

- Тарихи шәхес тураһында мәғлүмәт табып була, тип әйтһәм дә, хәҙерге замандағы кеүек интернет юҡ ине, шуға ла беҙ репетициялар башлағанда башта һуғыш тураһында белгәнебеҙҙе бер-беребеҙгә һөйләй инек. Ә атайым һуғыш хаҡында һөйләргә яратманы. Киноларҙы ла ҡарамай ине, ҡайһы берҙә ҡараһа ла, һуғышты дөрөҫ күрһәтмәйҙәр, тиер ине. Элек бит гел бер яҡлы яҡтыртылды һуғыш та, еңеү ҙә - гел генә беҙҙекеләр уңышлы, һалдаттар күтәренке кәйефтә. Бөгөн килеп еңеү көнөн билдәләр алдынан инвалид һалдаттарҙан ҡалаларҙы таҙартҡандар тигәнерәк ҡурҡыныс мәғлүмәтте лә ишеткәнебеҙ бар.

Атайым да әрмелә үк кавалерияла хеҙмәт иткән. Һуғыш башланғас, 1941 йылдың 24 июнендә фронтҡа китә. Бер нисә тапҡыр яралана, контузия ала, госпиталдәрҙә лә дауалана. 1946 йылдың яҙында ғына күкрәк тултырып орден-миҙалдар тағып ҡайтып төшә. Унан һуң колхозды тергеҙеүгә бар көсөн бирә, ғаиләбеҙ ҙә ишле булды. Бер мәл һабантуйҙа ҡабырғаһын һындырҙы һәм мине, 10 йәшлек малайҙы, үҙе менән көтөү көтөргә алып йөрөнө. Шул мәлдә һуғыштағы ҡайһы бер ваҡиғаларҙы һөйләне миңә. Бер шулай атлы дивизия дошман ҡамауынан сыҡҡан саҡта атайымдың атының аяғына мина ярсығы тейә. Сатанлаған аттың саба алмаҫын аңлай. Ҡараһа, ҡаршыһына ат елә икән, атайым шуны тотоп менә. Был фашист аты булып сыға, уға беркетеп ҡуйырған сумкала бик мөһим документтар була. Документтарҙы штабҡа алып бара, портмонеһын трофей итеп алып ҡайта, ул һандыҡ төбөндә ятты. Тағы бер ваҡиға иҫтә ҡалған. 5 һалдатты, улар иҫәбендә атайым да була, командир менән бергә разведкаға ебәрәләр. Ҡамауға эләгәләр һәм алдарына ҡуйылған бурысты үтәй алмайҙар, командир менән 2 һалдат һәләк була. Атайымдар яралы көйө үҙ дивизияһына ҡайта. Әммә НКВД уларға ҡаршы эш аса - ҡурҡып, үҙебеҙҙекеләрҙе һәләк иткәнһегеҙ, тигән яла тағыла. Атырға тигән ҡарар ҙа була, барыһын да теҙеп, уны ҡысҡырып уҡып торғанда: "Туҡтағыҙ, атмағыҙ!" тигән тауыш ишетелә. Баҡтиһәң, үлгән тип иҫәпләгән һалдаттарҙың береһе тере ҡала. Ул эштең нисек булғанын һөйләп бирә һәм атайымдарҙы аҡлайҙар. "Бер минутҡа ғына һуңыраҡ килһә лә, беҙ иҫән булмаҫ инек", - тип һөйләгәйне атайым.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АШ ХУРЛАМА - ҠОҪТОРОР,

## ир хурлама - боҫторор

Мең көн күләгә булып йөрөгәнсе, бер көн кеше булыуын яҡшы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙҙең арала күгәрсен-кешеләр, бөркөт-кешеләр, ҡоҙғон-кешеләр бар. Һуңғылары күберәк.

**(И. Шевелев).**

Һәр кемдә Тереза инәй һәм Гитлер йәшәй. Уларҙың кемеһе еңергә тейеш икәнен үҙең һайлайһың инде...

**(Э. Кублер-Росс).**

Беҙ ҡоҙоҡ төбөндәге тәлмәрйен кеүек үтә һай уйлайбыҙ. Тәлмәрйен ҡоҙоҡтан өҫкә сыҡһа, уның донъяға ҡарашы күпкә киңәйер ине...

**(Мао Цзедун).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бөйөк батша Аҡбарҙың һарайында туғыҙ аҡыл эйәһе йәшәй. Батша уларҙы күп йылдар аҫрай. Әммә берҙән-бер көндө батша был аҡыл эйәләренең файҙаһыҙ булыуын, уларҙан бер ниндәй аҡылға ла өйрәнмәүен аңлап ҡала. Асыуланып китеп, аҡыл эйәләрен үҙенең янына саҡырып ала ла былай ти: "Һеҙҙе барыһы ла донъялағы иң аҡыллы кешеләр, тип раҫлай. Ләкин һеҙ нисәмә йылдар буйы минең эргәмдә йәшәйһегеҙ, ләкин мин һеҙҙән бер ниндәй аҡылға ла өйрәнмәнем. Шулай булғас, һеҙ минең һарайымда нимә эшләйһегеҙ ул?" Аҡыл эйәләренең береһе үҙе менән бер бәләкәй малайҙы алып килгән була. Аҡбарҙың телмәренән һуң был малай ҡысҡырып көлөп ебәрә. Батша асыулана һәм: "Һин кем алдында ауыҙ йырғаныңды беләһеңме, гонаһ шомлоғо? Әллә атайың һине был һарайҙа, батша алдында үҙеңде нисек торорға өйрәтмәнеме?" - тип ҡысҡыра. "Ғәфү ит мине, бөйөк батша! - ти малай. - Минең көлөүем һине мыҫҡыллауҙан түгел, минең көлөүем аҡыл эйәләренең һүҙһеҙ ҡалыуынан. Мин уларҙың өндәшмәүенең сәбәбен беләм, һинең, батшам, уларҙан бер нигә лә өйрәнә алмауыңдың да сәбәбен беләм". Аҡбар баланың балалыҡ сафлығы менән балҡыған күҙҙәренә һәм йөҙөнә оҙаҡ ҡына текәлеп ҡарап тора ла: "Улай булғас, бәлки, һин мине нимәгәлер өйрәтә алырһың?" - тип һорай. "Өйрәтәм!" - ти малай шатланып. "Өйрәт һуң улай булғас!" - ти батша. "Тик һин, батшам, нимәгәлер өйрәнеү өсөн башта тәхетеңдән төшөргә тейешһең. Тәхеткә мин менеп ултырғас, һин миңә батша булараҡ түгел, ә уҡыусы булараҡ һорауҙар бирергә тейешһең",- ти малай. Аҡбар, ысынлап та, тәхетенән төшөп, иҙәнгә ултыра. Ә малай батшаның тәхетенә менеп ултыра һәм: "Хәҙер инде, батшам, һорауҙарыңды бир!" - ти. Әммә Аҡбар бер ниндәй ҙә һорау бирмәй, ә башы менән эйелеп, малайҙың аяҡтарына ҡағыла һәм былай ти: "Һинең аяҡтарың янында һинең ихтыярыңа буйһоноп ултырыуҙан ғына ла мин күп нәмәгә өйрәндем. Рәхмәт һиңә!"**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 355